ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

16-22 июнь (һөтай) 2018

№24 (806)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуға хаҡы ирекле

**_Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Июнь аҙағына тиклем һеҙ 2018 йылдың икенсе яртыһы өсөн 50665 индекслы "Киске Өфө"гә 560 һум 82 тингә, Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм инвалидтары - 505 һум 08 тингә, 50673 индекслы (юридик ойошмалар һәм предприятиелар) "Киске Өфө"гә 590 һум 82 тингә яҙыла һәм теләгәндәр квитанцияларын редакцияға ебәреп, Йәдкәр Бәшировтың "Башҡорт хан"; Миләүшә Ҡаһармановaның "Күңелем йылы теләй"; Зөлфиә Ханнанованың "Мин - башҡорт, тип танышығыҙ"; Варис Ғүмәровтың "Тыуған яҡтың шифалы үҫемлектәре" һәм башҡа матур китаптарға эйә була ала. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!_**

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Инглизсә лә бел, әйҙә**



5

**Ҡотло ҡатын була,**

ҡотһоҙо була...



7

**Ниндәй бәйгелә ҡатнашһаҡ та,**

балаларыбыҙ беҙҙең менән бергә



8-9

**Һүҙен - үҙенә,**

үҙең һүҙеңә килешһә...



13

**ТВ-программа** 14

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Һеҙ һаман гәзит уҡыйһығыҙмы әле?

***Рәйлә ИШКИЛДИНА, мәғариф ветераны, Өфө районы Шамонино ауылы:*** Оҙаҡ йылдар махсус белемем буйынса химия етештереү тармағында эшләнем, аҙаҡ мәғариф өлкәһенә күстем, балалар уҡыттым, ләкин ҡайҙа ғына йәшәһәм дә, кем булып эшләһәм дә, гәзит-журнал минең тоғро юлдаштарым булды һәм әле лә уларҙан айырылғаным юҡ. Дөрөҫ, бөгөн мәғлүмәттең электрон саралары бик популяр булып китте, тик барыбер баҫма матбуғаттың үҙ өҫтөнлөктәре, үҙ йүнәлеше һәм йөкмәткеһе. Дөрөҫөрәге, интернет мәғлүмәттәре - йәнһеҙ машина продукцияһына оҡшаш, ә гәзит бит ул күңелгә йылылыҡ биреп тора, һинең хәл-әхүәлеңде белешеп, һинең менән һөйләшеп-серләшеп йәшәүсе дуҫ һымаҡ. Уның бит өйгә килгәнен ҡәҙерле ҡунаҡтай көтөп алыуы ни тора! Мәҫәлән, "Киске Өфө" - минең өсөн тап ана шундай гәзит тә инде. Мин уны донъяға сыға башлаған тәүге һанынан бирле уҡып киләм, һирәкләп булһа ла яҙышам да хатта. Беҙҙең Шамонинола "Киске Өфө"нө алдырып уҡыусылар байтаҡ, шуға һөйөнәм. Тик бына гәзит уҡымағандар ҙа күп. Гел генә донъя мәшәҡәтенә сумып, эш, тип йәшәп булмай. Башыңды күтәреп, тирә-яғыңа баҡ! Яңылыҡтар, донъя хәлдәре менән ҡыҙыҡһын! Нәҫелең, халҡың тарихын барла, үҙ телеңдә һөйләш! Шуны ла булдыра алмаһаң, ниндәй кеше һин һәм кешеме һин? Ашау-эсеү, донъя ҡыуыу хаҡына ғына тыуғандар гәзит уҡымай, беләм. Гәзит уҡыу өсөн дә кимәл, дәрәжә, аң кәрәк. Йәнә лә ташҡа баҫылғанды уҡыу, баһалау, шулар хаҡында уйлау һәм фекер йөрөтөү - үҙе бер һәләт әле ул, уйлап ҡараһаң. Тел хазиналарыбыҙ араһынан мәрйен теҙгән кеүек йөрәккә уйылырлыҡ һүҙҙәр эҙләп, мәҡәләләр яҙыусы журналистарыбыҙ хеҙмәтенә лә һоҡланам мин. Улар һөнәре лә еңел түгел, ә улар үҙ уҡыусылары - беҙҙең өсөн тырыша. Был тырышлыҡҡа нисек яуапһыҙ ҡалмаҡ кәрәк? Гәзит яҙғандарҙы уҡып, уның яҡшы геройҙарынан үрнәк алабыҙ. "Киске Өфө" һуңғы ваҡыт ағинәйҙәр хәрәкәте, башҡорттоң аҫыл милли кейемдәре, ошо юҫыҡта һәр төрлө конкурс-фестивалдәр хаҡында ла күп яҙа. Беҙ ана шуларҙы уҡып, Шамонинола ла ағинәйҙәр йәмғиәте ойошторop ебәрҙек, үҙебеҙгә милли кейемдәр хәстәрләйбеҙ, байрамдарҙа, һабантуйҙа ҡатнашабыҙ. Гәзиттәр бит бына шундай матур ғәҙәттәргә, йолалар үтәүгә лә ылыҡтырырға тейеш үҙ уҡыусыларын.

***Фәнур БАЙЫШЕВ, хеҙмәт ветераны, Иглин районы Аҡбирҙе ауылы:*** Әлеге ваҡытта мин Мәскәүҙәмен, ҡыҙымда ҡунаҡта ятам. Ҡайтыуыма, беләм, гәзиттәр йыйылып торасаҡ, рәхәтләнеп уҡырмын, тип йөрөйөм. Башҡорт баҫма матбуғатын алдырмаған сағым булманы, әле лә йыл да яҙылам. "Киске Өфө"нө яратып уҡыйым, рәхмәттән башҡа һүҙ әйтә алмайым: гәзит менән ҡәнәғәтмен. Халҡыбыҙҙың милли рухын күтәреү, туған телебеҙҙе һаҡлау, мәктәптәрҙә уны уҡытыу мәсьәләләрен ҡайта-ҡайта яҡтыртыусы баҫма булараҡ, уны алдырмаған кешеләрҙе аңламайым. Тимәк, уларҙа рух юҡ. Ә бындайҙарҙы бер генә һүҙ менән маңҡорт тип атайҙар. Бөтөн проблемаларыбыҙҙы ошо гәзит аша бергәләп, кәңәшләшеп хәл итә алыр инек тә бит... Совет заманында, гәзит - ул ойоштороусы, тип әйтмәйҙәр инеме ни? Матбуғаттың был функцияһын берәү ҙә тартып алманы бит, тик үҙебеҙ һәлкәү, битараф булғаныбыҙға әрнейем. Эште башҡорт гәзиттәренә яҙылыуҙан башлап ебәргәндә лә милли рухыбыҙҙы күтәреүҙә ҙур бер эш булыр ине.

**(Дауамы 2-се биттә).**



*Атай-әсәй, өләсәй менән "Киске Өфө" уҡыйбыҙ.*

12+

***✓ Халыҡ шағиры исемен йөрөткән Башҡорт гимназияһында ла гәзит уҡымаһалар, был ҙур гонаһ һәм хата булыр ине. Үҙем дә уҡыйым, уҡытыусыларыбыҙ һәм уҡыусыларыбыҙ ҙа матбуғат һүҙенә ихтирамлы мөнәсәбәттә икәнен беләм.***

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# БАРЫҺЫ ЛА ҮҘ ҠУЛЫБЫҘҘА

***Рәмзил ИШҺАРИН, РФ Дәүләт Думаһы депутаты:*** Мине халҡымдың көндәлек тормошо, ижтимағи хәле бик борсолдора, сөнки ул әлеге һымаҡ һүлпән һәм ситләштерелгән булырға тейеш түгел. Хәҙерге заманда тормош бик тиҙ үҙгәреп тора, уның ҡайһы яҡҡа үҙгәререн, тәү сиратта, кешеләр, уларҙың белеме, компетенцияһы хәл итә. Был иҡтисад, юғары технологияларға ғына түгел, социаль өлкәгә лә ҡағыла. Беҙ бөтәбеҙ ҙә социумдың бер ағзаһы, шуға күрә һүлпән генә эшләй, үҙ-үҙебеҙгә йомолоп йәшәй алмайбыҙ. Үҫеш өсөн заман процестарына әүҙем ҡушылырға кәрәк. Быны ата-бабаларыбыҙ аңлаған, бөгөн дә милләттәштәр беләлер, моғайын. Бөйөк мәғрифәтсе, шағир Мифтахетдин Аҡмулланың "Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк!" тигән юлдары ошо мәсьәләнең асылын тулыһынса сағылдыра. Уҡып, яңы белемдәргә эйә булған саҡта ғына халҡыбыҙ алға барасаҡ. Фән һәм технологияларҙың үтә тиҙ үҫешеүен иҫәпкә алғанда, был бигерәк тә мөһим. Бөтә урында, һәр эштә конкуренцияға һәләтле булырға тейешбеҙ. Мәҙәниәт өлкәһендәме, иҡтисадтамы, республикаламы йә унан ситтә йөрөйбөҙмө - былары мөһим түгел. Заман менән бергә атларға, ҡул ҡаушырып ултырмаҫҡа кәрәк. Ҡыҙғаныҫҡа күрә, милләттәштәр араһында "Алма беш, ауыҙыма төш", тип йәшәгәндәр күп. Ләкин береһе лә беҙҙең өсөн эшләмәйәсәк бит, үҙебеҙгә юлды үҙебеҙ ярып, уңыштарға өлгәшеп өйрәнергә кәрәк. Шул уҡ ваҡытта тарихты, традицияларҙы, мәҙәниәтте һаҡлауға айырым иғтибар бүленергә тейеш. Сөнки халыҡтың үткәне һәм киләсәге шуларға бәйләнгән. Күп тапҡыр тарих күсереп яҙылһа ла, халыҡ хәтерендә иң мөһим иҫтәлектәр һаҡлана. Шуға беҙ киләсәк быуындар Салауат Юлаев, төньяҡ амурҙары, Зәки Вәлидиҙе белгән кеүек, беҙҙең турала ла ғорурланып хәтергә алһын тиһәк, тарих һәм мәҙәниәтте һаҡларға, уларҙың үҙенсәлеге тураһында һөйләүҙән тыш, артабан үҫтереү өсөн дә тырышлыҡ күрһәтеү зарур.

Тағы ла шул: ҙур социум эсендә, эшкә урынлашҡанда булһынмы, вазифаға үрләтелгәндәме, айырым бер милләт вәкиле булыу ниндәйҙер өҫтөнлөктәр бирә, тип уйларға ярамай. Кеше тураһында тәү сиратта уның һәләттәренә, сифаттарына, оҫталығына ҡарап фекер йөрөтәләр, ә төҫ-башына йә милләтенә ҡарап түгел. Шул уҡ ваҡытта башҡа милләт кешеләре беҙгә хөрмәт менән ҡараһын өсөн тырышыу мөһим. Шул саҡта ғына башҡа халыҡтар башҡорттарҙың тарихын, мәҙәниәтен, телен өйрәнергә үҙҙәре теләп киләсәк. Бөтәбеҙ ҙә тыуған Башҡортостаныбыҙ сәскә атыуын теләй. Бының өсөн һәр кем үҙенә "Тыуған төбәгем үҫешһен өсөн мин ниндәй аныҡ эш башҡара алам әле?" тигән һорауҙы биреп ҡарарға һәм эште тәү сиратта үҙенән башларға тейеш. Был оҙайлы процесс, шулай ҙа беҙ, башҡорттар, бөтәһен дә дөрөҫ итеп эшләрбеҙ һәм үҫешкән, үҙгәреүсән донъяла лайыҡлы урыныбыҙҙы алырбыҙ, тип ышанам.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Һеҙ һаман гәзит уҡыйһығыҙмы әле?

(Башы 1-се биттә).

***Гөлназ ӘХМӘҘИЕВА, Мостай Кәрим исемендәге 158 -се Башҡорт гимназияһы директоры:*** Халыҡ шағиры исемен ғорур йөрөткән Башҡорт гимназияһында ла гәзит уҡымаһалар, был ҙур гонаһ һәм хата булыр ине. Үҙем дә уҡыйым, уҡытыусыларыбыҙ һәм уҡыусыларыбыҙ ҙа матбуғат һүҙенә ихтирамлы мөнәсәбәттә икәнен беләм. Мәктәбебеҙ китапханаһына бик күп гәзит-журнал, шул иҫәптән "Киске Өфө"нө лә алдырабыҙ. Был йәһәттән китапханасыбыҙҙан уңдыҡ: ул бөтөн килгән матбуғат баҫмаларын йыйып, төпләмә алып бара. Уҡыу залына инеп, теләһә ҡайһы ваҡытта бындай "өҫтәл китаптарын" ҡарап сығырға, мәғлүмәт алырға, фәһемле мәҡәләләр менән танышырға мөмкин. Ә матбуғат баҫмаларынан алыр һабаҡтар бик тос. Айырыуса "Киске Өфө"лә туған тел, халҡыбыҙ тарихы, боронғо традиция һәм ғөрөф-ғәҙәттәребеҙ хаҡында фәһемле мәҡәләләр, ошоғаса билдәле булмаған тарих биттәре, башҡорттоң рухи-мәҙәни хазиналары хаҡында ҡиммәтле мәғлүмәттәр бирелә. Бындай мәҡәләләр менән уҡыусылар ҙа, уҡытыусылар ҙа бик ҡыҙыҡһына. Ҡайһы ваҡыт берәй класта "буш сәғәт" килеп сыҡһа (йә көтмәгәндә уҡытыусы сирләп китәме), балалар ул дәресте китапхананың уҡыу залында үткәрә. Оҙон тәнәфестәрҙә лә килеп ултыра бик зиһенлеләре. Гәзиттәрҙе беҙ китапханаға алдырыу менән сикләнмәйбеҙ, коллектив подписка ла ойоштораБыҙ. Әлбиттә, йәштәр электрон-гәзиттәрҙе өҫтөнөрәк күрәләр, ләкин интернетты асып ебәргән кешелә гәзит ҡайғыһы китәлер ул, сөнки унда һәр төрлө мәғлүмәт бик күп һәм уларҙың, үкенескә күрә, хәҡиҡәткә тап килгәне-килмәгәне бар. Ә гәзит - ул маҡсатлы рәүештә ултырып, аңлы уҡыуҙы талап итә торған белем усағы. Үҙемә ҡалһа, мин матбуғат ике төрлө форматта ла йәшәргә һәм ҡулланылырға хаҡлы, тип иҫәпләйем. Ул саҡта уны уҡыусылар һаны ла күберәк була бит.

***Мөхтәр МОНАСИПОВ, мәғариф ветераны, Баймаҡ районы Ярат ауылы мәсетенең имам-хатибы:*** Әлбиттә! Бына әле генә "Киске Өфө"нөң сираттағы һанын алып, һөйөнөп торам: почта йәшнигемә һалып киткән хат ташыусыбыҙ, рәхмәт яуғыры. Мәғариф өлкәһендә эшләгән йылдарҙа ла, әле лә "Киске Өфө"лә үҙем өсөн кәрәкле материалдар табам, сөнки мәктәп тә, мәсет тә - тәрбиә үҙәге ул. Һеҙҙең гәзиттән тыш, тағы ла район гәзите "Һаҡмар"ҙы, Сибайҙа нәшер ителеүсе "Атайсал" төбәк баҫмаһын алдырабыҙ. Беҙҙең быуын уҡыуҙан тарыҡмаҫ та, ялҡмаҫ та: уҡыттыҡ та, үҙебеҙ ҙә уҡыуҙан туйманыҡ ғүмер-ғүмергә. Өйрәнгәс, уҡымай тороп та, йәшәп тә булмай. Тормош һулышын тойоп , мәғлүмәтле булып йәшәүгә етәме һуң! Ҡатыным Гүзәл Миҙхәт ҡыҙы ла гәзит ярата, ул да күп йылдар балалар уҡытты. Ҡайһы берәүҙәр әйтә ул: хәҙер яңылыҡтар менән интернет аша ла танышып барырға була, тип, ләкин, беренсенән, барыһы ла интернетта ултыра алмай бит. Унан һуң, сайттарҙа беҙҙең башҡорт донъяһына ҡағылған бөтөн мәғлүмәттәрҙе биреп тә бармайҙар. Ә бына гәзиттәрҙе башынан аҙағына тиклем яйлаптәмләп, ала-һала уҡырға була. Гәзит уҡығанда, күңел ял итә. Ғүмер буйы матбуғат баҫмалары менән дуҫ йәшәнек, бынан һуң да, Алла бирһә, шулай булыр, тип өмөтләнәм.

***Ғизетдин ИРҒӘЛИН, тарихсы, архив белгесе:*** Матбуғат баҫмаларынан айырылғаным юҡ, мөмкин тиклем хәбәрҙар булырға тырышам. Үҙәк гәзиттәрҙе лә, республика баҫмаларын да уҡыйым. "Аргументы и факты" гәзите, мәҫәлән, төплө аналитикаһы, тәнҡит материалдары, өр-яңы мәғлүмәттәре менән иғтибарҙы йәлеп итһә, үкенескә, урындағы баҫмалар хаҡында быны әйтеп булмай. Ҡайһы бер гәзиттәр бөтөнләй "тоҙһоҙ"ға әйләнде - тәнҡиттең әҫәре лә ҡалманы. Ниңә, беҙҙә бөтәһе лә ал да гөлмө әллә шулай? Нимәгә тотонма, ҡайҙа барма - етешһеҙлек, ришүәтселек, уғрылыҡ, эшһеҙлек, ялҡаулыҡ, эскелек... Хатта бит кеше сәләмәтлеге һәм ғүмере һағында торорға тейешле өлкә - һаулыҡ һаҡлау системаһында ла тәртип юҡ. Элек ана шундай кире күренештәргә ҡаршы көрәшеүҙә матбуғаттың роле бик ҙур ине. Тәнҡит власть органдарында, коллективтарҙа ентекле тикшерелеп, уның буйынса саралар күрелә һәм редакцияға был турала рәсми яуап килә ине. Ни өсөн бөгөн гәзиттәрҙең тираждары кәмей? Электрон баҫмаларҙы һылтау итергә генә торалар, юғиһә. Тәнҡит булһа, гәзитте бөгөн дә уҡыр ине халыҡ. "АиФ"тың тиражын ҡарағыҙ әле ана! Улар бит, Президентҡа оҡшамаҫ, Кремль ҡушмай, тип тормай бер ҙә. Объектив, ғәҙел тәнҡит, кирәһенсә, власть органдарына теге йә был мәсьәләне хәл итеүҙә булыша ғына, минеңсә.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**



## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Рәсәй Федерацияһының һәм Башҡортостан Республикаһының дәүләт наградаларын тапшырҙы. Бүләкләнгәндәр араһында "Башҡортостан Республикаһының халыҡ яҙыусыһы" тигән маҡтаулы исемгә лайыҡ булған Таңсулпан Ғарипова ла булды. Таңсулпан Ғарипова - Зәйнәб Биишеванан һуң "Республиканың халыҡ яҙыусыһы" тигән абруйлы исемде алған икенсе ҡатын-ҡыҙ яҙыусы.

✓ Башҡортостан Республикаһы Башлығы Рөстәм Хәмитовтың Указы менән Евгений Маврин Башҡортостан Башлығы хакимиәте етәксеһе итеп тәғәйенләнде. Башҡортостан Башлығының икенсе Указы менән Владимир Нагорный республика Башлығы Хакимиәте етәксеһе вазифаһынан бушатылды.

✓ Аҙыҡ-түлек сәнәғәтенең буласаҡ технологтары - Башҡорт дәүләт аграр университеты студенттары туңдырма етештереү технологияһы буйынса квалификация имтиханы тапшырҙы. Ғәҙәттәге сорттар менән бер рәттән, студенттар файҙалы тәм-том - май һәм шәкәр аҙ булған туңдырманы эшләне. Уны әҙерләү серен үҙҙәре уҡытыусылары менән бергә уйлап тапҡан.

✓ Республикала "Башҡортостандың иҫ киткес кешеләре" интернет-ресурсы эшләй башлай. Инициаторы - Башҡортостандың "Башҡорт энциклопедияһы" дәүләт автономиялы ғилми учреждениеһы. Ҡулъяҙмаларҙы түбәндәге адрес буйынса ебәрергә кәрәк: 450006, Өфө ҡалаһы, Революция урамы, 55, йәки электрон почтаға: imena@bashenc.ru.

✓ Башҡортостанда "Байыҡ" республика телевизион башҡорт балалар бейеү конкурсы үтә. Унда өс йәштән 15 йәшкәсә башҡарыусылар ҡатнаша. "Байыҡ-2018" конкурсының гала-концерты 21 июндә Өфөләге "Ватан" этнопаркында киске сәғәт 6-ла уҙа. Фестивалде ойоштороусылар - Башҡортостан Республикаһы Мәҙәниәт министрлығы, Өфө ҡала хакимиәте, "Башҡортостан" телерадиокомпанияһы.

✓ Ағымдағы йылдың биш айында Башҡортостанда ВИЧ-инфекциялы 19 балиғ булмаған асыҡланған. Республиканың СПИД-ты һәм йоғошло ауырыуҙарҙы иҫкәртеү һәм уларға ҡаршы көрәш үҙәге мәғлүмәттәре буйынса, уларҙың 15-е - 15 йәшкә тиклем һәм дүртәүһе 15-17 йәштә. Башҡортостанда ошо хәүефле сирҙе йоҡторған 250 бала йәшәй.

***✓ Мәктәптәрҙә тел, уны өйрәнеү даирәһенә ҡағылған мәҡәләләрҙе электән туплай килам. Уларҙы ҡарап ултырһаң, шул күренә: күп сәйнәйбеҙ, ә майы сыҡмай. Үҙ ҡаҙаныбыҙҙа ҡайнайбыҙ ҙа ҡайнайбыҙ.***



*КИЛЕШМӘЙЕМ!*

# ҒӘМӘЛДӘ ҠУЛЛАНЫЛҺЫН УЛ...

**Матбуғат - йәмғиәтте ҡуҙғатыусы, ойоштороусы ул. Күптән алдырып уҡыған һәм уға "фекер трибунаһы" тип ҡараған гәзитемә яҙыуым да ҡайһы бер хәлдәргә битараф булмауымдан. Шуларҙың береһе - һуңғы ваҡытта мәктәптәрҙә башҡорт телендә белем биреүгә ҡағылған һөйләшеүҙәр йышайыуы. Ҡайнаған ҡаҙанға ут өҫтәйбеҙ ҙә ул, тик һурпаһын татымайбыҙ һымаҡ.**

Мәктәптәрҙә тел, уны өйрәнеү даирәһенә ҡағылған мәҡәләләрҙе электән туплай килам. Уларҙы ҡарап ултырһаң, шул күренә: күп сәйнәйбеҙ, ә майы сыҡмай. Үҙ ҡаҙаныбыҙҙа ҡайнайбыҙ ҙа ҡайнайбыҙ. Күрәһең, эҙмә-эҙлекле, маҡсатлы эште ойоштора алмайбыҙ һымаҡ, сөнки ысын мәғәнәһендә фәһемле тәҡдимдәр етерлек бит. Мәҫәлән, башҡорт теленең башҡа диалекттарын "әҙәби тел" нормаһына тап килмәй тип табыуҙың үҙ милләттәштәребеҙҙе ситләтеүгә, үҙебеҙҙе тел яғынан ғына түгел, һан йәһәтенән дә сикләүгә килтереүен танымайбыҙ хәҙер. Был турала бөгөн гәзиттәр ҙә күп яҙа. 1990 йылда Стәрлетамаҡ та Баҡалы районынан бер егет менән осрашып һөйләшергә тура килгәйне. Ул: "Беҙ - башҡорттар, мәктәптә башҡорт телен өйрәнмәгәс, татарсараҡ һөйләшәбеҙ", - тигәйне. Ул егеттең Нефтекамала үткән "Оҙон көй" бәйгеһендә башҡортса йырлағанын телевизор аша күрергә тура килде аҙаҡ. Теле "татарсараҡ" булһа ла, асылы башҡортса икәнен шундуҡ тойҙом: башҡорт халыҡ йырын асылы, рухы булмағандар шулай ерәнә еткереп йырлай алмай. Быйыл Төмәстә үткән йыйында ла республиканың көнбайыш районынан килгән егет, һөйләшеүҙәре татарса булғанлыҡтан, башҡорттарҙың уларҙы үҙ итеп ҡабул итмәүҙәрен һөйләне. Бына былар барыһы ла дөрөҫ йүнәлештә эш алып бармауыбыҙ тураһында һөйләй түгелме һуң?

Тел - милләтте билдәләүсе. Тел ғорурлыҡ билдәһе лә. Беҙ, башҡорттар, телебеҙҙе, ошо ғорурлыҡты күтәрә алабыҙмы? Телдең һаҡланыуына, үҫеүенә булышлыҡ итәбеҙме? Эйе, арабыҙҙа үҙ телен онотмай, уны һаҡлауға хеҙмәт итеүселәр күп. Улай ғына ла түгел, сит милләт вәкилдәре лә телебеҙгә битараф түгел. Шул уҡ ваҡытта тел өйрәнеү буйынса хәл ителмәгән мәсьәләләр етерлек. Мәҫәлән, һүҙ запасыбыҙ ярлылана барыуына ла күҙ йомабыҙ. 2 томлыҡ "Башҡорт теле һүҙлеге"ндә байтаҡ һүҙҙәр үҙ урынын тапмаған. Мин 50-60 йыл үҙ төбәгемдә осраған һирәк ҡулланылған һүҙҙәрҙе теркәй барам. Ул һүҙҙәр хәҙер уйламағанда "уяна", матбуғатта, радиола күренеп ҡала ҡалыуға.

Юғары вазифалы берәй кеше телебеҙ, милләтебеҙ тураһында берәй һүҙ әйтһә, шуға ышанып-өмөтләнеп, шатлыҡ аҙаҙары сығарабыҙ. В. Путиндың Өфөлә: "...урыҫ телен, башҡорт телен өйрәнергә кәрәк", - тигәнен нисек күтәреп алдыҡ. Әммә ил Президенты үткән көҙ: "...изучаются родные языки за счет ущемления изучения русского языка", - тине. Дилбегә тағы тартылды ла ҡуйҙы. Б. Ельциндың: "Күпме йота алаһығыҙ, үҙаллылыҡты шул ҡәҙәре йотоғоҙ", - тигәненә ышанған кеүек хәл килеп сыға түгелме? Нисек кенә булмаһын, үҙаллы республикалар федерацияны тәшкил итһә лә, юғары фарман барыһын да еңә лә ҡуя.

Эйе, һис һүҙһеҙ, бөгөн тел, халыҡты һаҡлауға ҙур иғтибар бүлеү шарт. Тел һаҡланһын өсөн уның юғары кимәлдәге ҡулланылышын тәьмин итеү кәрәк. Башҡортостанда башҡорт теле дәүләт теле итеп иғлан иткән Закон бар. Республиканың башҡа милләт кешеләре дәүләт телен белмәй икән, тимәк, ул законға буйһонмай. Ғөмүмән, Башҡортостан Республикаһына исем биргән аҫаба халыҡ теле, дәүләт теле булараҡ башҡорт теленең ҡулланыу даирәһе киңәйергә тейеш, быны республика етәкселегә лә хәстәрләргә бурыслы.

"Российская газета"ла этнолог Полина Брзакованың Себергә сәйәхәте тәьҫораттары баҫылғайны. Эвенктар булмышын тасуирлай ул. Үҙ ир-егеттәре эскелеккә һалышыу сәбәпле, ҡыҙҙары урыҫтарға кейәүгә сығырға ынтыла икән. "Эвенк теле юҡҡа сыға, бөгөн был телдә һөйләшеүселәр юҡ кимәлендә. Эвенктар ҙа күп түгел. Халыҡ юҡҡа сыға", - тип яҙа ул. Ошоларҙан һабаҡ алһаҡ ине. Әлбиттә, тел тип күп зарланыу уңыш килтермәҫ. Ә ҡабул ителгән Закон үҙ көсөн күрһәтһен. Һәр хәлдә, ерен, байлығын йәлләмәйенсә башҡа милләттәр менән уртаҡлашҡан башҡорт халҡына ихтирам йөҙөнән булһа ла.

**Йәмних ҠАШҠАРОВ.**
**Баймаҡ районы**
**Әбделкәрим ауылы.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# РУХЫҢ ЮҒАРЫ БУЛҺА,

## ахырызаманды ла һиҙмәйһең икән

**Күршем "Киске Өфө" гәзитенең бер һанында баҫылып сыҡҡан "Һаңғыраузар менән тулған донъя" мәҡәләһен уҡып сыҡҡан да: "Әллә мин дә һаңғыраумы икән?" - тип, уйҙары менән уртаҡлашырға миңә ингән.**

- Бына мин башҡорт мәктәбен тамамланым, республикабыҙҙа башҡорт телендә баҫылған гәзит-журналдарҙы уҡып барам. Русса акцентһыҙ һөйләшәм. Немец телендә һүҙлек ярҙамында аралаша алам. Тик бына Рәсәй каналдары яңылыҡтарында ил етәкселәре һөйләгәндәрен тыңлаһам, үҙемде һаңғырау кеше итеп тоям. Тормош яҡшыра, тиҙәр. Аңлай алмайым, - ти күршем. - Бына элек минең эш хаҡым 160 һум ине, ә ике бүлмәле фатир өсөн 3 һум түләй инем. Ә хәҙер пенсиям 10 мең һум, фатир өсөн 5 мең һумдан артыҡ түләйем. Тормош яҡшыра буламы һуң шунан?

Мин уйланып тороп ҡалдым. ТВЦ каналындағы "Времечко" тапшырыуында яҙыусы-журналист Г. Быков әйткән һүҙҙәр иҫемә төштө: "Бер тапҡыр ахырызаман булған икән. Тик ул халыҡтың рухи юғарылыҡ кисергән, байрам иткән сағына тура килгән. Шуға халыҡ ахыры заманды һиҙмәй ҙә ҡалған", - тигәйне ул.

Эйе, рухтарыбыҙ ғына юғары булһын, берүк төшөнкөлеккә бирелә күрмәйек, тим мин дә. Ә фатир өсөн түләүҙәрҙең бик ашығыс рәүештә күтәрелеүен тәңкитләп, бер Элла Панфилова: "Иң элек, эш хаҡын, пенсияларҙы күтәрергә кәрәк ине, шунан һуң ғына торлаҡ-коммуналь хеҙмәт хаҡына сират етер ине", - тип бик дөрөҫ сығыш яһаны.

**Айгөл АХУНОВА.**

*ИШАРА*

**Бер көн автобустар туҡталышында бер йәш кенә ирҙең кеҫә телефоны аша саф башҡортса һөйләшеүен ишетеп ҡыуандым. Уның янына йүгереп барып: "Һин башҡортмо? Мин дә башҡорт!" - тип әйткем килде. Ошо Өфө ҡалаһының Калинин районында утыҙ йылдан ашыу йәшәп, урамда башҡортса һөйләшкән кешене осратҡаным юҡ ине. Үҙ телемдә БСТ каналында алып барылған тапшырыуҙарҙы ҡарап, гәзит, журнал, китаптар уҡып ҡына танһығымды ҡандырам.**

# ҮҘЕБЕҘСӘ ҺӨЙЛӘШ...

## өйҙә лә, урамда ла ишетелһен

...Мәскәүҙә мин уҡыған уҡыу йорто Савелов вокзалы янында ине, ә ҡстахана быҙ Кремлдән алыҫ түгел. Аҙнаһына ике тапҡыр ҫстаханала шөғөлләнә инек. Бер көн уҡыуҙан ҡайтышлай, "Литература народов СССР" тип аталған китап магазинына инеп, Әнғәм Атнабаевтың шиғырҙар китабын һатып алдым да хистәргә бирелеп атлап килам. Ҡаршыма бөхтә кейенгән, бөҙрә сәсле ирҙең ышаныслы атлап килеүенә иғтибар иттем. "Матур атлай" тип уйланым да, ул ир үтеп киткәс, ҡапыл танып ҡалдым: "Бәй, был бит беҙҙең Мостай Кәрим дәһә!" Мәскәү тигән ҙур ҡалала Башҡортостаныбыҙҙың ҙур шағирын осратырмын тип, кем уйлаған һуң? Ә ул, башҡорт ҡыҙы, йәштәшы үтеп бара, тип уйламағандыр ҙа, әлбиттә. Ул йылдарҙа Мәскәүҙә ҡытай студенттары бик күп ине шул. Ә мин башҡорттан бигерәк, ҡытай ҡыҙына оҡшағанмын, хатта ҡытай студенттары бутап, миңә ҡытайса һүҙ ҡушалар ине. Тиҙ генә боролоп Мостай Кәримде ҡыуып етеп: "Һаумыһығыҙ, Мостай Кәрим!" - тип әйтергә ине лә, ҡыйыулыҡ етмәне шул. Әгәр ҡыйыулығым етеп, уға өндәшә ҡалһам, шағирыбыҙ ҙа йәштәшын осратыуына шатланыр ине, тип уйлайым хәҙер. Ошо хәтирәмә өҫтәп, Мәскәүҙә китап магазинында күңелем теләгән башҡорт китаптарын һатып алып була ине, тигән һүҙҙәремде лә әйтһәм, хәҙер күптәр ышанмаҫ. Сөнки Өфөнөң Калинин районы биҫтәһендә башҡорт китаптарын табырмын тимә.

Бына шулай, Мәскәүҙә Мостай Кәримде осратып, аптырағандай, үҙ илемдә бер башҡортто осратып аптырайым. "Һин башҡортмо? Мин дә башҡорт!" - тип әйткем килеп, тағы ла ҡыйыулығым етмәй, илай яҙып юлымды дауам иттем...

**Фәүзиә ЯХИНА.**

# Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Мәсетле районының Дыуан-Мәсетле ауылы мәктәбе бинаһына Советтар Союзы Геройы Ҡотдос Латиповҡа таҡтаташ ҡуйылды. Легендар летчик-штурмлаусы Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында 134 хәрби осош яһаған, 22 танкты, 40-лаған автомашинаны, биш самолетты, ҡорал, хәрби припас һәм техника менән тулы ике тимер юл эшелонын, туғыҙ артиллерия батареяһын, 450 һалдат һәм офицерҙы юҡ иткән. Башҡортостандан һуңғы Советтар Союзы Геройы 2016 йылдың 23 декабрендә донъя ҡуйҙы. Ул Мәскәүҙәге Троекуров зыяратында ерләнгән.

✓ Ағымдағы йылдың тәүге өс айында Башҡортостандан 10,8 мең кеше республиканан күсенеп киткән. 9,1 мең кеше элекке йәшәү урынын Башҡортостанға алмаштырған. Тағы ла 19 меңдән ашыуы республика эсендә күсенгән, тип хәбәр иттеләр Башстаттан. Быйылғы ғинуар-март йомғаҡтары буйынса, Башҡортостанда халыҡтың дөйөм миграция иҫәбенә кәмеүе 1 747 кеше тәшкил иткән. Сағыштырыу өсөн: бер йыл элек был күрһәткес 1 653 кеше булған.

✓ 25 һәм 26 майҙа Башҡортостанда 2134 уҡыусы сит телдәрҙән төп дәүләт имтиханы тапшырҙы. Күпселек балалар инглиз телен һайлаған - 2096 уҡыусы. Уртаса балл - 54,9, уртаса баһа - 4,3. Нисә кешенең бишлегә һәм икелегә яҙғаны хаҡында Башҡортостандың Мәғариф министрлығы хәбәр итмәне. Ләкин кемдәргә насар билдә ҡуйылған, улар был имтиханды ҡабаттан тапшыра алмай. Тесты мотлаҡ фәндәр - рус теленән һәм математиканан ғына яңынан яҙыу мөмкинлеге бар.

✓ Социаль страховка фондының республика бүлексәһендә эшләп йөрөгән кешеләргә беренсе баланы ҡарау буйынса пособиеның минималь суммаһын атанылар. 1 майҙан ул 5134 һум тәшкил итә. Был 2018 йылдың 1 майынан яңы минималь хеҙмәт хаҡын билдәләүгә бәйле - 11 163 һум. Ошо датаға тиклем тәғәйенләнгән пособиелар әүәлге күләмдә ҡала.

✓ Баймаҡ районында "Аҫылташ" башҡорт мәҙәниәте республика форумы үтә. Сара 5-8 июлдә Граф күле буйында уҙа. Рәсми рәүештә теркәү башланған, ул 25 июнгә тиклем бара. Форумда республиканан һәм сиктәш төбәктәрҙән 18-30 йәштәрҙәге йәш кешеләр ҡатнаша ала.

БАШ ҠАЛАМ



# БАЙРАМ...

## итте хайран

**Рәсәй көнө, Салауат Юлаевтың тыуыуына - 264, Өфө ҡәлғәһенә нигеҙ һалыныуға 444 йыл тулыуға арналған байрам саралары Салауат Юлаев һәйкәленә сәскәләр һалыуҙан башланды.**

Сарала Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов, ҡала Советы рәйесе Валерий Трофимов, ҡала райондары хакимиәттәре башлыҡтары, шулай уҡ Эритрея дәүләтенең Асмэра ҡалаһынан рәсми делегация ҡатнашты. Артабан ҡунаҡтар байрам айҡанлы ойошторолған төрлө сараларҙы ҡараны. "Ете ҡыҙ" фонтаны янында Шиғриәт көнө үтте. Башҡортостандың халыҡ шағиры Назар Нәжмиҙең тыуыуына 100 йыл тулыуға арналған юбилей саралары сиктәрендә "Өфө йүкәләре" Асыҡ ҡала вокаль фестивале лауреаттары ҡатнашлығындағы гала-концерт та биҙәне был көндө. Рим Хәсәновтың Назар Нәжми һүҙҙәренә яҙған "Өфө йүкәләре" йыры күптән инде баш ҡаланың үҙенсәлекле гимнына әүерелгән. Был конкурста иһә үҙ ҡорона профессиональ йырсылар менән бер рәттән һәүәҫкәр башҡарыусыларҙы ла йыйҙы. Еңеүселәргә бүләктәрҙе Ирек Ишмөхәмәт улы тапшырҙы.

"Өфө-Арена" алдындағы майҙанда KFC Battle Fest ойошторолдо, уның программаһында футбол, баскетбол, бейеүҙәр, хип-хоп, вокал, фитнес һәм воркаут инде. Әүҙем йәштәр үҙҙәрен ошо спорт төрҙәрендә һынап ҡараны, кумирҙары менән аралашты. Якутов паркында "Салауат варисҭары" Асыҡ Бөтөн Рәсәй милли көрәш буйынса турнир үтте. Көн дауамында 6 ауырлыҡ категорияһындағы 80-дән ашыу көрәшсе төп приз - "Лада Гранта" автомобиле өсөн бил һынашты. Турнирҙың абсолют еңеүсеһе тип Ульяновск өлкәһенән Сергей Павлик билдәләнде. "СНЭМА-Сервис" ойошмаһы директоры Альберт Баһауетдинов уға автомобиль асҡыстары тапшырҙы. Якутов паркында ҡунаҡтар ретро автомобилдәр, ҡул эштәре күргәҙмәләре менән таныштты.

Ленин исемендәге майҙанда үтте төп байрам саралары. Һөнәрселәр, биҙәүҡулланма сәнғәте оҫталары күргәҙмәһе, шулай уҡ "Балалар. Техника. Ижад" техник ижад конкурс-күргәҙмәһе эшләне. Концерт алдынан Өфөнөң йәш граждандарына тантаналы рәүештә паспорт тапшырылды. Баш ҡала мәктәптәрендә белем алыусылар - олимпиадалар, фәнни конкурстар, спорт бәйгеләре еңеүселәре Өфө хакимиәте башлығы ҡулынан Рәсәй гражданины паспорты алды. Концерт программаһы Радик Юлъяҡшиндың сығышы һәм фейерверк менән тамамланды.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ



**Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов "Вся Уфа" телеканалының тура эфирында граждандарҙың һорауҙарына яуап бирҙе. Һорауҙар бер аҙна алдан уҡ килә башлаған һәм уларҙың дөйөм һаны меңдән арҭкан. Ҡала мөхитен төҙөкләндереү беренсе урында торһа, торлаҡ-коммуналь хужалыҡ, йорттарҙы капиталь ремонтлау буйынса килгән мөрәжәғәттәр дөйөм һандың - 32, йәмәғәт транспорты эше, күперҙәрҙе һәм юлдарҙы ремонтлау 23 процентын алып тора. Ҡалған өлөш - маршрут селтәрен, балаларҙың йәйге ялын ойоштороу һәм ҡалалағы парковкалар мәсьәләһенә тура килә.**

# ӨФӨНӨҢ АНЫҠ ЙӘШЕН...

## ғалимдар тәҡдим итергә тейеш

Был юлы ошо бихисап һорауҙар рәтендә "Киске Өфө" гәзите уҡыусыларынан башҡорт халҡына, уның тарихына, мәҙәниәтенә, рухиәтенә ҡағылышлы һорауҙар ҙа яңғыраны. Сибайҙа башҡорт тоҡомло аттар үрсетеү менән шөғөлләнгән милләттәшебеҙ Денис Өмөтбаев баш ҡаланың монументаль сәнғәтенә ҡағылышлы һорау бирҙе: "Өфө йылдан-йыл үҙгәрә, был, һис шикһеҙ, ҡыуаныслы. Был - ҡала һәм республика хакимиәттәренең ҙур ҡаҙанышы. Әммә республикабыҙ, мәҙәниәтебеҙ, төбәгебеҙ тап монументаль сәнғәтте үҫтереүҙә сикһеҙ ҡеүәткә эйә. Ҡала халҡының, республикабыҙҙың баш ҡалаһына килгән ҡунаҡтарҙың иғтибарын йәлеп итеү маҡсатында эпик образдарҙы мәңгеләштереп, уларға һәйкәлдәр ҡуйыу мотлаҡтыр, тип уйлайым. Әлбиттә, бында күҙ уңында Урал батыр образын тотам. Беҙҙә әлегә тиклем уға һәйкәл юҡ. Ә бит тап ошо образ менән Урал тәбиғәте, төбәктең фәлсәфәһе тығыҙ бәйләнгән, - тине Денис. - Шулай уҡ мифик ат - Аҡбуҙатҡа ла һәйкәл кәрәк, сөнки республика йылҡысылыҡ төбәге тип иҫәпләнә. Башҡорт аттары хәрби походтарҙа Урал тауҙарынан Елисей ҡырҙарына, Башкавдивизия составында рейхстагка тиклем барып еткән. Әммә уларға һаман тейешле иғтибар бирелмәгән. Киләсәктә ҡала хакимиәте халҡыбыҙҙың тарихына, мәҙәниәтенә ҡағылышлы арт-объекттар, һәйкәлдәр эшләүгә иғтибар бүлерме һәм инициатива күрһәтерме?"

Ирек Ишмөхәмәт улы белдереүенсә, был мәсьәлә буйынса ҡала хакимиәте БР Мәҙәниәт министрлығы менән биш йыл дауамында һөйләшеүҙәр алып бара. Барлыҡ ошо проекттарҙы тормошҡа ашырыу өсөн эшләнмәләр бар. "Яҡын арала йәки яҡын йылдарҙа министрлыҡ ижади конкурс иғлан итер, тип өмөтләнәм, - тине ҡала хакимиәте башлығы. - Беҙ иһә эште "Ете ҡыҙ" фонтанынан башланыҡ та инде. Бөгөн ул ҡаланың иң матур өс иҫтәлекле урыны рәтендә. Артабан "Урал батыр" эпосы буйынса һыуҙан сығып килгән аттар образын һынландырырға планлаштырғайныҡ. Ул фонтан рәүешендә "Башҡортостан" концерт залы эргәһендә урын алырға тейеш ине. Бик матур эскиздар бар. Бында үҙешмәкәрлек эштәре бармай, эш юғары художество кимәлендә башҡарылырға тейеш. Бының өсөн ҙур суммала аҡса кәрәк. Был Урал батырға бағышланған монументҡа ла ҡағыла.

Шулай уҡ республиканың төп йылғаларын һынландырған фонтан-һәйкәл кеүек ҡыҙыҡлы проект та ҡаралды. Европала шундай монументтар бар һәм улар бик матур күренә. Дөйөмләштереп әйткәндә, фекерҙәр һәм тәҡдимдәр бик күп. Ул ғына ла түгел, беҙ барлыҡ рәссамдарҙың, скульпторҙарҙың ижади ҡеүәтен берләштерергә тырышабыҙ. Ә инде ниндәй генә арт-объект булмаһын, уны тормошҡа ашырыу өсөн бюджетта аҡса булыу йәки проектты финансларға әҙер булған меценат йәки бағыусы табылыуы мөһим".

Тағы бер уҡыусыбыҙ Булат Ғәлиев ҡала властары Өфөгә нигеҙ һалыныуҙың аныҡ датаһын билдәләп, йылдарға һуҙылған бәхәскә ҡасан нөктә ҡуясағы менән ҡыҙыҡһынды. Был теманы ҡала хакимиәте башлығы мөмкинлек сыҡҡан һайын айырым билдәләп китергә тырыша һәм һәр саҡ төплө аңлатма бирә. "Ҡаланың йәшенә килгәндә, ул Ҡаҙандан күпкә боронғораҡ һәм быны көлкөгә һабыштырмауығыҙҙы һорайым (быныһын ул тура эфирҙы алып барған, был һорауға үҙ иронияһын өҫтәгән Э. Хәйруллинға төбәп әйтте). Беҙҙең ғалимдар һәм археологтар тикшергән биш ҡаласығыбыҙ бар, уларҙың йәше 1500 йылдан алып 2500 йылға тиклем. Билдәле "Өфө-II" ҡаласығы әлеге ваҡытта өлөшләтә ҡаҙылған. Әгәр иғтибар итһәгеҙ, бер нисә йыл инде беҙ ҡалаға түгел, ә Өфө ҡәлғәһенә нигеҙ һалыныуҙы байрам итәбеҙ. Быйыл был дата өс 4-ле (444 йыл) менән билдәләнә. Стрелецтар килгәндә үк бында ҡаласыҡ булған. Ул бөгөнгө Сочи урамы буйлап Йәшел сауҡалыҡ яғына 10 саҡырымға һуҙыла. Был хаҡта XVI-XVII быуаттар документтарында, карталарҙа теркәлгән. Аныҡ дата билдәләүгә килгәндә, мин дә, вазифа биләүсе башҡа чиновник та быны үҙ яуаплылығына алмаясаҡ, сөнки уны ғалимдар, археологтар, тарихсылар әйтергә һәм тәҡдим итергә тейеш..."

"Киске Өфө" гәзитен уҡыусы Рәсил Бүкәнбаевты ҡасан "төньяҡ амурҙары"на һәйкәл ҡуйылыу мәсьәләһе ҡыҙыҡһындырҙы. "Быйыл Нидерландтарҙа, Эйсел йылғаһы буйында 1813 йылда башҡорт полктарының Нидерландтарҙы Наполеон баҫҡынсылығынан азат иткән башҡорт яугиры хөрмәтенә һәйкәл ҡуйылды. Шулай уҡ Германияла, Польшала "төньяҡ амурҙары"на һәйкәл бар", - тип нигеҙләне ул үҙенең һорауын. "Башҡорттар Рәсәй империяһының бик күп походтарында ҡатнашҡан, батырлыҡтар, Тыуған илгә тоғро хеҙмәт өлгөһө күрһәткән һәм ул һәйкәл "төньяҡ амурҙары"на булһынмы, триумфаль арка эшләү булһынмы, уҡ-һаҙаҡҡамы, хәрби ҡаҙаныштарғамы - беҙ ата-олатайҙарыбыҙҙың иҫтәлеген мәңгеләштереү тәҡдимдәрен ҡабул итергә әҙербеҙ", - тип белдерҙе Ирек Ишмөхәмәт улы.

Әйткәндәй, быйыл беренсе тапҡыр тапшырыу менән бер рәттән, И. Якутов исемендәге паркта "Асыҡ ҡала" телевизион күсмә студияһы эшләне. Унда граждандар тура эфирға һорауҙарын биреү менән бер рәттән, шунда уҡ ҡаланың төрлө хеҙмәттәре һәм предприятиелары вәкилдәре менән күҙгә-күҙ осрашып, аныҡ яуап ала алды.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ Республикала "Башҡортостандың иң яҡшы тауарҙары" конкурсына йомғаҡ яһалды. Унда 59 предприятиеның 114 төр продукцияһы һәм хеҙмәттәре күрһәтелгәйне. Еңеүселәр иҫәбендә - бик күп агросәнәғәт комплексы предприятиелары, тип хәбәр иттеләр Башҡортостан Ауыл хужалығы министрлығынан. Конкурс лауреаттары продукцияға "Башҡортостандың иң яҡшы тауары" логотибын ҡуйыу һәм 21 йыл ғәмәлдә булған "Рәсәйҙең иң яҡшы 100 тауары" программаһының федераль этабында ҡатнашыу хоҡуғын алды.

✓ Башҡортостанда 23 үҙәк һыу тәьминәте сығанағында һыу нормаға тап килмәй. Республикала улар ике мең берәмектән ашыу. Процент нисбәтендә был 1 проценттан саҡ ҡына күберәк. Ошо мәғлүмәттәр Роспотребнадзорҙың төбәк идаралығында баҫылып сыҡҡан. Шуны билдәләп үтергә кәрәк: 2017 йылда белгестәр Башҡортостандағы 1402 үҙәк һыу тәьминәте сығанағынан өлгөләр алғайны. Уларҙың 10 процентынан ашыуы санитар нормаларға тап килмәгән. Боҙоуҙар йышыраҡ ҡатылыҡ нормаларына һәм тимергә ҡағыла.

✓ Башҡортостандың Урман хужалығы министрлығы Әбйәлил, Иглин, Нуриман, Стәрлетамаҡ һәм Туймазы урмансыҡтары биләмәһендә бәләкәй эшҡыуарлыҡ өсөн урман участкаларын ҡуртымға алыуға аукцион уҙғара. Участкалар ағас әҙерләү, умартасылыҡ, туризм өсөн тәғәйенләнә. Уларҙың майҙаны - 0,4-1690 гектар. Ҡуртымдың башланғыс хаҡы - 152,5 мең һумдан 2 миллион һумға тиклем.

✓ Башҡортостанда IV "Бөйөк дала" асыҡ республика башҡорт рок фестивале ойошторола. Сараны 30 июндән 1 июлгә тиклем Хәйбулла районы Аҡъяр ауылында уҙғарыу күҙаллана. Ғаризалар 25 июнгә тиклем ҡабул ителә. Адресы: 453800, Башҡортостан Республикаһы, Хәйбулла районы Аҡъяр ауылы, Салауат Юлаев урамы, 43, район мәҙәниәт йорто. Телефон/факс 8 (34758) 2-15-58, akyar-rdk@mail.ru.

✓ Башҡортостан шифаханаларында ял итеү һәм дауаланыу осһоҙланған, тип хәбәр итә республика статистиктары. Апрель аҙағына Башҡортостан шифаханаларына юлламалар - 4 процентҡа, ә ял йорттарына 7 процентҡа арзанайған. Уның ҡарауы, еврозонаға экскурсия сәйәхәттәре республика халҡы өсөн 6-6,2 процентҡа ҡиммәтләнгән. Испанияла ял итеү хаҡы 2,7 процентҡа артҡан.

АФАРИН!



# ИНГЛИЗСӘ ЛӘ БЕЛ, ӘЙҘӘ

**Ф. Мостафина исемендәге 20-се Өфө ҡала башҡорт гимназияһында Америка-Башҡорт интерколледжының "ACCESS/ДОСТУП" халыҡ-ара гуманитар белем биреү программаһы буйынса сираттағы йәйге лагерь асылды.**

Ойоштороусылар йыл да белем биреү программаһына уҡыусыларҙы ҡыҙыҡһындырырлыҡ яңылыҡтар индереп тора. Быйыл йәйге лагерь ваҡытында үткәреләсәк тренингтар тағы ла төрләндерелгән. Тәүге тапҡыр мәғлүмәти технологиялар буйынса тренинг уҙғарыла, унда үҫмерҙәр компьютер программалары, проекторҙар, интерактив таҡталар менән ҡулланырға, үҙҙәренең проекттарын яҡларға өйрәнә. Шулай уҡ лагерь ваҡытында брейк-данс, гитара, драма клубтары эшләйәсәк һәм уҡыусыларҙы был һөнәрҙәргә инглиз телендә уҡытасаҡтар. Быйыл тағы бер мөһим проектты тормошҡа ашырҙылар, йәғни Башҡортостан Республикаһының 100 йыллығына һәм Өфө ҡалаһы Совет районының 80 йыллығына арнап, ҡаланың тарихи урындары буйлап ҙур экскурсия үткәрҙеләр. Мәскәүҙән, Америка Ҡушма Штаттарынан килгән ҡунаҡтар менән бергә уҡыусылар ҙа Өфөнөң билдәле тарихи ҡомартҡылары урынлашҡан урындар буйлап сәйәхәттә йөрөнө. Америка-Башҡорт интерколледжы директоры Вячеслав Швайко әйтеүенсә, Өфө ҡалаһының бай тарихлы булыуын күптәр белһә лә, факттарҙы системалы рәүештә өйрәнеү етмәй. Был экскурсия барышында билдәле шәхестәр, тарихи ваҡиғалар тураһында мәғлүмәттәр белергә, уҡыусыларҙың Мостай Кәрим, Сергей Аксаков кеүек шағирҙарҙың шиғырҙарын яттан һөйләүен тыңларға мөмкин булды. Өфө ҡалаһы буйлап экскурсия ваҡытында инглиз, рус, башҡорт телмәре яңғыраны.

- Беҙҙең был халыҡ-ара гуманитар белем биреү программаһы уңышлы ғына эшләп килә, тик ҡыҙғанысҡа күрә, ҡабул итеү урындары әҙәйҙе. Уңыш ҡорбаны булдыҡ, сөнки беҙҙең эште күреп, хәҙер Рәсәйҙең 35 төбәгендә ошо уҡ программа буйынса эш башлап, аҡса йәһәтенән ҡыҫынҡы хәлдә ҡалдыҡ. Быйыл беҙҙең программаны 28 уҡыусы тамамлай. Был киләсәктә инглиз теле кәрәк булырын аңлы рәүештә белеп, проектта ҡатнашырға теләгән 14-17 йәшлек үҫмерҙәр. Улар инглиз телен һөнәр алыу, халыҡ-ара компанияларҙа эшләү өсөн мөһим бер ҡорал итеп күрә", - тине Вячеслав Швайко әңгәмәләшкәндә.

Ф. Мостафина исемендәге гимназияның инглиз теле уҡытыусыһы Диана Закирова әйтеүенсә, программала ҡатнашырға теләүселәр күп. Уҡыусылар менән быйыл профилле лагерҙа Америка-Башҡорт интерколледжы уҡытыусылары Джереми Севидж, Элизабет Хьюс, гимназияның инглиз теле уҡытыусыһы Гүзәл Моратова даими эшләй. Диана Диас ҡыҙы инглиз теленән уҡыусыларға ошо рәүешле белем биреүҙең мөһимлеген һыҙыҡ өҫтөнә алды, сөнки ике йылдан был предмет буйынса берҙәм дәүләт имтиханын тапшырыу мотлаҡ талапҡа әйләнеүе бар. Ә уҡыусыларға килгәндә инде, улар йәйге каникулдарын файҙалы, ҡыҙыҡлы итеп үткәрә алыуына сикһеҙ шат. Быйыл 8 синыфты тамамлаған Булат Күсәрбаев халыҡ-ара гуманитар белем биреү программаһы буйынса шөғөлләнеү инглиз телен яҡшыраҡ өйрәнеү өсөн генә түгел, һәләттәрендә асыуға ла булышлыҡ итә, тип иҫәпләй. Алтынсы синыфты тамамлаусы Эмилия Хисмәтуллина һәм Айһылыу Фазылйәнова ла йәйге ялдарында гимназияға килеп йөрөүҙән, уҡыуҙы дауам итеүҙән бер ҙә ялҡмаған. "Лагерға төрлө синыфтарҙан йыйылған балалар йөрөй, быйыл бишенсе, алтынсы, етенсе һәм һигеҙенсе синыф уҡыусылары бар. Беҙҙең белем кимәлдәребеҙ төрлөсә булһа ла, береһе лә үҙен уңайһыҙ тоймай бында. Сөнки бөтәһе менән дә тигеҙ һөйләшәләр", - ти Айһылыу.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Америка-Башҡорт интерколледжы программаһының әһәмиәте уҡыусыларға инглиз теленән белем биреү йәһәтенән генә түгел, башҡорт халҡының һәм башҡа халыҡтарҙың мәҙәниәттәрен, тарихын тел аша өйрәтеү менән дә үҙенсәлекле. Ф. Мостафина исемендәге 20-се Өфө ҡала башҡорт гимназияһының был юҫыҡта ярайһы ғына тәжрибәһе бар. Һәм был тәжрибәне республикабыҙҙа тағы ла киңерәк таратырға кәрәк. Ни тиһәң дә, инглиз теле яҡын киләсәктә, урыҫ теле кеүек, көндәлек кәрәкле телгә әйләнмәҫ, тимә.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

*ҠЫҪҠАСА*

# КҮП БАЛАЛЫЛАРҒА...

✓ **Балалы ғаиләләр өсөн ипотека ставкаһын кәметеү буйынса льготаларҙы киңәйтәләр. Ошо хаҡта илебеҙ Президенты Владимир Путин "тура бәйләнеш" барышында белдерҙе.** Асыҡланыуынса, өс балалы бер ғаиләгә закондағы етешһеҙлектәр сәбәпле ипотека ставкаһын кәметеү буйынса льготалы программала баш тартҡандар. Закон буйынса льгота икенсе йәки өсөнсө бала тыуғанда ҡарала, ә дүртенсеһе тыуғанда уны бирмәйҙәр. Президент министрҙар кабинеты ҡарарындағы хатаны төҙәтергә һәм күп балалыларға ипотека ставкаһын кәметеү буйынса льготаны киңәйтергә вәғәҙә бирҙе. Уның һүҙҙәренсә, был бюджеттан яҡынса 9 миллиард һум талап итәсәк. Шулай уҡ дәүләт башлығы ипотека буйынса ставканы 7 процентҡа тиклем кәметеү бурысы ҡуйҙы. "Бында бөтәһе лә бюджет сығымдары менән бәйле. Әммә хөкүмәт һәм Үҙәк банкы 7 процентҡа ынтылырға тейеш", - тине Владимир Путин.

✓ **Башҡортостан автотранспортты газ-мотор яғыулығына күсереү буйынса Рәсәйҙә беренсе урынды биләй.** Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов халыҡ-ара экология форумының пленар ултырышында ошо хаҡта хәбәр итте. "Беҙҙә 14 газ заправкаһы эшләй, 2020 йылға тиклем тағы алтауҙы төҙөргә тейешбеҙ. Был ҡоролмалар бәләкәй һәм арзан түгел, техник яҡтан ҡатмарлы ғына, - тине төбәк етәксеһе. - "Газпром" республика менән бергә ошо программаны алып бара, бөгөн иһә газ яғыулығында эшләгән машиналар байтаҡ, ошо автомобилдәр бүлеп сығарған матдәләр эске яныу двигателдәре менән сағыштырғанда бик аҙ". Шуның менән бергә республика Башлығы бөгөн Өфөлә ябай яғыулыҡта эшләгән транспорттың һауаны бысратыусы төп сығанаҡ булып тороуын билдәләне. "Әгәр Европаға барһағыҙ, ҡеүәтле, ҙур джиптарҙы күрмәсһегеҙ, - тине Рөстәм Хәмитов. - Унда автомобилдәр бәләкәй, ҙур булмаған ғаиләгә, бер-ике кешегә иҫәпләнгән. Беҙҙең автомобилдәр - ҙур, ҡеүәтле, 200-500 ат көсөнә тиң. Уларҙың атмосфераға күпме ағыулы матдә бүлеп сығарыуы аңлашыла".

✓ **Сибайҙа "Урал аръяғы-2018". Уңайлы инвестиция мөхите - эшҡыуарлыҡты үҫтереү нигеҙе" иҡтисади форумы булып үтте.** Сара барышында Урал аръяғы биләмәһендә инвестиция эшмәкәрлеген үҫтереү юлдары һәм проблемалары, эшҡыуарлыҡҡа дәүләт ярҙамы саралары, ғәмәлдәге производстволарҙы киңәйтеү һәм яңы предприятиелар асыу тураһында диалог ойошторолдо. Форум эшендә 300-ҙән ашыу делегат - федераль һәм төбәк власть органдары, ҙур сәнәғәт предприятиелары, ғилми үҙәктәр һәм белем биреү ойошмалары, кесе һәм урта эшҡыуарлыҡты үҫтереү һәм уларға булышлыҡ итеү институттары вәкилдәре ҡатнашты. Калуга өлкәһенең Аграр һәм ауыл туризмы ассоциацияһы президенты, Рәсәй Халыҡ-ара туризм академияһы профессоры Василий Макашин форумдың әһәмиәтен юғары баһаланы: "Бындай саралар үҫеш идеяһына булышлыҡ итә, сифатлы күтәрелеш әҙерләй. Бында республика ил, шулай уҡ халыҡ-ара кимәлдә алға китһен өсөн барлыҡ уй-фекерҙәр туплана. Республика лидерының, башҡа өлкә губернаторҙарының ҡатнашыуы форумдың статусы юғары булыуы хаҡында һөйләй, был башҡа төбәктәр менән иҡтисади бәйләнеш булдырырға мөмкинлек бирә һәм иҡтисадты үҫтереүгә булышлыҡ итә. Яҡшы һөйләшеү һәм яҡшы һөҙөмтә булыр тип ышанам".

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Лавр

❖ Лавр япрағы менән боросто ҡушып ҡулланыу тәндән тоҙҙарҙы сығара. Төнәтмә яһап, самалап эсергә кәрәк, сөнки лавр бик көслө үҫемлек.

❖ 30-35 лавр япрағы өҫтөнә 300 мл йылы һыу ҡойоп, 5 минут ҡайнатырға. Термоста 5-6 сәғәт тотҡас ҡына һөҙөргә. Төнәтмәне 12 сәғәт эсендә кәм тигәндә 20 минут һайын әҙ-әҙләп эсергә. 3 көн эскәс, 1 аҙна ял итергә, тағын дауаланыуҙы башларға. Дауаланған ваҡытта күберәк йәшелсәләр ашағыҙ. 2-3 аҙнанан һуң дауаның һөҙөмтәһе тойолор: быуындарығыҙ шыртламаҫ, аяҡ хәрәкәте лә еңеләйер, баҫҡыстан да тиҙерәк менерһегеҙ. Был дауаны 1-се йылда 3 ай һайын, унан һуң йылына 1 мәртәбә эшләргә кәңәш ителә. Кемдең ашҡаҙаны сирле - уларға был төнәтмә тыйыла.

❖ Ауыҙ ҡыуышлығы, урт ауыртҡанда көнөнә 2 мәртәбә лавр төнәтмәһе менән ауыҙҙы сайҡарға.

❖ Тән һыҙлағанда 1 өлөш ваҡланған лавр япрағына 2 өлөш аҡ май (өй майы) ҡушырға ла, ҡайнап ултырған һыулы һауытта 30 минут тотҡас, һыуытырға һәм һыҙлаған урындарға һөртөргә.

### Энәлек

❖ Ҡан баҫымы юғары булғанда 0,5 л һыуға 1 ҡалаҡ энәлекте һалырға, 2-3 минут ҡайнатырға. Марля аша һөҙөргә, быяла банкаға ҡойорға. Ас ҡарынға 1 стакан төнәтмәне йылымыс көйөнсә эсергә, ә кискеһен 1 стакан һыуынған төнәтмәне ашар алдынан эсергә. Был дауаны ай буйы көн дә эшләргә, шунан тәнәфес яһарға. Әгәр ҡан баҫымы күтәрелгәне һиҙелһә, табанға 6-9%-лы һеркәлә сылатылған бинтты һалырға.

### Йүкә сәскәһе

❖ Тамаҡ шешкәндә, һалҡын тейгәндә 3 ҡалаҡ сәскә өҫтөнә 1 л ҡайнар һыу ҡойоп, 20 минут төнәтергә, һөҙөргә. Төнгөлөккә 1-2-шәр стакан эсергә.

❖ Үпкә юлдары ауыртһа, 1 стакан яңы ҡайнап сыҡҡан һыуға 1 ҡалаҡ кипкән йүкә сәскәһе һалырға, төнәтергә, көнөнә 2-3 тапҡыр эсергә. Һәр ваҡыт яңы төнәтмә яһап эсегеҙ.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

***✓ Әгәр һин, янып торған утҡа ташлан, тиһәләр, ташланыр инеңме? Һин бөтә көсөңдән ҡасырға тырышыр инең. Әгәр ул кеше дуҫ булһа, һиңә ут тәҡдим итер инеме? Хәмерҙә шул уҡ утты күрмәйһеңме ни?***



ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# БӘЙҒӘМБӘРҘӘР

## Алла Ибраһимды данлай

Ибраһимдың ҡатыны Саранан һәм Хәжәрҙән тыуған улдары, Исмәғил менән Исхаҡ, икеһе лә бөйөк бәйғәмбәрҙәр була. Аҙаҡ Исхаҡтың да Яҡуп исемле улы тыуа һәм ул израилдар быуынын барлыҡҡа килтергән Израиль булараҡ билдәлелек алғас, һуңынан уның тоҡомдарына ла бәйғәмбәрлек төшөрөлә. Уларға оҙатылған бәйғәмбәрҙәр сылбыры Мәрйәмдең улы Иса менән тамамлана.

Ә Исмәғил яҙмышына ғәрәптәрҙең атаһы булырға яҙған була. Мөхәммәт иһә уның тоҡомондағы берҙән-бер бәйғәмбәр була.

Билдәле булыуынса, Изге Ҡөрьәндә Алла Ибраһимды бик күп тапҡырҙар данлап телгә ала. Ҡөрьәндә ул 35 тапҡыр, ә Әл-Баҡара сүрәһендә хатта 15 осраҡта иҫкә алына.

Мөхәммәт бәйғәмбәрҙән һуң ныҡ ихтыярлы бәйғәмбәрҙәр араһында Ибраһим икенсе урында торған.

## Лут бәйғәмбәр

Тарихтың улы Һарандың Лут исемле улы була. Ибн Ҡасир әйтеүенсә, ул Ибраһим бәйғәмбәрҙең яҡын туғаны. Лут Ибраһим менән хушлашып, Содомға китә. Ундағы халыҡ Аллаға ышанмауы һәм боласыл булыуы менән билдәлелек ала. Улар кешелек тарихында беренсе булып енәйәттәрҙең иң ерәнгесе - содомия менән шөғөлләнгән. Өҫтәүенә, был ерәнгес шөғөлөн бөтөн халыҡ алдында ғәмәлгә ашырырға ғәҙәтләнгәндәр.

Лут бәйғәмбәр уларҙы бер генә Алла булыуына ышанырға һәм фәҡәт Уға ғына ышанырға, ошоға тиклем ҡылған ҡот осҡос енәйәттәренән баш тартырға өндәй. Ә теҫеләр бәйғәмбәрҙең һүҙҙәренә ҡолаҡ һалырға ла уйламай, уға ҡарышып, аҙғынлыҡ менән шөғөлләнеүҙәрен дауам итә. Ерәнгес гонаһ ҡылыуҙарҙан тыш, Луттың халҡы оло юлдарҙа кеше талау менән дә шөғөлләнгән. Күпләп йыйылған урында һәр саҡ яман һүҙҙәр ҡулланалар һәм күмәк кеше алдында ла содомия менән шөғөлләнергә тартынмайҙар. Әхлаҡи яҡтан аҡыл йөртөтә белмәгән хайуандарҙан да түбәнерәк кимәлгә төшәләр.

Алла: "Беҙ Лут бәйғәмбәрҙе халҡын Берҙәм Аллаға ышанырға һәм йәмәғәтселектә аҙғын гонаһлыҡтан арындырырға кәңәш бирһен өсөн оҙаттыҡ. Һеҙ кеше тәбиғәтенә һис тап килмәгән ҡәбәхәтлектә ҡылыуҙы дауам итерһегеҙме икән ни? Һеҙ тыумыштан кешенең булмышына хас булмаған был әшәкелектә берәү ҙә һеҙҙе уҙҙыра алмаған ҡәбәхәтлегегеҙҙе һаман ҡылмаҡсыһығыҙмы? Енси теләктәрегеҙҙең йүгәнһеҙлеге арҡаһында, хатта хайуандар ҙа ҡылмаған нәмәне - ҡатын-ҡыҙ урынына ирҙәрҙе файҙаланып, кеше тәбиғәтенә ҡаршы килеп бөтөн сиктәрҙе аша атлап сыҡтығыҙ", ти.

Лут был боҙоҡ халыҡты Аллаға яҡынайырға өндәһә лә, барыһы ла уны мыҫҡыллап көлгәс, "Алла һеҙгә яза бирәсәк", ти. Теҫеләр: "Аллаң хаҡ булһа, тиҙерәк беҙгә язаһын бирһен", тип мыҫҡыллауын дауам иткәс, Лут Алланан ер йөҙөнә әшәкелек таратыусы был хәшәрәттәрҙе енеүҙә ярҙам һорай. Алла Луттың үтенестәрен ишетә һәм ергә фәрештәләр ебәрә. Фәрештәләр осоп килешләй Ибраһимға ла ҡағыла һәм үҙҙәренең Алланы тыңларға теләмәгән ҡот осҡос бысраҡлыҡҡа батҡан аҙғын халыҡты, асылы ниҙә булыуын Алла ғына белгән балсыҡ таш менән бәреп юҡ итергә, улар араһына ебәрелгән Лутты һәм уның ғаиләһен ҡотҡарырға Содомға китеп барыуҙарын, Ибраһимдың тиҙҙән данлы улдың атаһы буласағын хәбәр итә.

**(Дауамы бар).**

ДУҪҠА ХАТ

# ЫШАН МИҢӘ:

## хәҙер эсмәү модала

**Һаумы, Айгиз дуҫ! Хәлдәр нисек? Уҡыуҙар барамы? Аптырауға һалдыммы хатым менән? Беренсе тапҡыр хат алыуыңдыр әле, шулаймы? Минең дә беренсе тапҡыр яҙыуым. Ошоға тиклем хат яҙғаным юҡ. Телефон, интернет заманында, "тереләй" һөйләшеп булғанда, ҡағыҙ әрәм итергәме ни инде? Ҡағыҙға яҙылған нәмәне уҡый ҙа белмәйбеҙ. Телефонда бер минут эсендә бар яңылыҡтарҙы әйтеп өлгөрөр тиҙлеккә еттек. Оператив кешеләрбеҙ. Мәғлүмәтте меңләгән томдарҙан бер нисә гигабайтҡа ҡыҫырҙыҡ. Ә ҡыҫҡа хаттарыбыҙ килобайттарға ғына һыйыр ине.**

Ситкә киттем, шикелле. Күңелдәребеҙҙән шиғырҙарҙы үҫмер саҡтарҙа уҡ ҡыуып сығарһаҡ та, әле лә ҡай саҡ илһамланып китәбеҙ. Һин дә шулайҙыр. Иҫләйһеңме, мәктәп йылдарында дәрестәр буйы шиғырҙар яҙа торғайныҡ. Нисек тиҙ килә торғайны улар беҙҙең зиһенебеҙгә! 45 минут эсендә бөтөн синыфташтарыбыҙға "мәхкиәләр" яҙып өлгөрә торғайныҡ. Бөтәһенә лә уҡытмаҡыҡ уларҙы, бик һирәктәр генә уҡыуға ирешә. Берәүҙәре шарҡылдап көлдә, икенселәре... Беҙҙең "талантыбыҙ" танылмай ҡалды. Бигерәк туҙға яҙмаған әйберҙәр ине шул улар. Матур шиғырҙар ҙа яҙмаҡыҡ түгел. Иҫләйем, һин тыуған ерҙе, тыуған ауылыбыҙҙы маҡтаһаң, мин тормош хаҡында уйландым. Былары тузға яҙмағандарына ҡарағанда оҙағыраҡ яҙыла торғайны, нишләптер.

Тик торғандан шиғыр тураһында һөйләүем ҡыҙыҡ күренәләр үҙеңә. Дүрт юллыҡтар бер ҡасан да төп шөғөлөбөҙ булманы икебеҙҙең дә. Тормошобоҙҙоң ҡыҫҡа бер мәлен ялмап алып, шундай тиҙлектә юғалған хобби ғына булып ҡалды. Онотолоп китеп яҙабыҙ икән бөгөн, уныһы ла илһам тигән нәмәнең һирәкләп кенә беҙҙең ишекте шаҡыуылыр.

Шиғыр тураһында яҙыуым бушҡа түгел. Күптән түгел "Шайтан тәүбәһе" китабында "Йыр - шайтандың аҙаны, шиғыр - шайтандың иҡәмәте" тигән юлдар уҡығайным (яҡшы шиғырҙар был исемлеккә инмәйҙер, буғай. Мәүләнә Руми, Раббани кеүек әүлиәлек бейеклегенә еткән имамдар ҙа шиғырҙар яҙған бит). Ә беҙҙең туҙға яҙмаған ошо йырҙарыбыҙ, шиғырҙарыбыҙ ярҙамһыҙ күңелебеҙгә шайтан инеүгә булышлыҡ итмәнеме икән? Бәләкәй синыфтарҙа өлкәндәрҙең эсеү-тартыуына сирҡанып ҡараһаҡ, унынсыға еткәндә үҙебеҙ эсә, кемдәребеҙҙер тарта ине. Һүгенеүҙәрҙе йән кисермәнә, унынсыла иһә һүҙ аша ҡулландыҡ уларҙы. Бер һүҙ менән әйткәндә, боҙолдоҡ. Танымаҫлыҡ булып.

Беҙҙе беренсе синыфтан алып эсеү, тартыу, һүгенеү насар тип аңлаттылар. Өйҙә лә шундай уҡ өгөт-нәсихәт уҡынылар, заман сирҙәренә ҡарата нәфрәт уятырға тырыштылар. Нимә килеп сыҡты? Сығарылыш кисәһендә ата-әсәйҙәребеҙ, уҡытыусыларыбыҙ менән бер өҫтәл артында шарап һемерҙек. Ун бер йыллыҡ өгөтләүҙәрҙең "имтиханы" ине был.

Мин бөгөн ошо хаҡта уйланам, дуҫҡай. Ун бер йыл буйы эсеү, тартыу - насар ғәҙәт, уларҙан йыраҡ тороу кәрәк, тип тәрбиә алып, бөтөнләй эсмәгән ғаиләләрҙә үҫеп тә, ни өсөн беҙ уларҙан һаҡлана алманыҡ икән? Эсеп, үҙ-үҙеңә ҡул һалыусылар, ағыуланып үлеүселәр әҙ булманы. Суҫҡа кеүек тәгәрәп йөрөгән кешеләргә сирҡаныс менән ҡарай инек. Әммә ваҡыт етеү менән, шулай булырға тейеш, тигән ҡарарға килеп, "ут һыуы"н үҙебеҙ йоттоҡ.

Беҙҙе әрләгәндәр үҙҙәре лә идеаль түгелдәр ине. Уларҙың балалары беҙҙән яманыраҡ ҡыланды, беҙҙән күберәк һемерҙе. Шәмбе кис уҡыусыларына көмөшкә һатыусы уҡытыусыларыбыҙ дүшәмбе ҡыҙара-бүртенә ниндәй яман эш ҡылғаныбыҙҙы тикшерҙе. Ләкин буш һүҙҙәр ине улар. Кемебеҙ ошо линейкаларҙан һуң тәүбәгә килде? Хәтерләйһеңме? Булманы ундайҙар. Ә хәмер тигән яман нәмә йылдан-йыл бәләкәйерәктәрҙе солғаны. Йән әрнеүе менән 7-8-се синыф ҡыҙҙарының төштән һуңғы түнәрәккә ныра алып килеп эсеүҙәре менән маҡтанғандарын тыңланым. Ата-әсәйҙәребеҙ ҙә хәрәмгә юлды яба алманы. Уларҙың ҡуҙҙәренән юғалыу менән кире үҙ эшебеҙгә тотона инек.

Бөгөн мин аңлайым бөтә был сәбәптәрҙе. Беҙ эсмәгән-тартмаған кешеләрҙе күрмәй үҫтек. Булды ул ундайҙар. Ләкин үҙ тормоштарына йомолғандар, башҡаларҙан үҙҙәрен ерерәк тотҡандар... Эсмәү тигән төшөнсә лә ауылда башҡа ине шул. Байрамдарҙа, ялдарҙа "эсмәүселәр" үҙҙәренә ирек бирен ала торғайны. Улай тиһән, беҙ ҙә бит шулай ғына эстек. Тимәк, беҙ ҙә эсеүселәр түгел инек. Ата йортонан айырылғас та порцияны йышайттыҡ. Йәштәштәрем араһында алкоголиктар барлыҡҡа килде. Күптәре, был эсеүем һуңғы, тип әйтә торғайны, әммә...

Насар ғәҙәттәрҙән арындыра алырҙай, үҙҙәре артынан эйәртеп алып китерҙәй өлгөләр булманы. Нисек кәрәк ине улар ул саҡта һәм нисек кәрәк улар бөгөн дә. Бер саҡ әсәйемдең ҡунаҡ килеүгә араҡы әҙерләп йөрөүен күреп, унһыҙ булмаймы ни, тип, өндәшкәйнем, кеше аңламаҫ, беҙгә әле был иҫерткесеҙ ҡунаҡ саҡырыу ғәҙәте килеп етмәгән, тип яуап бирҙе. Үкенескә ҡарә, эсмәгән ата-әсәләребеҙ ҙә ҡара йәмғиәттең ҡанундарын ҡабул итте, маҡтауға тиң әйберҙәрҙе кешеләр һүҙенән, фекеренән ҡурҡып йәшерҙе. "Кеше нимә әйтер?" формулаһы милләтебеҙҙең ауырыуына әүерелде. Нисәмә быуынды ул аяҡһыҙ ҡалдырҙы, рухтан, көстән яҙҙырҙы. Күпме кеше башында ошо арҡала төрмә булдырҙы. Бөгөн килеп ул беҙҙең быуынды быуа түгелме?

Синыфташым, дуҫым, ҡәрҙәшем, туғаным. Кем генә тип өндәшһәм, һин мине яҡшыраҡ аңларһың икән?

Теге осрашҡандан һуң һин оҙаҡ ҡына ваҡыт эсмәй йөрөгәнһең, тип ишеткәйнем. Ҡыуандым да, борсолдом да. Борсолоуым бушҡа түгел ине. Бер танышым ҡыуанып тороп һинең иҫереп йөрөүеңде һөйләне. Һиңә әле аңлау килеп етмәгәндер инде, тип үҙемде йыуаттым, ярҙам итә алмауыма сәбәп таптым. Ә ысынбарлыҡта йән әрнене.

"Нисек инде, эсмәйҙәр?" - ғәжәп ҡатыш көләмһерәп һораны ауылдағы дуҫтарым Өфөләге дуҫтарымдың эсмәүе тураһында һөйләгән саҡта. Беҙҙең яҡтар өсөн ят күренеш шул. Бөтә мәнәсәбәттәр бер-берендә эсереүгә ҡоролған. Дуҫ, тигәндәрең дә ярҙам өсөн өҫтәл әҙерләүҙе талап итә, ә эсеүҙән баш тартһаң, хөрмәт итмәйһеңме, тип үсеккән кеше булалар. Әгәр һин, янып торған утҡа ташлан, тиһәләр, ташланыр инеңме? Һин бөтә көсөңдән ҡасырға тырышыр инең. Әгәр ул кеше дуҫ булһа, һиңә ут тәҡдим итер инеме? Хәмерҙә шул уҡ утты күрмәйһеңме ни?

Эсмәйенсә нимә тураһында һөйләшергә була, тип ғәжәпләнәһеңме? Күп нимә тураһында. Иҫерек башҡа бер ҡасан да инеп сыҡмаясаҡ әйберҙәр тураһында. Ә бына эсеп ни тураһында һөйләшергә була? Кисә кис кемдәр менән эстегеҙ, бөгөн нимә эшләйһегеҙ, ныра ҡайҙан алдығыҙ... Ошонан тыш тағы нимә? Кеше нинә эсә икән, ҡыҙҙар нинә матурлыҡтарын тәмәке төтөнөндә, ныра күбегендә йыуа икән, тип тә уйлана торғанһығыҙҙыр, шулай була торғайны бит. Эйе, беҙ ул саҡта аңламай инек: бер ҡулда шешә тотоп, икенсеһенә тәмәке алып, бер кемгә лә аҡылға ултырлыҡ өлгө биреп булмай шул.

Ҡурҡма кеше фекеренән, үҙҙәренә яуыҙлыҡты юлдаш итеп алған дуҫтарыңдың һүҙенән дә ҡурҡма. Һин боролғас, артыңда ғәйбәт таратыуҙары ла борсомаһын һине. Улар бергә йыйылһалар, һиңә яҙмышыңа яҙғанынан күберәк ярҙам итә алмаясаҡтар, аяҡ салһалар, һиңә яҙғанынан күберәк зыян килтермәҫтәр. Һинән - ихтыяр, һинән - ышаныу һәм өгөрәгәндә аңлауға юл асылыр.

Ҙур, тип-тигеҙ даланы күҙ алдына килтер. Беҙ тыуғандан алып 12-14 йәшкә тиклем шул даланан үҙгәрештәр кисермәйенсә атлайбыҙ. Ләкин ошо йәш еткәс, алдыбыҙҙа һуҡмаҡ барлыҡҡа килә, даланан атлауы беҙҙе йонсота. Ә һуҡмаҡ таҡыр, атлауы ла еңел. Ләкин ул барған һайын тәрәнәйә, соҡорға әйләнә. Уйламайынса, аңламайынса, беҙ аҙымдарҙы йышайтабыҙ. Етмәһә, алда барыусылар беҙҙе әйҙәй. Бер мәл батҡаҡлы юл башлана. Беҙҙең бысранғы килмәй, ләкин соҡорҙоң ярҙары ла инде бик текә. Унда менергә көс тә, ихтыяр ҙа юҡ. Бысраҡҡа ла өйрәнгәнбеҙ, юлыбыҙ ошолор инде, тип уйлайбыҙ. Ләкин һуҡмаҡтың упҡынға алып барғанын аңлау өсөн, ярҙан саҡ ҡына үрмәләп ҡарау ҙа етә...

Хат яҙыу беҙҙән сәйер күренә. Ҡайҙа инде уға интернет, телефон кеүек юғары технологияларға конкурент булыу. Әммә кеше ҡабул итә алмаған ыңғай ҡылыҡтар менән генә беҙ шул упҡындан ҡотола, башҡаларҙың ҡотолоуына сәбәпсе була, үҙебеҙҙән кеселәрҙе упҡынға алып барған һуҡмаҡтан һаҡлап алып ҡала алабыҙ.

Айгиз дуҫ, әҙәп тураһында өгөт-нәсихәт яҙа, тип уйлап ҡуйма. Үҙемдәге бәләкәй генә аңлауҙы һиңә аңлатырға тырышам. Һинең күңелеңдә ошо аңлауға ишек асылырмы, миңә билдәһеҙ. Әгәр асыла ҡалһа, сәбәпсе булыуыма бик шатланыр инем. Дуҫыңды тыңламаһаң, кемде тыңларһың? Беҙ бит ололарҙы ҡабул итмәйбеҙ, уларҙы аңламайбыҙ. Шуға күрә бер-беребеҙҙе генә тәрбиәләргә ҡала инде. Минең дә бит шул ғәҙәттәремдән ҡотолоуымдың сәбәпселәре йәштәштәрем, университетта бергә уҡыған тәркөмдәштәрем булды. Һинең дә шундай сәбәпсе булырға мөмкинлегең бар. Ләкин уның өсөн үҙеңде ҡотҡарырға һәм был айыҡ юлға ныҡлы, кире боролмаҫтай булып баҫырға кәрәк.

Рух көсө һәм түҙемлек һиңә!

**Дуҫың АЙҘАР.**

"Киске Өфө" гәзитенең махсус бите

3

# Ғаиләм-ҡәлғәм

16-22 ИЮНЬ (һөтай)
2018 йыл
№24 (806)

ИШАРА

**Ғаилә. Бала. Йәмғиәт. Ошо өлкәләрҙең ҡайһыныһына ғына төбәлмә - проблемалар тулып ята. Берәй саҡ "сәләмәт ғаилә", "сәләмәт бала", "сәләмәт йәмғиәт", тип, уларға "сәләмәт" һүҙен дә ҡушып һөйләй алырбыҙмы икән? Медицина өлкәһендәге иҫ киткес ҡаҙаныштарға ҡарамаҫтан, ни өсөн сәләмәт кешеләр юҡ дәрәжәһендә? Ниңә махсус программалар ҡабул итеп тә, халыҡтың кәмеүенә сик ҡуйып булмай? Ниңә ғаиләләр күпләп тарҡала? Ниңә ғүмерен ҡыйыусылар һаны артыу өҫтөндә?**

# СӘЛӘМӘТ ҒАИЛӘ...

## сәләмәт йәмғиәт

Уйлап ҡараһың, ошо бәләләрҙең барыһының да төп сәбәбе - ғаилә ныҡлығының ҡаҡшауында. Һуңғы ваҡыттарҙа хөкүмәт ғаиләнең матди базаһын нығытыу юҫығында күпмелер эш эшләй, был дөрөҫ тә. Сөнки ғаиләне тарҡатҡан сәбәптәрҙең иң тосо шул. Тик төп һәм иң беренсеһе түгел. Аслыҡ, юҡлыҡ дәүерҙәрендә лә ошондай көрсөккә терәлгән замандар булмаған элек. Бәлки, ҡасан да булһа, ғаилә сәләмәтлеген тәшкил иткән бөтөн тәү шарттарҙы асыҡлап, уны һәр яҡтан хәстәрләй торған эҙмә-эҙлекле, берҙәм һәм берәгәйле программа төҙөләр ҙа дәүләт тарафынан...

Нимә генә тимә, ғаилә - йәмғиәттең күҙәнәге. Сәләмәт ғаиләлә генә сәләмәт бала үҫә, сәләмәт йәмғиәт ойоша. Тик, йырҙа әйтелгәнсә, балалар үҫтерер мәлдәр - бер ваҡыт ҡына! Һәр кемдең тәғәйен ваҡыты - бер мәл генә. Шул арауыҡта үҙ тәңгәлеңдә үҙең генә хәл итә алаһың яҙмышыңды. Теләмәһәң, бер нәмә лә ҡыбырлатҡың килмәһә, әллә ниндәй программалар ҙа хәл-ваҡиғаларҙы ыңғайға үҙгәртә алмаҫ!

ИР ҺҮҘЕ

# ҠОТЛО ҠАТЫН БУЛА,

## ҡотһоҙо була...



**Ниндәйҙер бер байрам алдынан киске сәғәт һигеҙҙәр тирәһендә ҡарсығым менән уртансы ҡыҙыбыҙ Миңзәләгә ҡунаҡҡа китеп барыуыбыҙ. Сибай ҙур ҡала түгел, шулай ҙа урамда халыҡ күп, һәр береһе байрам хәстәре менән йөрөй, ашыға.**

Ҡаршыбыҙға бер төркөм йәштәр килә. Тауыштары көр, көләшәләр, шаяралар, ҡулдарында һыра шешәһе лә бар кеүек. Улар яҡынлаған һайын, күңелдә хәүеф тә арта бара: "Имен генә үтеп китһәләр ярар ине..." Йәштәр яҡынлашыу менән, ирекһеҙҙән, ситкә тайшандыҡ, уларға юл бирәбеҙ, йәнәһе. Ә улар, киреһенсә, беҙҙең ҡаршыға сыҡты һәм кемуҙарҙан байрам менән ҡотлай башланы. Араһынан береһе руссалап: "Ошолай оло йәшкә еткәнсе бергә булыуығыҙ өсөн рәхмәт һеҙгә! Бөтә ҡыйынлыҡтарҙы бергә үткәнегеҙ өсөн һеҙҙең алда баш эйәбеҙ!" - тине. Улар шулай беҙҙе шаҡ ҡатырып, күңелде күтәреп китеп барҙылар. Был балаларға булған ихтирам тойғоһонан донъя яҡтырып китте. Тимәк, йәштәребеҙ ул тиклем дә өмөтһөҙ түгел әле. Беҙҙең өлкән йәштәге, ғүмер юлын бергә үткән ҡарт менән ҡарсыҡ булыуыбыҙҙы шәйләгәндәр икән, тимәк, улар ҙа үҙҙәренең берҙән-берен табып, уның менән ғүмер ахырынаса бергә булырға хыял итә...

Таныш булмаған йәш егеттәргә етмеш йыл буйы үрмәләп менгән "Бәхет тауы" бейеклегенән тороп, ошондайыраҡ кәңәш бирер инем: "Балалар, "Бәхет тауы"на менеү өсөн һалынған тормош иптәшенден дә үҙең шикелле ынтылышлы, изге күңелле булыуын теләр инем. Сөнки ғаилә именлегенә янаған хәүефтәр икһеҙсикһеҙ, әммә бер-береһенә тап килгән парҙар уларҙың барыһын да енеп сыға. Әйтергә теләгән фекерем шул: тормош юлдашын һайлағанда, "тейешһең" һүҙен яратыусы ҡыҙ баланан йырағыраҡ йөрөргә кәрәк. Хәҙерге заманда былай ҙа "тейешһең", тип, ир-егеттәрҙе битәрләүселәр етерлек. Шуға күрә лә ир-ат һәр саҡ ғәйепле тойғоһо кисереп йәшәй. Ә ғаиләнең уңыш, бәхет нигеҙенең һикһән проценты ҡатын-ҡыҙҙың уңғанлығына, тоғролоғона, намыҫына, сабырлығына, иренә булған ихтирамына, ә иң мөһиме, яуаплылығына бәйле. Иренә "һин тейешһең, һин тейешһең" тип, үҙ бурыстарын инҡар итеүсе ҡатын менән йәшәгән ир, ниндәй генә тырыш булһа ла, уңып та, байып та, хатта туйып та йәшәй алмай.

Һөнәрле, белемле, тәрбиәле булған, эсмәгән-тартмаған, һәр эшкә яуаплылыҡ менән тотонған ир-егет өлгөлө ғаилә башлығы булып йәшәргә лайыҡлы. Әммә ундай ир-егеттең янында ла ҡотло ҡатын булыуы шарт. "Ҡотло ҡатындың оно ла бөтмәй, ҡотһоҙҙоң тоҙо ла етмәй", тигән бик тапҡыр мәҡәл бар. "Тейешһең", тип ҡабатларға яратҡан ҡатын ҡасан булһа ла теймәгән ерен таба ул. Ундайҙар, ун булһа, "ун биш тейеш", ун биш булһа, "егерме тейеш", ти. Йүнле ҡатын ир тапҡанды тәләфләмәй (көндәр буйы телефондан һөйләшеп кенә лә аҡсаны һауаға осороп була), ҡәҙерен белә. Үҙе генә түгел, балаларҙы ла шулай тәрбиәләй. Әсәләре, атай кешенең тапҡаны ҡәҙерле, юҡ-барға сарыф ителмәй, ситкә таратылмай, тип өйрәтһә, балалар ҙа эсеү-тартыуҙың аҡса яуы икәнлеген белеп үҫә. Яҡшы ҡатын хатта үҙе тапҡанды ла "минеке" тимәй, "беҙҙеке" тип һөйләй.

Оҙаҡ йылдар бергә йәшәп, күп балалар үҫтергән, уларҙы тырыш, эшсән, намыҫлы итеп тәрбиәләгән ғаиләләргә барлаһаң, улар бөтәһе лә ата-олатайҙар ҡуйған талаптар буйынса ҡауышҡандар һәм ғүмер кисергәндәр. Шул арҡала милләтебеҙ һаҡланып ҡала килә.

Байрам алдынан тәрән мәғәнәле, фәһемле итеп ҡотлап үтеүсе уларыма әйтер һүҙҙәрем шул ине. Үҙҙәренә әйтеп өлгөрмәгән фекерҙәремде абруйлы гәзиттәрҙең береһе "Киске Өфө" аша еткерәм.

**Рәүеф БИКТАШЕВ.**

ЙӘН ӘРНЕҮЕ

**Әсәйем мине яңғыҙы үҫтерҙе. Атай тигәне ситкә сығып киткән, күргән кешем түгел. Әсәйемдең һаран ғына өҙөп-йолҡоп һөйләүенән шуны беләм: армиянан ҡайтҡанында ситтә, Калининград тарафтарында, "мәрйәһе" тороп ҡалған, имеш. Ата-әсәһе ҡайтарып алған (уныһын аҙаҡ белдек). Әсәйем менән өйләнешкәндәр, ләкин байтаҡ ҡына йәшәһәләр ҙә, балалары булмаған. Артабан аралары ла һыуына башлаған, сөнки теге мәрйә менән хатлашып тороуҙарын белеп ҡалған әсәйем уны кисерә алмаған. Ҡарттар бер-бер артлы был донъянан китеп барғас, атай тейеш кешене бында тотоп торған бер ни ҙә ҡалмаған. Ул ситкә сығып киткәнендә, әсәйем миңә ауырлы булып ҡалған, ләкин был турала атай кешегә өндәшмәгән.**

# "ГАСТРОЛДӘН" ҠАЙТЫП ИНМӘЙ...

Ғөмүмән, әсәйем был йәһәттән ғорур ҡатын була белде. Зарланманы, ирен яманлап һөйләп йөрөмәне, башҡаса кейәүгә лә сыҡманы, миңә бауыр баҫты ла, йүгереп йөрөп эшләне: хаҡлы ялға киткәс тә әле оҙаҡ ҡына балалар уҡытыуын дауам итте. Шөкөр, бөгөн дә ул минең ир-егеткә торошло иң яҡын берҙән-бер кешем.

Ирем, улым бар, ләкин улар миңә таяныс була алманылар, икеһе бер төптән эскелек сиренә бирелделәр. Тәүҙә бөтәһе лә һәйбәт ине. Медучилище бөтөрөп, ауылыма эшкә ҡайттым. Армиянан егетемде көтөп алдым. Яратышып өйләнештек. Йорт һалып сыҡтыҡ, кешесә матур ғына йәшәй башланыҡ. Берҙән-бер бала булараҡ, улым иркә үҫте - хәҙер хатабыҙҙы аңлайым да, һуң инде. Әсәйем бит әйтә, иҫкәртә килде. Сирләшкәрәк тә булды, шуға армияға ла ебәрмәй алып ҡалдыҡ. Бәрһә, исмаһам, ысын ир-егет мәктәбен үтеп, быуыны нығынып ҡайтҡан булыр ине. Колледж тамамланы ла район үҙәгендә эшләп йөрөнө, өйләнгәс, ҡоҙа-ҡоҙағыйҙар менән берләшеп, шунда йорт һалып та бирҙек үҙҙәренә. Тик бына шунын ҡәҙерен белмәнеләр, килен рәнйетелеп йәшәргә теләмәне: әхирәте менән Себер сыкты ла киттеләр, ашнаҡсы булып эшләп йөрөй икән. Ул киткәс, улым тағы ла аяуһыҙыраҡ эсә башланы. Артынан кит, тип тә ҡараным. Тик хәҙер ул эшләмәй ятып, рәхәткә өйрәнде, ҡыл да ҡыбырҙатырға теләмәй. Үҙе кеүек шешәләштәрен йыйып, айҙар буйы эсеп ята. Матур ғына өйөн эт ояһына әйләндерҙе. Юл төшкәндә барып, таҙалап китәм. Икенсе барыуыма - тағы шул уҡ хәл. Әҙергә - бәҙер, тигән нәмә лә боҙалыр, тием кешене.

Атаһы менән дә шундайыраҡ хәл килеп сыҡты. Ауылда колхоз бөтөрөлөп, кешегә эш ҡалмағас, бер төркөм ир-егет шөғөл тапты үҙенә: әсәһе үлеп киткән яңғыҙаҡ бер буйҙаҡ ирҙең өйөнә йыйылышып, аулаҡ ҡорор булып киттеләр. Улым мәктәптә уҡып йөрөгән сағында атаһын нисә тапҡыр уның менән ана шул аулаҡтан йөкмәп тигәндәй өйгә алып ҡайтырға тура килә ине. Хәҙер инде бөтөнләй аҙҙы был ир, аҙналар буйы юғалып йөрөп эсә, хатта ауылдан ситкә лә сығып олаға. Ул юғалып торһа, туған-ырыу, күрше-күлән:"Ирең тағы гастролгә сығып киттеме?" - тип көлә. Кемгә - көлкө, ә миңә - хәсрәт. Ир ҡулы кәрәк эштәрҙе кеше яллап эшләтеп алам, былтыр картуф алышырға ла ҡайтмай эсеп йөрөнө. Пенсияны килгәнен көтөп кенә йөрөй ҙә, шуны тиненә тиклем эсеп бөтөргәс, ауырыу булып, кешелектән сығып ҡайтып йығыла. Күрше инәй әйтмешләй, "үҙем - ир, үҙем - бисә" булып йәшәп ятам әле шулай. Шундай ғаиләләр булмаһын ине, тигәндән ғибрәт итеп яҙҙым.

**Хәлиҙә ИБРАҺИМОВА.**
**Әлшәй районы.**

✓ ***Был иһә әсәнең декрет алдынан алған эш хаҡының 40 проценты (ләкин 24 536,57 һумдан күберәк түгел). Аҙ тәьмин ителгән ғаиләләр өсөн түләү 10 меңдән кәм булмаҫҡа тейеш. Ошо сумма йәшәү минимумына яҡын - 11 163 һум.***



ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## ИЛЛЕ ҺУМ АҠСАМЫ НИ...

**2018 йылдың аҙағына тиклем 1,5-3 йәшлек балалар өсөн пособие күләмен арттырырға ниәтләйҙәр. Әлеге ваҡытта әсәйҙәр ошо йәштәге балалары өсөн эш биреүсенән айына 50 һумдан саҡ ҡына ашыуыраҡ аҡса ала, өҫтәүенә, был сумма 20 йылдан ашыу үҙгәргәне юҡ.**

"Беҙгә 50 һум күләмендәге пособие менән хәлде асыҡлау бурысы йөкмәтелгән, - тип хәбәр итте Рәсәйҙең хеҙмәт һәм социаль яҡлау министры Максим Топилин. - Дмитрий Анатольевич Медведев Дәүләт Думаһында сығыш яһағанда (2018 йылдың апрелендә) ошо пособиены асыҡларға кәрәк тигәйне. Йыл аҙағына тиклем ошо йөкләмәне тормошҡа ашырырға тейешбеҙ, тип уйлайым".

Йәш ярымдан алып 3 йәшкәсә балалар өсөн түләү күләме йәш ярымғаса пособие кимәленә тап килергә тейеш, тип иҫәпләй Милли ата-әсәләр комитетының үҙәк советы рәйесе Ирина Волынец. Был иһә әсәнең декрет алдынан алған эш хаҡының 40 проценты (ләкин 24 536,57 һумдан күберәк түгел). Аҙ тәьмин ителгән ғаиләләр өсөн түләү 10 меңдән кәм булмаҫҡа тейеш. Ошо сумма йәшәү минимумына яҡын - 11 163 һум. Ғилми-тикшеренеү финанс институтының социаль өлкә финанстары үҙәге етәксеһе Олеся Феоктистова, һәр эш биреүсе 10 меңгә яҡын пособие түләй алмай, тип иҫәпләй, шуға унын фекеренсә, йәшәү минимумы дәүмәлендәге яңы пособиены аҙ тәьмин ителгән ғаиләләр өсөн генә билдәләргә кәрәк, түләүҙәрҙе дәүләт үҙ өҫтөнә алырға тейеш.

Әле Башҡортостанда 1,5-3 йәшлек бала тәрбиәләгән ишле һәм аҙ тәьмин ителгән ғаиләләргә 3 мең һум күләмендә республика субсидияһы түләнә. Муниципалитеттарҙа ла үҙҙәренең ярҙам саралары бар

Әйткәндәй, Социаль страховка фондының республика бүлексәһендә эшләп йөрөгән кешеләргә беренсе баланы ҡарау буйынса пособиеның минималь суммаһын атанылар. 1 майҙан ул 5134 һум тәшкил итә. Был 2018 йылдың 1 майынан яңы минималь хеҙмәт хаҡын билдәләүгә бәйле - 11 163 һум. Ошо датаға тиклем тәғәйенләнгән пособиелар әүәлге күләмдә ҡала. Социаль страховка фондында шулай уҡ страховка осраҡтары (ваҡытлыса эшкә яраҡһыҙлыҡ, йөклөлөк һәм бала табыу буйынса отпуск) буйынса пособие күләмен нисек иҫәпләүҙәре хаҡында белдерҙеләр. Тәү сиратта минималь уртаса бер көнлөк эш хаҡы билдәләнә. Ул һуңғы ике йыл өсөн иҫәпләнә. Миҫал: 11 163 һум x 24 ай / 730 көн = 367 һум. Райондарҙа һәм район коэффициенттары ҡулланылған урындарҙа был дәүмәл тейешенсә төҙәтелә. Башҡортостанда район коэффициенты - 15 процент.

# НИНДӘЙ БӘЙГЕЛӘ балаларыбыҙ

**Өфөлә берәй рухлы, күркәм сара булһа - уның уртаһында, бәйге-фәлән икән, мотлаҡ уның ҡатнашыусыһы, дөрөҫөрәге, еңеүсеһе булған был ғаиләне күптәр беләләр. Римма Мирсәйет ҡыҙы - Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты директорының тәрбиә эштәре буйынса урынбаҫары, Шайморат Азамат улы 160-сы лицей директорының хужалыҡ эштәре буйынса урынбаҫары булып эшләй. Гөлйөҙөм исемле сибәр ҡыҙ, Ғайсар һәм Мортаза исемле улдар тәрбиәләйҙәр. Бер аҙ ҡырыҫыраҡ холоҡло баш ҡалабыҙҙа үҙ урыныңды нисек табырға? Ошо турала Римма һәм Шайморат ТИМЕРБУЛАТОВтар менән әңгәмәләшәбеҙ.**

**Һәр ғаиләнең танышыу үҙенең тарихы була. Ошо ваҡиғаны хәтерләп алһаҡ ине?**

**Шайморат:** Икебеҙ ҙә Баймаҡ районынан, мин - Яңғаҙынан, Римма Ҡарамалынан. Бер мәктәптә уҡыныҡ. Римма минән 5 йәшкә бәләкәй, унын мәктәптәге бер сарала милли кейемдә бейеп йөрөүе генә әҙерәк иҫемдә. БДУ-ның Сибай институтын тамамлап, Ҡарамалы мәктәбенә башланғыс кластарҙы уҡытырға ҡайттым. Шул мәлдән мәктәптә китапханасы булып эшләгән ҡәйнәм менән аралаша башланыҡ. Римма Сибай педучилищегә. Мин башҡорт мәҙәниәтенән уҡыттым, балаларҙың ялын ойоштороусы булып эшләнем.

**Ауыл ерлеге өсөн ярайһы ҙур вазифа биләгән ерҙән Өфөгә сығып китергә нимә этәрҙе Тимербулатовтарҙы?**

**Римма:** Тәүҙә Сибайға күсеп китергә булдыҡ. Шайморат Сибай интернатында эшләне, мин 1-се мәктәптә башҡорт теләнән уҡыттым. 2003 йылда "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" конкурсында 3-сө урын яуланым. Шул йылда беҙ Өфөгә күстек.

ҙөнөк, 3 ятаҡты яңырттыҡ, спорт комплексы барлыҡҡа килде. Иң мөһиме, гимназиялағы мөхит мине тағы ла рухлыраҡ итте, үҙ халҡыңа хеҙмәт итеүҙең үҙе бер кинәнес булыуын татыным мин унда.

**Римма:** Шайморат дөрөҫ әйтә, бындағы мөхит шундай үҙенсәлекле. Шуға ла эшкә байрамға йөрөгән кеүек йөрөйөм. Эшләгәс, һөҙөмтәгә эшләргә, тигән принцибым бар йәш саҡтан. Әле лә эштәге уңыштарым тураһында оҙаҡ итеп һөйләй алам. Ике тапҡыр РФ грантына, бер тапҡыр БР грантына лайыҡ тип табылдым, былар барыһы ла уҡыусыларымдың тырышлығы һәм төрлө сараларҙа әүҙем ҡатнашыуы арҡаһында. Уларға, минең ышанысымды арттырған тормош иптәшемә, фатихаһын биргән әсәйемә, дәрт өҫтәүсе коллегаларыма, туғандарыма рәхмәтлемен. Башҡортостандың мәғариф алдынғыһы тигән маҡтаулы исемем дә бар.

**Ғаиләлә һеҙ ниндәй атай менән әсәй?**

**Римма:** Һәр башҡорт ғаиләһендәге кеүек, беҙҙә лә аҙаҡҡы һүҙҙе атай әйтә. Үҙе-

һында уҡығанда практика үтергә минең класыма килде. Ҡәйнәмдең кәңәше буйынса эшләнгәндер был, тип уйлайым хәҙер. Сөнки аҙаҡтан мәктәпкә эшкә ҡайтҡан балдыҙым да ошо уҡ мәктәптә уҡытып йөрөгән уҡытыусы егеткә кейәүгә сыҡты. Таныштырмаһа ла, ҡәйнәмдең йоғонтоһо булғандыр, ай-һай.

**Римма:** Әсәйемде, кейәүҙәреңде үҙең ҡарап алдың инде, тип мәрәкәләп алабыҙ әле лә. Һиҙгерлеге, кешенен эске донъяһын тойомлай белеүе уны алдамаған, бик татыу йәшәйбеҙ. Мин училищены тамамлағансы бер йыл дуҫлашып йөрөнөк тә, өйләнештек. Шайморатты Покровка мәктәбенә директор итеп ҡуйғайнылар ул мәл-

**Шайморат:** Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатының артабанғы яҙмышыбыҙҙа роле ҙур булды. Мин интернатта тәрбиәсе булып эш башланым. Гимназияның ул ваҡыттағы директоры Фәнзил Бүләк улы Санъяров ятаҡтан бүлмә бирҙе. 2004 йылда Әлфир Сулпан улы Ғайсин директор булып килде. Бер йылдан мин хужалыҡ эштәре буйынса директор урынбаҫары итеп тәғәйенләндем һәм был шәхес менән күп эш эшләнек. Яңы мәктәп тө-

беҙ күреп үҫкәнде балаларҙың күңеленә лә һалабыҙ инде.

**Шайморат:** Балаларҙы өйгә бикләп кенә замандың кире йоғонтоһонан һаҡлап булмай. Шуға ла атай кешегә бер аҙ талапсанырак булырға кәрәк, бигерәк тә Өфө кеүек ҙур ҡалала. Ҡыҙ бала булараҡ, Гөлйөҙөмдө ҡурсалап-тыйып ҡына торабыҙ. Уға әле 17 йәш һәм студент булыуына ҡарамаҫтан, минең өсөн ул - бала, әлегә мин уның өсөн яуаплы. Мәҫәлән, дискотекаға барғыһы килә икән, үҙем машина менән алып барам һәм ҡаршы алам. Улыбыҙ Ғайсар-



*✓ Мортазаны һәр ысҡындырған рус һүҙенең башҡортса тәржемәһен һорай-һорай, туған телдә шыма итеп һөйләшергә өйрәтеп алдыҡ. Ғаиләбеҙ теле - башҡорт теле икәнен ул да белә.*



# ҠАТНАШҺАҠ ТА,

## беҙҙең менән бергә

ҙың дуҫтары кем һәм улар нимә менән ҡыҙыҡһына - быны ла белеп торабыҙ, сөнки һәр береһе менән танышабыҙ, һөйләшәбеҙ. Ҡайһы саҡта социаль селтәрҙәрҙә берәй ярамағанырaҡ һүҙ яҙып ҡуйһа ла, улай ярамағанлығын аңлатам. Беҙ үҙебеҙҙең атайҙарҙан ҡурҡып тора инек, балаларым минән ҡурҡмайҙыр, әммә уларҙың нимә эшләп йөрөүе менән ҡыҙыҡһынғанымды яҡшы беләләр. Беҙҙең алда үҙҙәрен иркен тоталар, өйгә ҡайтҡылары, беҙҙең менән булғылары килеп тора, шуға ла дөрөҫ юлдан барабыҙҙыр, тип ышанам.

**Римма:** Икебеҙ ҙә урынында тик ултырып сыҙай торған кеше түгелбеҙ. Шуға ла берәй сара булһынмы, бәйге булһынмы, ҡатнашырға әҙер генә торабыҙ һәм ундай урындарға гел ғаилә менән бергә йөрөйбөҙ. Үҙ-үҙенә ышанған, белемле, рухлы шәхес булып үҫһендәр тигән маҡсаттан балаларҙы ла бәйгеләргә йәлеп итәбеҙ. Гөлйөҙөм мәктәптә уҡығанда "Һаумы, һаумы, әкиәт" конкурсында ла, шәжәрә байрамында ла ҡатнашты. Ғайсар ҙа "Һаумы, һаумы, әкиәт"тә сығыш яһаны.

2010 йылда "Йәш ғаилә" бәйгеһендә тәүҙә Өфөлә, унан республикала еңеү яуланыҡ. Бындай саралар үҙебеҙгә ышанысты арттырҙы, сәхнәлә сығыш яһарға өйрәндек. Башҡорт халҡының йола-ғәҙәттәрен, аш-һыуын күрһәттек. Ошоларҙың уртаһында ҡайнап йөрөгәнгә күрә, балалар ҙа үҙен төрлө яҡлап үҫтерә. Сөнки баланы өйҙә генә тәрбиәләмәйһең, был эш тәүлек әйләнәһенә бара.

**Шайморат:** Ысынлап та, ҡайһы берәүҙәр йәмғиәт эшенә башкөллөй сумып, ғаиләһен онотоп ебәрә. Ә беҙ балаларҙы бергә алып йөрөйбөҙ. Ватан, кесе ватан тигән төшөнсәләрҙе белеп үҫһендәр, тибеҙ. Мәҫәлән, 2012 йылдан тыуған ауылымда "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар" байрамы үтә. Былтыр уны үткәрешергә үҙем дә ярҙам иттем. Ауылдаштар, шәп фермер егеттәр, депутаттар берләштек тә, аҡса йыйып, зыяратты кәртәләп сыҡтыҡ. Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булғандарҙың исемдәре яҙылған обелискты ла яңырттыҡ һәм унда һуғышта ҡатнашыусыларҙың барыһының да исемдәрен яҙҙыҡ. Юлды тигеҙләнек. Байрамды ойоштороуҙа ла ғаилә менән ҡатнаштыҡ, Римма сценарий яҙҙы, алып барҙы, Ғайсар ярҙам итеп йөрөнө. Сит яҡта дан ҡаҙанып, ауылына ҡайтып та инмәгән кешеләр була. Тыуған ауылыңды ла онотторға ярамай икәнен белә балалар.

▸ **Һәр быуын ата-әсәһенә ҡарағанда яҡшыраҡ, аҡыллыраҡ булырға тейеш, тиҙәр. Үҙегеҙ алған тәрбиәгә ниндәйҙер төҙәтмәләр индереп тә ебәрәһегеҙме?**

**Шайморат:** Дөрөҫөн әйткәндә, беҙ үҙебеҙ уҡыуға әллә ни көс тә һалманыҡ. Беҙ үҫкән заманда атай-әсәйҙәр быны талап та итмәне. Шуға ла балаларҙы алдынғы иҫәпләнгән мәктәптәргә уҡытырға тырышабыҙ. Гөлйөҙөм Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатын тамамланы. Ғайсар 93-сө мәктәптә уҡый. Ҡала шарттарында улдар тәрбиәләйһегеҙ икән, кикбоксинг кеүек спорт секцияһы мотлаҡ улар өсөн. Ғайсар ҙа шөғөлләнә унда. Ҡайһы саҡта ялҡауланып китһә лә, 11-се класты тамамлағансы йөрөйһөн, унан үҙең хәл итерһең, тип ҡәтғи әйтеп ҡуйғанмын. Хәҙер бына ҡарап тороуы күңелле, мускулдар уйнап тора, тәҙ генә баҫып йөрөй. Әлбиттә, ярыштарҙа гел еңеү яулап булмай, ул еңелһә, миңә лә ҡыйын. Тик шундай ваҡыттарҙа: "Ярай, бында еңелһә лә, урамда бер ҡасан да еңелмәйәсәк", - тип әйтәм үҙемә. Гөлйөҙөм дә 5 йыл музыка мәктәбенә йөрөгәс, башҡа бармайым, тигәйне бер мәл. "Башлағанһың икән, аҙағына тиклем еткерәһең", - тинем. Музыка математикаға һәләтте лә үҫтерә. Бөгөн ҡыҙыбыҙ үҙ көсө менән вузға уҡырға инеп, белем алып йөрөй. Мортазаның ниндәйҙер эске рухи көсө бар, бәйгеләрҙә ниндәйҙер сетерекле мәлдәрҙә беҙҙе гел ул ҡотҡара. Шуға ла уның киләсәге өсөн артыҡ борсолмайым, әммә уға ла был талаптар мотлаҡ буласаҡ. Әйткәндәй, хәҙер балалар үҫә, ҡайны-ҡәйнә булып та китербеҙ берәй саҡ. Улдарыбыҙ бәләкәйерәк әлегә, ҡыҙыбыҙға гел: "Кейәү бала үҙебеҙҙең милләттән, беҙҙең йоланы, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе ихтирам иткән кеше булырға тейеш", - тип әйтеп торабыҙ. Ҡыҙ кешенең бәхете - ирҙән.

▸ **Балаларҙан өйҙә башҡортса һөйләшеүҙе талап итәһегеҙме?**

**Римма:** Бәләкәй сағынан туған телендә һөйләшмәһә, аҙаҡтан бала уны белеүҙе кәрәк тип тә тапмаясаҡ. Балалар баҡсаһына йөрөйҙәр, унда русса һөйләшеп ҡайтҡан булалар. Ошондай мөхиттә йәшәгәс, өйҙә башҡортса һөйләшеүҙе талап итмәйенсә булмай. Мортазаны һәр ысҡындырған рус һүҙенең башҡортса тәржемәһен һорай-һорай, туған телдә шыма итеп һөйләшергә өйрәтеп алдыҡ. Ғаиләбеҙ теле - башҡорт теле икәнен ул да белә. Аталары, башҡорт телмәре яңғырап торһон, тип, өйҙә махсус рәүештә "Юлдаш" радиоһын ҡуя. Театрҙарға алып йөрөйбөҙ, автобуста, магазинда башҡортса һөйләшәбеҙ, хатта эргәбеҙгә килеп, ҡалай башҡортса матур һөйләшәләр, тип иҫтән тә китәләр. Һәр хәлдә, киләсәктә үҙебеҙ ҙә ейән-ейәнсәрҙәр менән башҡортса һөйләшергә теләр инек, шуға ла быға инеште бөгөн үк һалабыҙ.

**Шайморат:** Мәктәпкә барһағыҙ, русса һөйләшегеҙ, инглиз телен дә ныҡлап өйрәнегеҙ, тик өйҙә саф башҡортса һөйләшәбеҙ, тип әйтеп ҡуйғанмын. Бер туған һеңлемдәр Магнитогорскиҙа йәшәй. Йәйгелеккә ҡайтһалар, балаларын: "Беҙҙең ауылда русса һөйләшеп йөрөмәгеҙ", - тип шаяртып булһа тыйып ҡуям. Ҡала балаларына өлкән улым өлгө булырлыҡ, ныҡ шаян, шуҡ, әлбиттә, тик ул русса ла, башҡортса ла таҙа һөйләшә.

▸ **Ҡалала торлаҡлы булыу ҙа еңел эш түгел. Йәш ғаиләләргә ҡалала үҙ булып китеү өсөн иң тәүҙә нимә кәрәк?**

**Шайморат:** Кемдәндер көтөп ултырһаң, бер ерҙә лә еңел түгел. Үҙегеҙгә ышанығыҙ, әрһеҙерәк булығыҙ, тиер инем йәштәргә. Беҙ ҙә бөтөн ауырлыҡтарҙы үҙебеҙҙең иң менән күтәрҙек. Сыныҡтыҡ та. Гимназияла рух нығынды, кешегә ышаныс артты. Унан һуң эшләгән еремдә - Күҙ ауырыуҙары ғилми-тикшеренеү институтында ҡатыраҡ булырға өйрәндем. Ярҙам һораусыға "юҡ" тимәй инем элегерәк. Атайым дини, хажи кеше, кешегә ныҡ ярҙам итергә ярамай, юғиһә, яҙмышына ҡыҫылаһың, тип гел әйтә килде. Хәҙер кешегә ныҡ ауыр ваҡытта ғына ярҙам ҡулы һуҙабыҙ, күпселек осраҡта кеше үҙ проблемаһын үҙе хәл итеү юлын табырға тейеш.

Ир кешенең был донъяла өс бурысы бар, тиҙәр, өсөһөн дә үтәнем. Өфө эргәһендә, Иглин районында йорт та төҙөнөк. Унда бер йыл йәшәп ҡараныҡ та, балаларҙы уҡырға йөрөтөү ауыр булғанға ҡаланан ипотекаға фатир һатып алдыҡ. Аҙна буйына Өфөләбеҙ, ялдарын Аҡбирҙегә китәбеҙ. Нимәгә хоҡуғығыҙ бар, шуны ҡулланығыҙ, тим йәштәргә. Өсөнсө балаға бушлай ер биреү тураһында закон сыҡҡас, шунда уҡ артынан йөрөй башланым һәм ярты йыл эсендә ер алдыҡ. Өй төҙөгәндә аҡса ла күп булманы, кредит алдыҡ, атай-әсәй, ҡайны-ҡәйнә ярҙам итте, бөтөн нәмәне өмә менән эшләттек. Ҡустылар, кейәүҙәр дуҫтарын алып килә, 10-лап кеше йыйылабыҙ ҙа, эшләй инек. Ир кеше 40 йәшкә тиклем, көслө саҡта донъяһын нығытып ҡалырға тейеш.

▸ **Бер-берегеҙҙәге ниндәй сифаттарҙы үҙ итәһегеҙ?**

**Римма:** Төрлө холоҡло ике кеше бер-береһенә өйрәнеп киткәнсе ваҡыт та, сабырлыҡ та кәрәк. Бөгөн йәш ғаиләләр тәүге ауырлыҡтарҙан уҡ айырылыша ла ҡуя. Ҡатындар аҡыллыраҡ булырға тейеш, тип иҫәпләйем мин. Бер-береһенең ыңғай яҡтарын ғына күрергә тырышһалар, барыһы ла отор ғына ине. Шәхсән үҙем иремдең күркәм сифаттарын үҙемә алырға тырышам, һиҙеп-күреп йөрөйөм, Шайморат та шулай уҡ минең ыңғай сифаттарымды үҙенә күсерә. Ҡатын кеше еңергә ынтылмаһаң ирҙе, уға арҡаланып ҡына йәшәргә өйрәнһәң, барыһы ла урынына ултыра. Миңә иремдең йомартлығы оҡшай. Балаларҙы ярата, һәр балаһына иғтибарлы, улар менән уйнарға, һөйләшергә ваҡыт таба белә. Һәр байрамға сюрприздар әҙерләй. Аталарынан күреп, улдарым да сәскә гөлләмәләре бүләк итергә ярата. Тимәк, улар ошо өлгөнө үҙенең ғаиләһенә күсерәсәк.

**Шайморат:** Икебеҙҙә лә лидерлыҡ сифаттары көслө, башта ныҡ ауыр булһа ла, яйлап яраҡлаштыҡ бер-беребеҙгә. Шәп көләш эләкте миңә, тип иҫәпләйем. Сибәр, матур кейенеп, баҫҡан ерендә ут сәсрәтеп йөрөгән ҡатыным бөгөн дә миндә һоҡланыу тойғолары уята. Яҡшы нәҫелдән, тырыш, тыйнаҡ, үҙенең өҫ-башына иғтибарлы. Өйҙә тәртип, аш-һыуы тәмле, атай-әсәйем, туғандарымды ихлас хөрмәт итә. "Беҙҙең килен грамотный ул", - тип, арҡаһынан һөйөп кенә тора атайым. Ир кеше өсөн быларҙың барыһы ла мөһим.

▸ **Ғүмерегеҙҙең күп өлөшө Өфө ҡалаһы менән бәйле. Ниндәй ул һеҙҙең Өфөгөҙ?**

**Римма:** Өфөлә үҙеңде үҫтереү өсөн бөтөн мөмкинлектәр бар. Балалар тәрбиәләү өсөн ҡулай ҡала. Әгәр ҙә ҡаршылыҡ-кәртәләрҙе лайыҡлы үтеп, ҡыйыу булһаң, баш ҡала ла һине тин итеп күрә башлай.

**Шайморат:** Өфө - башҡорттарҙың баш ҡалаһы бит ул, төрлө шәхестәр менән аралашып йәшәү рухыбыҙҙы бөтөн итә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Өфөлә еңел түгел, йәки беҙҙең халыҡҡа бер ҡасан да еңел булмаған, йәиһә закондар беҙҙең файҙаға эшләмәй инде ул, тигәнерәк ҡараштa йәшәүселәрҙе Тимербулатовтар менән әңгәмәбеҙ дәртләндереп ебәрһә ине. Бөтөн нәмә - үҙебеҙҙең ҡулда, ти улар. Фатирлы-йортло булғың килә икән - тот та эшлә; башҡа милләттәр менән бер рәттән бәйгеләрҙә башҡорт ғаиләһен, йолаларыбыҙҙы күрһәткең килә икән - ҡыйыулыҡ ит тә, тотон; хатта туған телебеҙҙең даирәһен киңәйтеү эше лә ғаиләнән, атай кешенең балаларының башҡортса һөйләшеүен талап итеүенән башлана. Үҙ халҡыңа хеҙмәт итеү ҙә, уны күтәреү ҙә ябай ғына ошо төшөнсәләрҙән тора түгелме һуң?**

Ләйсән НАФИҠОВА
әңгәмәләште.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# АЙЛЫҠ ТҮЛӘҮГӘ...

## ғариза яҙ

**Башҡортостанда 143 ғаилә - 2018 йылдың 1 ғинуарынан һуң икенсе балаһы тыуған һәм әсәлек капиталы сертификатын алғандар республиканың ҡала-райондарында урынлашҡан Пенсия фонды идаралыҡтарына 8 892 һум күләмендә айлыҡ түләүгә ғариза яҙған. Уларҙан 119 ғаилә ошондай түләүҙе ала башлаған да инде. Был маҡсатҡа йүнәлтелгән дөйөм сумма әлеге ваҡытта 4 миллион һумдан артҡан, тип хәбәр иттеләр Башҡортостан буйынса Пенсия фонды бүлексәһенең матбуғат хеҙмәтендә.**

Алдан хәбәр ителеүенсә, әсәлек (ғаилә) капиталын тотоноуҙың яңы йүнәлеше - юғары килемле булмаған ғаиләләр өсөн айлыҡ түләү - ағымдағы йылдан алып ғәмәлдә. Был категорияға килеме Рәсәй төбәгендә билдәләнгән эшкә һәләтле граждандың йәшәү минимумы күләменән 1,5 тапҡыр артмаған ғаиләләр ҡарай. Башҡортостанда был сумма 14 247 һум тәшкил итә. Ғаиләнең дөйөм табышына эш хаҡы, премиялар, пенсиялар, социаль пособиелар, стипендиялар, төрлө компенсациялар, алименттар инә. Пенсия фондына мөрәжәғәт иткәндә ошо түләүҙәрҙең суммаһы Пенсия Фондынан алынған түләүҙәрҙән тыш тейешле документтар менән раҫланырға тейеш. Айлыҡ түләүҙе тәғәйенләүгә ғаризаны икенсе бала тыуғандан һуң йыл ярым дауамында бирергә мөмкин. Бала тыуғандан тәүге алты ай дауамында мөрәжәғәт иткәндә түләүҙе бала тыуған көнөнән алып билдәләйҙәр. Алты айҙан һуң мөрәжәғәт иткәндә түләү ғариза тапшырған көндән билдәләнә. Шуға, балалары ғинуарҙа тыуған ғаиләләргә алты ай үткәнсе айлыҡ түләү алыу йәки әсәлек капиталы аҡсаһын башҡа йүнәлештәр: ғаиләнең торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға, белем алыуға, әсә кешенең буласаҡ пенсияһына йәки инвалид балаларҙың йәмғиәттә социаль адаптацияһына һәм интеграцияһына йүнәлтеү мәсьәләһен хәл итергә кәрәк. Айлыҡ түләү балаға йәш ярым тулғансы бирелә, әммә тәүге түләү осоро бер йылға иҫәпләнгән. Бер йыл үткәндән һуң сертификат эйәһе уны тәғәйенләүгә йәнә ғариза тапшыра ала. Әсәлек капиталы тулыһынса тотонолған, ғаилә йәшәү урынын алмаштырған йәки балаға йәш ярым тулған осраҡта түләү туҡтатыла.

Айлыҡ түләүҙе тәғәйенләү тураһында ғаризаны Рәсәй Пенсия фондының клиенттар хеҙмәтенә бирергә мөмкин. Аҡсалар Рәсәй банкында асылған граждан иҫәбенә күсерелә. Теләгән ваҡытта әсәлек капиталы хужаһының теләге буйынса түләүҙе туҡтатырға мөмкин.

НӘСИХӘТТӘР

# ҠЫҘ-ҠАТЫНҒА

● Ирегеҙҙең хосусан йорт эсендәге хеҙмәттәрен рәхәтләнеп эшләгеҙ. Әмерҙәренә итәғәтле булығыҙ. Тыйған әйберҙәренән йыраҡ торогоҙ, һытыҡ йөҙ менән ҡарышмағыҙ. Өндәшмәй үпкәләп йөрөмәгеҙ. Юҡ-бар нәмә өсөн мығырҙамағыҙ һәм һыңғырашмағыҙ. Ҡаршы һүҙ ҡайтармағыҙ. Ир хәтерен ҡалдырырлыҡ эш эшләмәгеҙ. Уның рөхсәтенән тыш, өйҙән сыҡмағыҙ.

● Оялсан, әҙәпле, намыҫлы булығыҙ. Иргә гүзәл мөнәсәбәттә булығыҙ. Хөрмәтенә кәмселек килтермәгеҙ. Вәғәҙәләрен юҡҡа сығармағыҙ. Серҙәрен фашламағыҙ. Малдарын исраф итмәгеҙ. Уларҙың рөхсәтенән тыш һис кемде яныҡыҙға саҡырмағыҙ. Кейем-фәлән өсөн артыҡ нәмә теләмәгеҙ.

● Ирегеҙҙең ата-әсәһенә итәғәтле булығыҙ. Башҡа яҡындарын ҡарындаш иҫәпләгеҙ. Балалары булһа, ирегеҙ хәтере өсөн яҡын күрегеҙ.

● Замана мәшәҡәттәренә ҡаршы торған ирегеҙгә ярҙам итегеҙ. Шатлыҡлы йәки хәсрәтле көндәрендә уның менән бергә булығыҙ. Был донъяның әсе-сөсөһөн уның менән уртаҡлашығыҙ. Уға һис бер ваҡыт ялған һөйләмәгеҙ. Күрше ҡатындарҙың: "Иремә ялған һөйләнем, белмәне", - тип әйтеүҙәренә алданмағыҙ. Белегеҙ, ҡатындың ялған бер һүҙе булһа ла, иренә һиҙелһә, ире күҙендә ғүмерлек хөрмәте бөтә.

● Ҡатындарҙы мөхәббәтле күрһәтәсәк нәмә матурлыҡ түгел, гүзәл холоҡтор. Күп ҡатындарҙың матурлығы камил булмаһа ла, һәр кем алдында һөйкөмлө күренә һәм хөрмәтләп телгә алына. Шуның өсөн гүзәл холоҡло һәм миһырбанлы булығыҙ.

● Асыулы йөҙлө булмағыҙ. Асыулы йөҙ менән бер кемгә лә күренмәгеҙ. Асыуланған ваҡытта һөйләшмәгеҙ, бигерәк тә башҡаларға яуап биреүҙән һаҡланығыҙ. Сөнки асыуланғанда яуап биреү асыуҙы көсәйтә. Асыуҙы баҫтырыу өсөн тәһәрәт алығыҙ. Мөмкин булһа, намаҙ уҡығыҙ.

● Һәр кемдән хөрмәт көтөп тормайынса, башҡаларҙың етешһеҙлектәрен кисерә белегеҙ, һүҙегеҙҙе мөләйем тауыш менән һөйләгеҙ. Мөләйем һөйләргә ғәҙәтләнегеҙ, һөйләшеү - олуғ камиллыҡ булған хәлдә, сабырлыҡ мәртәбәһенә өлгәшмәгәнен белегеҙ, һүҙ йөрөтөүсе, ғәйбәт һөйләүселәрҙән һаҡланығыҙ. Ҡулығыҙҙан килгәнсе тиклем хәйерле эш эшләгеҙ, һис булмаһа, боҙоҡлоҡ ҡылмағыҙ.

● Эргәгеҙҙә булыусыларҙың холоҡтарын өйрәнегеҙ. Олоһона-кесеһенә айырмайынса, ҡайғылы һәм шатлыҡлы ваҡыттарында белештерегеҙҙең ҡайғыһын уртаҡлашығыҙ, йыуатығыҙ. Ауырыу һәм хәсрәт менән яфаланғанда сабыр булығыҙ. "Бәлки, шулай булыуы хәйерлелер", тип, күңелегеҙҙе баҫығыҙ һәм хәйерле булыуы өсөн Йәнәб-и Аллаһыға доға ҡылығыҙ.

● Әгәр Йәнәб-и Аллаһ балалар бирһә, уларҙы иғтибар менән тәрбиә итегеҙ. Яҡшылыҡ һәм әҙәп өйрәтеп, күркәм тәбиғәтҡә ғәҙәтләндерегеҙ, холоҡтарын матурлағыҙ, өҫ-баштарынан артыҡ аҡылдарын тәрбиәләгеҙ.

● Бала күплегенә ауырһынмағыҙ. Илағандары һәм тауышланғандары өсөн асыуланмағыҙ. Улар Йәнәб-и Аллаһ бәндәләре икәнен хәтерләп, тырышлыҡ һәм һөйөнөс менән тәрбиәләгеҙ. Ураҙалар тотоп, хажға барып, хасил булмаған сауаптар бала тәрбиәһенән хасил булыуы ихтимал. Бала мәшәҡәттәрен күтәреү арҡаһында әхирәт ҡурҡынысынан именлек табылыр.

● Балалар яҡшы һауаға мохтаж, шуның өсөн йоҡо бүлмәләрен мөмкин ҡәҙәр боҙоҡ һауалы тотмағыҙ, өҫтәрен ҡапламағыҙ. Зарур булмаһа, бигерәк тә ҡалын әйберҙәрҙән өҫтәренә себенлек ҡормағыҙ. Бишеккә һалып тирбәтмәгеҙ. Тирбәтеү бала өсөн зарур түгел.

● Балаларығыҙҙы ғәҙәттән тыш иркәләтмәгеҙ, һәр әйберҙе уларҙың ихтыярына һалып ҡуймағыҙ. Уларҙы ҡаршы һөйләргә, һүгергә өйрәтмәгеҙ, йәғни улар алдында үҙегеҙ ҡарышмағыҙ, уларға яман һүҙҙәрҙе насар күреүсе булып күренегеҙ. Һеҙ шулай булһағыҙ, улар ҡарышырға һәм кеше һүгергә өйрәнмәҫ.

● Балаларығыҙҙы баһадирлыҡ рухында тәрбиәләгеҙ, ҡурҡмаҫҡа ғәҙәтләндерегеҙ.

**Ризаитдин ФӘХРЕТДИНОВ.**

# НИҢӘ АЙЫРЫЛЫШАЛАР?

**Илебеҙҙә никахтар тарҡалыу мәсьәләһе киҫкен торғаны һәммәбеҙгә мәғлүм. Интернеттағы статистика мәғлүмәтәренә күҙ һалһаҡ, 2017 йылда Башҡортостанда 27930 пар никахҡа инһә, рәсми айырылышҡандарҙың һаны - 15572. Икенсе төрлө әйткәндә, һәр өйләнешкән парҙың яртыһынан күбеһе никахтарын тарҡатып тора. Айырылышыуҙар буйынса дөйөм Рәсәй күрһәткестәренән бер ҙә ҡалышмайбыҙ, тимәк. Үкенесле.**

Ошо хаҡта уйланыусылар, башҡаларға файҙалы кәңәш биреүселәр ҙә күп. Тормош тигән нәмә шундай ҡатмарлы, шунлыҡтандыр, бер кемгә лә "дөрөҫ юл"ды аныҡ ҡына күрһәтеп булмай. Һәр ғаилә ағзаһы һәр аныҡ осраҡта килеп тыуған мәсьәләне үҙенсә сисә... "Ғаиләм - ҡәлғәм" битенең төп маҡсаты "ғаиләләр өлгөһөн күрһәтеү, һәр кемде яҡшы өлгәгә саҡырыу" тип ҡуйылған булыуға ҡарамаҫтан, фәһем өсөн бер-ике күңелһеҙ хәлде лә миҫал итеп килтермәк булдым.

Мин уларҙың икеһен дә бала ваҡыттан уҡ беләм. Маратты сабый саҡта уҡ атаһы ташлап киткән ине. Әсәһе ҡарамағында үҫте ул. Башҡа малайҙар "атай", тип өндәшә-өндәшә, аталарынан ниндәйҙер өгөт-нәсихәт, кәңәштәр алып, унан нимәгәлер өйрәнеп үҫкәндә, Марат ана шундай тәү ҡарауға ябай һымаҡ ҡына күренгән нәмәләрҙән мәхрүм ине. Матди яҡтан нисек тәьмин ителеп йәшәгәне миңә мәғлүм түгел, әммә беҙ үҫкән саҡта тулы ғаиләле кешеләр өсөн дә бындай мәсьәлә бигүк ябайҙан булманы. Атайһыҙ үҫкән балаларға, йә күмәк балалы (ул саҡта 7-8 бала булған) ғаиләләргә хәләнән килгәнсе мәктәп аша хөкүмәт ярҙам иткеләне, әлбиттә. Әммә бындай саралар атай юҡлығын алыштыра алмағанын һәр кем яҡшы белә. Мәктәптә насар уҡыманы Марат. Тәртибе лә яҡшы булды. Ғөмүмән, атайҙары булған малайҙарҙан бер нәмәһе менән дә айырылманы ул, тиһәм дә хаталанмаҫмын. Ә Фәнисә күрше ауылда тыуып үҫкән ҡыҙ. Мараттан ике-өс йәшкә кесерәк. Биш балалы ғаиләһенән аталары киткәндә ҡыҙыҡайға ете-һигеҙ йәштәрҙән дә күп түгел ине. Ҡуңыр сәсле матур ғына был ҡыҙҙың бала сағы яҡшы хәтеремдә. Минең менән тиҫтер, тиерлек ине ул. Фәнисәне, уның тағы дүрт туғанын ауыл кешеләре бик йәлләгәндәрен иҫләйем. Атаһы Рәхмәнгол ағай, хәтерләүемсә, бер ҙә насар кеше булманы. Алдынғы эшсе. Фотоһы колхоз идараһы алдында һәр саҡ почет таҡтаһында элеүле торҙо. Ҡатыны Фатима еңгә менән ыҙғышып та йәшәмәнеләр. Тик, ниндәйҙер сәбәп менән, ағайыбыҙ шул уҡ ауылда йәшәгән Рабиға исемле апайға күсте лә сыҡты. Ҡартырағтар быға риза булмай, үҙ-ара "бурылдашты". "Мөхәббәттәр инде, ни хәл итһендәр", - тине йәшерәктәр. Ә миңә, бала кеше, ана шул "мөхәббәт" тигән нәмә бер ҙә генә аңлашылманы. Кешеләрҙе айырылыштыра торған насар нәмә икән ул "мөхәббәт" тигәндәре һымаҡ ҡына тойғо ҡалды күңелемдә. Биш бала менән (иң кескенәһе хатта ҡорһаҡта ине, буғай) яңғыҙы ултырып ҡалған Фатима еңгәне йәлләй инем һәм шул уҡ ваҡытта Рәхмәнгол ағайҙы ла яманларға теләмәнем. Әйткәндәй, был ағайҙы үҙенә ҡаратып алған Рабиға апай ҙа ифрат алсаҡ, мөләйем, ғөмүмән, яҡшы кеше. Бына шулай, барыһы ла - шундай һәйбәт кешеләр, әммә сабыйҙар атайһыҙ үҫә... "Мөхәббәт" тип аталған нәмә сәбәпме быға, әллә ана шул нәмә менән кешеләрҙе ҡыҙыҡтырып, алдаштырып, яҙыҡ юлға баҫтырған ҡәһәрле шайтан ғәйепләмеме... Мин, бала кеше, әлбиттә, был һорауҙарға үҙем өсөн аныҡ яуап таба алманым, тик Фәнисәләрҙе, Мараттарҙы ғына нығыраҡ ҡыҙғана инем. Мин генә түгел, ғаиләләре тарҡалған әлеге ағайҙар, апайҙар, еңгәйҙәр үҙҙәре лә ошондай һорауға яуап әҙләп маташҡандарҙыр, моғайын. Балаларын ташлап, өйөнән киткән ағайҙар, ситтән ҡарағанда ифрат та тыныс һымаҡ тойолалар. Әммә, хәҙерге бер талай тормош тәжрибәһе булған оло кеше күҙлегенән сығып фекерләй башлаһаң, был ағайҙарҙың уй-кисерештәре башҡалар уйлағанса бигүк ябайҙан да булмағандыр. Улар ҙа балаларын һағынғандыр, йәлләгәндер, улар өсөн ҡайғырғандыр, моғайын... Бәлки, һәр ғаилә эсендә була торған аңлашылмаусанлыҡ ситуацияларында, кемеһенеңдер бер аҙ сигенеп, бер-береһенә юл биреп, уртаҡ тел табырға тырышырға кәрәклеген аңлап етмәү уларҙың айырылышыуының төп сәбәптәренең береһе була торғандыр. Тик ағайҙар ғына ла ғәйепле түгелдер, бәлки, тип тә уйлап ҡуям. Халыҡта әйтәләр бит әле, "атта ла, тәртәлә лә", тип... Ә алдараҡ әйтеп үткән "мөхәббәт" - айырылышыуҙы аҡлар өсөн уйлап сығарылған һылтауҙарҙың береһе генәлер, моғайын. Кешеләрҙе һәр саҡ нисек тә генә булһа юлдан яҙҙырырға әҙер йөрөгән шайтан, уларҙың ҡолағына, ана шуның һымаҡ матур һүҙҙәр шыбырлап, донъяларҙы бутай, ахырыны...

Ошо хаҡта әллә күпме һүҙ шыйыҡлатырға була. Нисек кенә булһа ла, нәтиәжәлә Марат менән Фәнисә икеһе лә атайһыҙ үҫте. Үҙҙәрендә мәктәп булмағанлыҡтан, Фәнисә Мараттарҙың ауылына килеп, урта мәктәпте тамамланы. Шул ваҡытта танышып алды улар. Яратышып өйләнештеләр. Бер-бер артлы өс балалары донъяға килде. Үҙҙәре тулы булмаған ғаиләлә нисек үҫкәндәрен иҫләй-иҫләй, тик балаларының бәхетен ҡайғыртып, ошо көнгәсә ифрат та татыу ғына йәшәп яталарҙыр, тип уйлап йөрөгәнем. Хаталанғанмын. Марат менән Фәнисә лә айырылышҡан! Балалары атайһыҙ үҫә! Улар минең туғаным булмауына ла ҡарамаҫтан, шулар өсөн әле булһа ла борсолам. Өс баланың бәхете хаҡына булһа ла бер-береһенә "һыйып" йәшәнәләр ине улар... Үҙҙәре ҡасандар тулы булмаған ғаиләлә тәрбиәләнеп үҫкән кешеләрҙә һәр төрлө айырылышыуҙарға ҡарата "аллергия" булырға тейеш тә ул, минеңсә. Һәр хәлдә, тап шулайҙыр тип уйлай инем ошоғаса...

Күптән түгел Маратты урамда осраттым. Хәл-әхүәлдәр һораша торғас, ни өсөндөр, үҙенең атаһы хаҡында һүҙ ҡуҙғатты ул. Хәҙер инде ныҡ ҡартайған атаһы улына һыйынырға уйлап килгәнмелер, әммә Мараттың атаһын бер ҙә "ҡарағыһы" килмәгәнен һиҙҙем. "Мин бала саҡта мине көтмәгән атайҙы хәҙер ни өсөн мин ҡарарға тейеш?.." - тип һөйләнде ул. Эй, ҡатмарлы тормош... Заманында улын ҡайғыртмаған атай кешенән хәҙер инде улы "үс алған" һымаҡ килеп сыға. Бер яҡтан, был бик тә ғәҙел булып тойолоуына ҡарамаҫтан, ҡарт кешене ғәфү итеп, уға ярҙам ҡулы һуҙһа, Маратҡа, моғайын, Аллаһ Тәғәләнән оло сауап булыр ине... Марат, Фәнисә һәм башҡаларҙың исемдәре үҙгәртеп алынды, әлбиттә. Эйе, исемдәр башҡа, әммә ҡылымды яныртып булмай, йәмәғәт...

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

БЫЛ - ҠЫҘЫҠ!

# ИР-ЕГЕТТӘР КҮБЕРӘК

**Башстат мәғлүмәттәре буйынса, республикала балаларҙың күпселеге никахы теркәлгән ғаиләләрҙә тыуа - 82,5 процент. Шул уҡ ваҡытта иң көслө репродуктив осор бергә ғүмер итеүҙең тәүге биш йылына тура килә. Атап әйткәндә, балаларҙың 26,1 проценты никахтың тәүге йылында тыуа. 38,4 проценты бер-дүрт йыл тәжрибәгә эйә ғаиләләргә тура килә.**

Былтыр Башҡортостанда бөтәһе 49315 бала тыуған. Ул 2016 йылға ҡарағанда 11,3 процентҡа аҙыраҡ. Шулай итеп, 2017 йылда төбәктә 25483 малай һәм 23832 ҡыҙ донъяға килгән. Башҡортостанда мең ҡыҙға уртаса 105-107 ир бала тыуа.

Былтыр тыуғандарҙан 37,8 проценты - беренсе сабыйҙар. Икенсе булып тыуғандарҙың өлөшө 40,1 процент тәшкил иткән, өсөнсө һәм артабанғы тыуымдар 22 процентҡа арткан. Башҡортостанда балаларҙың 17,3 проценты никахһыҙ ғаиләләрҙә донъяға килгән.

Башҡортостанда, бөтә Рәсәйҙәге кеүек, ир-егеттәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар иҫәбендә юғары пропорцияһыҙлыҡ һаҡлана. Республика статистиктарының һуңғы мәғлүмәттәре буйынса, Башҡортостанда бер мең ир-егеткә уртаса 1132 йәки һәр ҡайһыһына 1,132-шәр ҡатын-ҡыҙ тура килә. Өҫтәүенә, йәш менән пропорцияһыҙлыҡ арта бара. Атап әйткәндә, 0-15 йәштәге һәр мең малайға 953 ҡыҙ тура килһә, 30-49 йәштәге һәр мең ир-егеткә - 1036 ҡатын-ҡыҙ, 60-69 йәштәге бер мең ир-уҙаманға - 1405 ҡатын-ҡыҙ. 70-те уҙғандар араһында был пропорцияһыҙлыҡ тағы юғары. Был йәш категорияһында һәр мең иргә 2332 ҡатын тура килә.

МИЛЛӘТ БАЛҠЫШЫ

**Баш ҡалабыҙҙа "Евразия йөрәге" Халыҡ-ара сәнғәт фестивале өсөнсө йыл үткәрелә һәм ул республика халҡы өсөн матур бер йолаға әйләнде. Салауат Юлаев һәйкәле янындағы амфитеатрҙа 8 июндән 12 июнгә тиклем бер нисә көн ағымында барған ҡыҙыҡлы күренештәрҙе күреп ҡалырға теләүселәр райондарҙан, башҡа төбәктәрҙән йыйыла. Быйыл да, көндәр һалҡынса тороуға ҡарамаҫтан, тамашасы ла, сараларҙа ҡатнашыусылар ҙа аҙ булманы.**



# МИЛЛИ КЕЙЕМ КЕЙЕП...

Фестиваль сиктәрендә Милли кейем байрамы ла ойошторолдо. Йылдағыса, был күренеш байрамдың иң сағыу өлөшө булды. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, был йола йәш быуында милли кейемдәргә ҡарата иғтибар һәм ихтирам уятыу, милли кейем төрҙәрен белеү һәм һаҡлау маҡсатында үткәрелеп килә. "Башҡорт милли кейеме" тип башланған проект яйлап киңәйеп, бөгөн инде төрлө милләт кейемдәре кимәленә барып етте. Шулай ҙа төп баҫым үҙебеҙҙең милли кейемдәргә яһала.

Төрлө район, төрлө ырыу, ерлек кейем төрҙәре килгәйне байрамға. Һәр береһендә бер үҙенсәлек, башҡаларҙан айырмалы булған һыҙаттар күҙгә ташлана. Кемдәрҙәлер - традицион селтәрҙәр, икенселәрендә - арҡыры яға, өсөнсөләрҙә - тамбурлы алъяпҡыстар, дүртенселәрҙә - сигеүле балитәктәр, бишенселәрҙә таҡыялы япмалар... Шундай сағыулыҡ, байлыҡ, күркәмлек.

Тәү ҡарашҡа уҡ айырылып торған бер төркөмгә күҙем төшөп, барып танышмай ҙа булдыра алманым. Милли кейемдәре боронғолоғо һәм үҙҙәрендә ниндәйҙер айырым милли һыҙаттар һаҡлағанлығы менән ҡараштыи йәлеп иткән апайҙар ысынлап та ҡунаҡтар - ҡурған башҡорттары булып сыҡты. Ҡурған өлкәһе Сафакүл районы Ҡалмаҡ-Әбдерәш ауылынан Гөлсара Лоҡманова өс киленен һәм апаһын алып килгән байрамға. Барыһы ла үткән быуат оҫталары ҡулында эшләнгән кейем-биҙәүестәрҙә. "Был яғаны миңә инәйем 15 йәшемдә эшләп биргәйне, шунан һаҡлайым, - тип һөйләй инәй түшен ябып ятҡан биҙәүесе тарихын. - Комсомол сағымда "кәрәкмәй" тиһәм дә инәйем яһаны, биш ҡыҙына ла ҡомартҡы итеп тапшырҙы. Башымдағы француз яулығым да үҙемә бирнә булып килгән әйбер ул. Килендәремдәге яулыҡ-ҡашмауҙар ҙа боронғо, уларҙы мин ололарҙан һатып йәки ҡомартҡыға алып ҡалғанмын. Һәр береһе бер хазина уларҙың" . Бына бит, рухлы йәндәр Ҡурған һынлы Ҡурғандан милли кейемдәрен күрһәтергә, башҡаларҙы күрергә тип килеп еткәндә, бындағылар ни йөрәк менән ситтә ҡалырға тейеш?

Тағы ла бер үҙенсәлекле кейемгә тап булдым. Уның хужабикәһе Ишембай районы Ҡолғона ауылынан Раушания Мусина булып сыҡты. Ул өләсәһе Бибиғәлимә (1880-1964) теккән күлдәкте кейеп килгәйне. Боронғоса ирекле бесеүҙәге күлдәк бөгөнгө заманса костюмдарынан бер яғы менән дә ҡайтыш түгел. Бына ниндәй оҫта булған халыҡ тегенселәре һәм әле беҙ белмәгән-күрмәгән күпме кейем төрҙәре бар икән.

Аллы-гөллө костюмдар парады Салауат Юлаев һәйкәле янына ҡуҙғалып, Зәки Вәлиди урамы аша "Ватан" этнопаркына төштө. Унда рәсми теркәлеү үтеп, дуҫлыҡ әйлән-бәйләнендә әйләнде. Меңдән ашыу кеше теркәлеп рекорд һанын һуҡҡан халыҡ майҙанда сихри бер калейдоскоп йәки йыһандағы йондоҙҙар әйләнеше һымаҡ булып күренде. Күҙ алдынан төрлө кейемдәр, йөҙҙәр, костюмдар үтте. Үҙ халҡы кейемендә булған тиҫтәләгән төр милләт вәкиленең һәр береһенең йөҙөндә үҙ милләте өсөн ғорурлыҡ тойғоһо сағылыш таба ине.

Байрамда бигерәк тә йәштәр, парлы, бала-сағалы ғаиләләр булыуы ҡыуаныслы күренеш булды. Ә республика ағинәйҙәре инде әллә ҡайҙан күренеп тора, бер иштән сынъяһау кейенешеп, балҡып йөрөйҙәр.

Был сара үтте лә китте. Әммә улар ябай теркәү булып ҡына үтмәне, ә әллә күпме халыҡта ойоп ятҡан рухты уятып, сәмде ҡуҙғытып, илһамды талпындырып ебәрҙе. Кемдәрҙер был көндө бығаса ҡулына ла тотмаған милли кейемен кейеп ҡараны, берәүҙәр ошо сараға тип бағышлап биҙәүес алды, икенселәр тәүге тапҡыр башына япма һалды. Был да файҙа. Шулайтып, берәр аҙымлап, мыҫҡаллап булһа ла милли асылыбыҙға, ысынбарлығыбыҙға ҡайтып барабыҙ, тарихи миллилегебеҙҙе бөгөнгө тормош кимәленә, заман әйләнешенә сығарабыҙ. Шулай булғанда, миллилектән айырылмағанда, юғалмабыҙ, таралмаҫбыҙ, тарҡалмаҫбыҙ, тип ышанам.

# ...ҠУРАЙҘАРҘА ҺЫҘҘЫРЫП

"UFA - Kuraifest" проекты милли уйын ҡоралыбыҙ - башҡорт ҡурайына арналды. Проект сиктәрендә Башҡортостан Республикаһы Ҡурайсылар ойошмаһы форумы үтте. Форумда БР мәҙәниәт министры урынбаҫары Рәнис Алтынбаев, ҡурай оҫталары Азат Айытҡолов, Юлай Ғәйнетдинов, Артур Ғайсаров һәм башҡа белгестәр, уҡытыусылар, артистар, студенттар ҡатнашты. Шулай уҡ Ырымбур һәм Мәскәү ҡалаларынан килгән ҡунаҡтар ҙа булды. Төрлө йәштәге, ҡараштағы һәм кимәлдәге форумсыларҙың теләге бер ине: ҡурайҙы һаҡлау, пропагандалау, йәштәрҙе өйрәтеү, оҫталар үҫтереү.

Шул көндөң кисенә инде ҡурай үҙе сәхнә түренә сыҡты. Ҡурайҙа халыҡ, эстрада, эстрада-электрон һәм классик көйҙәр уйналды. Төрлө һәм сит халыҡтар музыка ҡоралдарына ла ҡушылып һыҙҙырҙы ҡурай. Бер һүҙ менән әйткәндә, уйнатты ла, уйлатты ла, йырлатты ла, бейетте лә тыңлаусыларын моңло ябай көпшә үлән.

Был сараның төп һәм мөһим ваҡиғаһы ла булды - ҡурайҙың Башҡортостан Республикаһының төбәк милли музыка ҡоралы булараҡ билдәләнеүе тураһындағы патент тапшырылды. Был мәртәбәле билдәне БР мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова ҡабул итеп алды һәм таныҡлыҡ Республика халыҡ ижады үҙәгендә һаҡланасаҡ.

Байрамдың концерт программаһын 10 йәшлек кенә һәләтле ҡыҙыҡайыбыҙ, "Зәңгәр ҡош" Бөтә Рәсәй йәш таланттар конкурсы финалисы, "Ирәндек моңдары - 2018" Төбәк-ара башҡорт йырын башҡарыусылар бәйгеһенең балалар араһындағы еңеүсеһе Ләйсән Золотарева ҡурай хаҡындағы риүәйәт менән асып ебәрҙе. Артабан иһә ҡурайға бәйле булған халҡыбыҙҙың арҙаҡлы шәхестәре телгә алынды. Айҙар сәсән, Ҡаһым түрә, Салауат батыр, Ишмөхәмәт Мырҙаҡаев, Йомабай Иҫәнбаев, Ишмулла Дилмөхәмәтов һәм башҡа данлы ата-бабаларыбыҙҙың исемдәре, һүрәттәре сыҡты сәхнә экранына, улар ижад иткән көйҙәр яңғыраны, йырҙар башҡарылды.

Тамашасыларҙы был көндө үҙ сығыштары менән Рәсәйҙең атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисы Азат Айытҡолов, барыбыҙ ҙа яратып өлгөргән "Zaman", "Дар-Ман", ZAINETDIN төркөмдәре, "Урал моңо - 2018" Халыҡ-ара төрки йәштәр бәйгеһе еңеүселәре, Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы ҡурайсылары һөйөндөрҙө. Һәм быларҙың барыһын да Башҡортостан Республикаһы Халыҡ инструменттары милли оркестры биҙәп ултырҙы.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.**













✓ *Ғалимдар өлкән кешеләрҙең ниндәй интеллектуаль эшмәкәрлек менән шөғөлләнеүе тураһында ла ҡыҙыҡһынған. Улар бында китап, гәзит уҡыуҙы, өҫтәл уйындарын, шулай уҡ ат сабыштарында ставкалар ҡуйыуҙы индергән.*



*ИНТЕРНЕТТАН*



# КҮНЕГЕҮҘӘР...

## мейегә лә кәрәк

■ Мейе өсөн күнегеүҙәр ҙә кәрәк. Неврологтар күберәк уҡырға кәңәш итә. Шулай уҡ төрлө уйындар ҙа ярҙам итә. Ҡытай ғалимдары 65 йәште үткән 15 меңдән ашыу кешене тикшергән. Тәүге тапҡыр табиптар уларҙың сәләмәтлек торошон 2005 йылда баһалаған. 2006-2012 йылдарҙа был тикшереүҙәр тағын ҡабатланған. Ғалимдар өлкән кешеләрҙең ниндәй интеллектуаль эшмәкәрлек менән шөғөлләнеүе тураһында ла ҡыҙыҡһынған. Улар бында китап, гәзит уҡыуҙы, өҫтәл уйындарын, шулай уҡ ат сабыштарында ставкалар ҡуйыуҙы индергән. Өлкән йәштә ниндәй ҙә булһа интеллектуаль эшмәкәрлек хәтер юғалтыу кеүек күңелһеҙлектәрҙән ҡотҡара ала.

■ Үҫмер саҡта организм төрлө үҙгәрештәргә дусар була. Тап ошо мәлдә күп ҡыҙҙарҙа һимереү барлыҡҡа килә. Ә матурлыҡ стандарттары ябыҡ формаларҙы рекламалай. Ошо образға тура килмәгән ҡыҙ диетаға ултыра. Әммә был бөтөн осраҡта ла яҡшы тамамланмай, ти Канада ғалимдары. Һынауҙарҙа 3300 өлкән класс уҡыусыһы ҡатнашҡан. Диетала ултырыусылар иртәнге аштан баш тарта, етмәһә, спиртлы эсемлектәр эсеү кеүек насар ғәҙәттәр уларҙа йышыраҡ осрағанлығы асыҡлана. Диета һаҡламаған ҡыҙҙар иһә күпкә сәләмәт йәшәү рәүеше алып бара икән.

Тағы бер тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, 1980 йылдар башынан 1990 йылдар уртаһына тиклем арауыҡта тыуыусылар алдағы быуындарға ҡарағанда һимереү менән йышыраҡ яфалана. Ғалимдар фаразлауынса, 35-44 йәшкә еткәс, уларҙың 70 процентында артыҡ ауырлыҡ буласаҡ.

■ Ланкастер университеты хеҙмәткәрҙәре йөрәктең ишемик ауырыуҙары, миокард инфаркты, яман шеш үҫешенә йоғонто яһаған процестарҙы анализлаған. Баҡтиһәң, кешенең рационындағы эсемлектәр мөһим факторҙар булып сыҡҡан. Бында беренсе урынға йәшел сәй сыҡҡан. Йәшел сәйҙәге флавоноид кардиологик сирҙәр хәүефен кәметә. Был флавоноид ҡан тамырҙарын таҙарта.

■ Ғалимдар раҫлауынса, билдәле бер диета ҡулланып, күҙҙәрҙең төҫөн үҙгәртергә була. Кешенең күҙенең төҫөн меланин пигменты билдәләй, ә ул үҙгәреп тора. Йәғни, был пигменттың әҙерәк йәки күберәк булыуынан сығып, күҙҙәрҙең төҫө билдәләнә. Ә уның күләменә ризыҡ ярҙамында тәьҫир итергә була. Мәҫәлән, көн һайын сәтләүек, бал ашарға яратыусыларҙың күҙҙәренең төҫө асығыраҡ була. Зәйтүн майы ярҙамында ла йомшаҡ төҫ килеп сыға, сөнки был майҙың составында линолен һәм олеин кислоталары бар. Имбирле сәй күҙҙәрҙең ялтырап тороуына килтерә. Тимергә бай шпинат күҙҙәрҙе сығыуыраҡ итә, сөнки ул күҙҙәрҙе тынысландыра, балыҡ, диңгеҙ продукттары A, B, C, D, E, K витаминдарына, шулай уҡ кальций, тимер, магнийға бай булғанлыҡтан, ошо уҡ тәьҫиргә эйә. Күҙҙәрҙең төҫөнә кейемдең төҫө лә йоғонто яһап, уны бер аҙ үҙгәртеп ебәрә ала.

*СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ*

# АУЫҘ АША - ЙӨҘ АУЫРЫУ



**Бөгөн сәләмәтлек тураһында һүҙ алып барғанда ниндәй генә ҡараштарға тап булмайһың: берәүҙәр прививка яҡлы, икенселәр - ҡырҡа ҡаршы; берәүҙәр традицион медицина яҡлы булһа, бәғзеләр халыҡ медицинаһына нығыраҡ ышана; кемдер организмының һәр тауышын тыңлап эш итһә, ҡайһылар үҙенең эске тауышын тыңлап та тормай, медицина учреждениеһы юлын тапай башлай. Нисек кенә булмаһын, һәр осраҡта ла кеше һайлау хоҡуғына эйә һәм ул үҙенсә хаҡлы. Шулай ҙа иң ҡәҙерле булған сәләмәтлегеңде белгестәр ҡулына тапшырыу, һәр хәлдә, уларҙың кәңәштәрен тыңлау дөрөҫөрәктер. Бөгөн беҙ Медицина профилактикаһының республика үҙәге менән хеҙмәттәшлек итеүсе табип Гөлнур НИҒМАНОВАның һүҙҙәренә ҡолаҡ һалырға тәҡдим итәбеҙ.**

➔ **Гөлнур Хәмзә ҡыҙы, бик йыш беҙ эске ағзаларға иғтибар йүнәлтәбеҙ, ә бына күп ауырыуҙар ауыҙ аша инә тигәнгә артыҡ иғтибар бирмәйбеҙ. Был әйтем туҡланыу хаҡында булһа ла, ауыҙ ҡыуышлығы ла, тейешле иғтибар булмағанда, сир сығанағы булып тороуы мөмкин бит инде...**

- Эйе, ауыҙ ҡыуышлығы температураһы 37 градус тәшкил итә, унда һәр саҡ дымлы, бик күп йыйырсыҡтар бар һәм һөҙөмтәлә уларҙа 300 төрлө микроорганизм йәшәй. Әлеге ваҡытта уларҙың 180-е генә яҡшы өйрәнелгән. Микроорганизмдарҙың 80 процентын бактериялар: спиракхедтар, кокктар һ.б. тәшкил итә. Тағы бер төркөм - кандида бәшмәктәре. Барыһына ла балаларҙың ауыҙ ҡыуышлығындағы кандидоз таныштыр. Шулай уҡ төрлө пицелиялар һәм бәшмәктәр бар. Барлыҡ был микроорганизмдар ауыҙ ҡыуышлығындағы йыйырсыҡтарҙа, телдә, аңҡауҙа һәм теш ҡаҙнаһында туплана, шунда үрсей.

➔ **Ә улар унда нисек эләгә?**

- Организмдағы микроорганизмдар күләме тирбәлеп тора. Бала тыуғанда улар бик аҙ булһа, 5-7 көндә барлыҡ микрофлора барлыҡҡа килә. Улар беҙгә ризыҡ, һыу һәм һауа аша инә һәм уңайлы мөхиткә тап булып, үрсей. Тештәге ҡуныҡтың бер грамында 300 миллиард микроорганизм бар. Ә төкөрөк биҙендә - 300 миллион. Ауыҙ ҡыуышлығында кариес барлыҡҡа килтергән микроорганизмдар ҙа, шул уҡ ваҡытта уны иҫкәртеүсе төркөм дә бар. Шуға күрә, уны дөрөҫ тәрбиәләп торорға кәрәк.

➔ **Кариестан тыш, был микроорганизмдар тағы ниндәй ауырыуҙар тыуҙырыуға сәбәп булып тороуы ихтимал?**

- Тәмәке тартыу, алкоголь ҡулланыу урындағы иммунитетты түбәнәйтә һәм бының эҙемтәһе стоматит, гингивит кеүек сирҙәргә, хатта онкология һәм лейкоплакия кеүек етди ауырыуҙарға килтереүе мөмкин. Чикаго университеты ғалимдары үҙҙәренең тикшеренеүҙәре барышында ауыҙ ҡыуышлығында хатта ололарҙа аҡыл тайпылышына килтергән бактериялар булыуын да асыҡлаған.

➔ **Уйлап ҡараһаң, шул тиклем күп микроорганизмдың кире тәьҫире сәләмәтлекте ҡаҡшаталыр бит?**

- Тәбиғәттә бөтөн нәмәлә лә гармония булған кеүек, был осраҡта организмдың да һаҡланыу факторы бар. Ул - төкөрөк. Тәүлегенә төкөрөк биҙҙәре литр ярым шыйыҡса эшләп сығара һәм уның күләме тәүлектең төрлө ваҡытында төрлөсә. Төнөн, әлбиттә, әҙерәк. Шулай уҡ төкөрөк бүленеүе ашауҙың миҙгел рационына ла бәйле: йәйгеһен - күберәк, көҙөн һәм ҡышын - аҙыраҡ. Йәш тә ҙур йоғонто яһай. Кеше ни тиклем олораҡ, төкөрөк тә шул тиклем аҙыраҡ бүленә. Был процесс шулай уҡ ашҡаҙан-эсәк тракты, бауыр, бөйөр торошона, сирҙәргә һәм ҡабул иткән дарыуҙарға ла бәйле. Гормондар, глюкокортикоидтар йәки цитостатиктар ҡабул иткәндә, химия терапияһы үткәндә ауыҙ ҡыуышлығы микрофлораһы үҙгәрештәр кисерә. Төкөрөк ауыҙ ҡыуышлығын йыуа, барлыҡ йыйырсыҡтарҙы, микрофлора тупланған урындарҙы таҙарта. Ашағандан һуң ауыҙ ҡыуышлығындағы микроорганизмдар бер ни тиклем кәмей, сөнки улар ризыҡ менән бергә ашҡаҙанға төшә һәм ундағы кислоталы мөхиттә үлә.

➔ **Ауыҙ ҡыуышлығында микроорганизмдарҙың саманан артыҡ үрсеүенә нимәләр булышлыҡ итә?**

- Дөрөҫ эшләнмәгән теш протездары, дөрөҫ башҡарылмаған санитар-гигиена процедуралары ла сәбәп булып тора. Мәҫәлән, теш щеткаһын йыш алыштыраһығыҙмы? Ҡағиҙә булараҡ, уны ай һайын алыштырыу кәрәк. Теште таҙалағандан һуң, щетканы һабынлы һыуҙа йыуыу зарур. Сөнки йыуыныу бүлмәһендә йылы һәм дымлы, был да микроорганизмдарҙың үрсеүе өсөн уңайлы мөхит. Шулай уҡ ауыҙҙы сайҡау өсөн тәғәйенләнгән антисептиктар менән дә саманан тыш мауығырға ярамай. Улар файҙалы бактерияларҙы кәметеп, киреһенсә, патологик микрофлораны үрсетеүгә йоғонто яһауы бар.

➔ **Ауыҙ ҡыуышлығы микрофлораһын тейешле кимәлдә тотоу өсөн нимәләр эшләргә кәрәк?**

- Үрҙә әйтелгәндәрҙән сығып, шундай һығымта яһағы килә: даими рәүештә стоматологҡа барыу, теш щеткаһын йыш алыштырыу, ашағандан һуң тештәрҙе таҙартыу кеүек ҡағиҙәләрҙе үтәү ауыҙ ҡыуышлығының файҙалы микрофлораһын һаҡлаясаҡ. Ошо тәү ҡарауға әһәмиәтһеҙ генә күренгән ҡағиҙәләрҙе үтәгәндә, сәләмәтлегегеҙ һеҙгә рәхмәтле буласаҡ.

**Земфира ХӘБИРОВА әңгәмәләште.**

*ТӘБИҒӘТ МӨҒЖИЗӘҺЕ*

# БЫЛ КҮБӘЛӘК...

## батша ҡыҙының исемен йөрөтә

**Был күбәләк бар яҡтан да үҙенсәлекле. Тәбиғәт уға матурлыҡты ла, кәүҙә ҙурлығын да һәм башҡаһын да йәлләмәй биргән. Хатта исемен дә ҡыҙғанып тормаған. Бик матур исемдәр йөрөтә был күбәләк.**



Беҙҙең илдә ул Адмирал исеме менән билдәле булһа, башҡа ил ғалимдары был күбәләкте Аталанта тип йөрөтә. Был исемдәр бушҡа бирелмәгән уға. Легенда буйынса, грек батшаһының ҡыҙы Аталанта Ер йөҙөндә иң шәп йүгереүсе булып иҫәпләнгән. Заманында уны ҡыуып үтеүсе йүгерек булмаған, тиҙәр. Ә күбәләктәр араһында иң шәп осҡаны тап беҙ һөйләгән күбәләк иҫәпләнә лә инде. Шуға күрә иң шәп йүгереүсе грек батшаһы ҡыҙы хөрмәтенә был күбәләккә Аталанта исеме ҡушылған. Ғалимдар билдәләүенсә, осоу тиҙлеге буйынса был күбәләккә әлегә тиңләшеүсе күбәләк юҡ.

Беҙҙең ил ғалимдары тарафынан Адмирал исеме лә бушҡа бирелмәгән уға. Уның алғы ҡанаттарының өҫкө яғындағы һәм артҡы ҡанаттарының тышҡы яғындағы арҡылы ҡыҙыл һыҙымдары ысынлап та адмирал салбарындағы лампастарға оҡшап ҡуя. Ошо оҡшашлыҡ арҡаһында ул Адмирал исеме алған. Әйткәндәй, матур ғына түгел, дәү кәүҙәле лә ул был күбәләк. Уның ҡанат йәйеме 6 см-ҙан ашып китә.

Адмирал һәр ваҡыт күсеп йөрөүсе күбәләктәр иҫәбенә инә. Беҙҙең республикаға ул йылы яҡтарҙан июль айҙарында осоп килә. Ваҡыты менән был күбәләк ҡышлап сығырға ла һәләтле, тип билдәләй белгестәр. Йәй дауамында бер нисә быуын үрсетә ала. Туҡланыу яғынан да үҙенсәлекле генә Адмирал. Был күбәләктең ҡорто кесерткәндә һәм шайтан таяғында үҫешә. Шуны ла әйтергә кәрәк, Адмирал Башҡортостандың Ҡыҙыл китабына индерелгән. Шуға күрә, осрай-нитә ҡалһа, уны тоторға тырышыу кәрәкмәй, ә уның матурлығы менән ситтән тороп ҡына һоҡланыу ҙа етә.

**Әғләм ШӘРИПОВ, биология фәндәре докторы.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ҺҮҘЕҢ - ҮҘЕҢДӘ,

## үҙең һүҙеңә килешһә...



**Тоғролоҡ - һүҙҙәребеҙҙә, эштәребеҙҙә һәм хәрәкәттәребеҙҙә дөрөҫ булыу, тигәнде аңлаталыр.**

Тоғро кеше ялған һөйләмәҫ, бер кемде лә алдамаҫ, башҡаларға ҡарата хәйлә ҡормаҫ. Тоғролоҡто Алла мосолмандарға тоғро ҡылған. Бик күп аят һәм хәҙистәрҙә тоғролоҡтоң әһәмиәте аңлатылған. Ҡөрьәндә былай тиелә: "Әй, мөьминдәр, Алланан ҡурҡығыҙ һәм тоғролар менән бергә булығыҙ".

Мосолман - һүҙе үҙенә, үҙе һүҙенә килешкән кешеләр. Мосолман күренгән кеүек булыр, булғаны кеүек күренер.

Мосолман ҡулы һәм теле менән башҡаларға зарар итмәҫ. Үҙе өсөн теләгән нәмәне мосолман ҡәрҙәше өсөн дә теләр. Мосолман хәләл малына һәм аҫҡыһына хәрәм ҡатыштырмаҫ. Ғаиләһенә һәм балаларына харам ризыҡ ашатмаҫ. Бәйғәмбәребеҙ бер хәҙисендә былай тигән: "Мосолманға зарар иткән һәм уны алдаған кеше беҙҙәке түгел".

Ҡөрьәндә былай тиелә: "Кәметеп үлсәй торған үлсәү ҡулланғандарға ҡаты ғазап барҙыр. Улар кешеләрҙән һатып алғанда теүәл иттереп үлсәтеп алыр, ләкин һатҡанда кәм үлсәп һатыр".

Кеше белмәҫ, һиҙмәҫ, тип, былдай эштәрҙә эшләргә һис ярамай. Сөнки эшләгән эштәребеҙҙе Алла һәр ваҡыт күреп тора. Кирамән Кәтибин фәрештәләре гонаһ һәм сауаптарыбыҙҙы яҙып бара. Кешеләрҙе алдаһаҡ та, Алланы алдау мөмкин түгеллекте иҫтән сығарырға ярамай.

Ысын һәм эскерһеҙ мосолман үҙенең тоғролоғо һәм эскерһеҙлеге менән айырылып тора. Ул кешеләр менән аралашҡанда төрлө ауырлыҡтар һәм унайһыҙлыҡтар менән осрашыуға ҡарамаҫтан, хәйләләмәй, аңлашылмаған һәм ялған һүҙҙәр һөйләмәй.

"Дөрөҫлөктә, иман килтергән кешеләр: "Беҙҙең тәрбиәсебеҙ - Аллаһ!" - тиерҙәр ҙә, иманда, диндә һәм тормошта тоғро, ғәҙел һәм ныҡ булырҙар. Үлгән ваҡыттарында уларға рәхмәт фәрештәләре килер һәм: "Һеҙ - хаҡ мөьминдәрһегеҙ. Үлемдән һәм Әхирәт ғазаптарынан ҡурҡмағыҙ. Бәлки, үҙегеҙгә вәғәҙә ителгән йәннәттәрҙең һеҙгә бирелеүенә шатланығыҙ," - тиерҙәр. Беҙ һеҙҙең менән донъяла һәм Әхирәттә дуҫтарбыҙ. Үҙегеҙгә әҙерләнгән йәннәттә күңелдәрегеҙ ни теләһә - шул булыр, унда һеҙгә ни һораһағыҙ - шул бирелер".

Тоғролоҡтан тайпылмаусы мөьминдәрҙе бына ниндәй ҙур бүләктәр көтә! Рәхмәт фәрештәләре уларға бына ниндәй ҡыуаныслы хәбәрҙәр килтерәләр. Быларҙың барыны ла тоғролоҡтоң ни ҡәҙәр юғары һәм бөйөк дәрәжәлә булыуын күрһәтә. Быларға бары тик Алланан ҡурҡыусы, Аллаға ысын күңелдән ғибәҙәт ҡылыусы һәм был донъяла байлыҡ, юғары дәрәжә һәм башҡаларға баш эйеү бығауҙарынан азат булғандар ғына ирешә.

Йөрәгенә Ислам тәрбиәһе һеңгән ысын мосолман үҙ вазифаһына тоғролоҡло һәм биргән вәғәҙәләрен үтәүсе була. Был сифаттар уның йөмгиәттәге урынын билдәләүсе иң мөһим үҙенсәлек булып тора. Был үҙенсәлек уны тағы ла дәрәжәлерәк итә. Былдай сифатҡа эйә булыу мосолмандың хаҡ динле булыуын күрһәтә.

УҢЫШ ҠАҘАН



# ИҢ БАЙ КЕШЕ

## Байығыуҙың етенсе ысулы: "Аҡса эшләү һәләтлегеңде күтәр"

- Бөгөн мин һеҙҙең менән аҡса тураһында түгел, ә һеҙҙең үҙегеҙ, уңыш ҡаҙаныуға йөнһә уңышһыҙлыҡҡа илтеүсе ҡараштарығыҙ, мөнәсәбәттәрегеҙ тураһында һөйләшергә теләйем, - тип мөрәжәғәт итә етенсе көндә Аркад уҡыусыларына.

- Күптән түгел миңә бер йәш кеше килде һәм бурысҡа аҡса биреп тороуымды үтенде. Был аҙымға уны нимә этәрә икәнен һорағас, ул: "Барлыҡ тотоноуҙарымды ҡаплар өсөн эш хаҡы ғына етмәй", - тип яуап бирҙе. Ә мин уға бурысын ҡайтарыу өсөн өҫтәмә резервтары булмау арҡаһында үҙ кредиторҙары өсөн насар клиентҡа әйләнеүен аңлатып бирҙем. Шунан: "Һинә күберәк аҡса эшләргә өйрәнергә кәрәк, үҙеңдең аҡса табыу һәләтлегеңде күтәреү өсөн нимә эшләйһең?" - тип һораным.

- Мин үҙем булдыра алғандың барыһын да эшләйем, - тип яуапланы ул. - Айына алты тапҡыр хужама барып, минең эш хаҡымды күтәреүҙе талап итәм. Ләкин һөҙөмтә юҡ. Минән башҡа берәү ҙә был мәсьәләне хужаһы алдында шул тиклем йыш һәм ныҡышмалы күтәрә алмаҫ ине...

Беҙ был егеттең берҡатлылығына көлә алабыҙ, әлбиттә. Ләкин һеҙ шуға иғтибар итегеҙ: был егет байығыу өсөн кәрәкле төп шарттарҙың береһен яҡшы белә. Унда күберәк аҡса эшләүгә ынтылыш бар.

Байығыу өсөн иң тәүҙә теләк булыуы мөһим. Теләгегеҙ көслө һәм билдәләнгән булһын. Ҡәҙимге дөйөм теләктәр - улар йомшаҡ теләк. Байырға теләйһең икән, аныҡ теләгең булырға тейеш. Бына һин яҡын көндәрҙә биш алтын тәңкә булыуын теләйһең - был һине нисек тә ошо тәңкәләрҙе табырға мәжбүр итеүсе аныҡ теләк. Был теләк уны тормошҡа ашырыуҙың аныҡ ысулдарын табырға ла ярҙам итәсәк. Теләгең бер кимәлдә генә туҡтап ҡалмай, артабан һин ун алтын тәңкәгә хужа булыу тураһында хыяллаһаһың - тағы сараһын эҙләйәсәкһең. Бына шулай, тәүҙә ҙур булмаған аныҡ теләкте ғәмәлгә ашырырға өйрәнгәс, артабан уның ҙурыраҡтарына тотонаһың, бер юлы һәләтлектәрең дә үҫә бара. Шулай байлыҡ туплана.

Теләктәр ябай һәм аныҡ булһын. Әгәр улар артыҡ күп булһа, етмәһә, аныҡлығы ла булмаһа, улар тормошҡа ашмаясаҡ.

Кеше үҙенең төп һөнәрендә лә шулай камиллаша, камиллаша барған һайын аҡса эшләү һәләтлегенә лә үҫә. Мин әле балсыҡ таҡталарға хәрефтәр уйып яҙыу шөғөлө менән мәшғүл саҡта уҡ үҙемдән уңышлыраҡ эшләүселәрҙе күҙәтә һәм быныҡ серҙәренә төшөнөргә тырыша торғайным. Улар бар иғтибарын үҙ эшенә, ҡуйған маҡсаттарына йүнәлтә, уны ныҡышмалы ғәмәлгә ашыра икәненә төшөнгәйнем. Мин дә үҙ алдыма маҡсат ҡуйҙым: мине берәү ҙә уҙып китмәһен. Оҫталығым арта барҙы һәм һөҙөмтә бирҙе.

Тәжрибә һәм белем үҫкән һайын беҙ күберәк аҡса эшләй башлаясаҡбыҙ. Күберәк өйрәнергә, күберәк уҡырға, нығыраҡ камиллашырға тырышып ятҡан кеше яҙмыш тарафынан йомарт бүләкләнергә лә тейеш.

Һәр ваҡыт һине яҡшы яҡҡа үҙгәртә һәм камиллаштыра торған эштәр эшләргә тырышығыҙ, сөнки бары тик маҡсатҡа ынтылған кешеләр генә юғары оҫталыҡ серҙәренә өлгәшә ала. Шуға ла мин һеҙҙе туктауһыҙ үҫештә булырға саҡырам.

Тормошта кешене ҡиммәтле тәжрибә менән байытыусы хәл-ваҡиғалар булып тора. Үҙен хөрмәт иткән һәр кем, мәсәлән, ошо ҡағиҙәләрҙе генә булһа ла күҙәтергә тейеш:

♦ Көсөңдән килгән ҡәҙәре тиҙерәк үҙ бурыстарыңдан ҡотолорға тырыш. Түләү мөмкинлегең булмаһа, бик ныҡ теләгән әйбереңде лә һатып алырға тырышма.

♦ Үҙ ғаиләң тураһында хәстәрлек күр - ғаиләң ағзалары һинең турала тик яҡшы яҡтан уйларлыҡ һәм һөйләрлек булһын.

♦ Васыятнамә төҙөп ҡуй - Хоҙай һине үҙ эргәһенә алғанда тупланған мөлкәтең дөрөҫ һәм тигеҙ бүленгән булһын.

♦ Матди зыян күреүселәрҙе, бәхетһеҙлеккә һәм бәләгә тарыусыларҙы ҡыҙған, уларға ярҙам ит. Үҙеңә ҡәҙерле булған бар кешегә иғтибарлы һәм хәстәрлекле бул.

Шулай итеп, аҡса эшләүҙең һуңғы етенсе ысулы: үҙ һәләтлектәреңде үҫтер. Уҡы һәм белемеңде арттыр. Һөнәреңдең иң камил алымдарына өлгәш.

**Джорж С. КЛЕЙСОН.**
**(Аҙағы).**

СӘЛӘМӘТ БУЛ!



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

## Аҡһым нисек ярҙам итә?

Фекерләү процестарын яҡшыртыу өсөн ризыҡта аминокислоталарҙан торған аҡһым тейешле кимәлдә булырға тейеш. Аҡһымдар - үҫеү һәм организмдың үҫеше өсөн кәрәк булған алыштырғыһыҙ азыҡ матдәләре. Улар кешенең барлыҡ күҙәнәктәрен, туҡымаларын һәм ағзаларын төҙөү, организмдың барлыҡ функцияларын көйләүсе ферменттар, гормондар һәм башҡа берләшмәләр барлыҡҡа килтереү өсөн төп материал булып тора, стрестарға бирешмәүсәнлекте көсәйтә, башҡа бик күп функцияларҙы башҡара.

Азыҡ-түлек аҡһымы алмаштырылыусы һәм алмаштырылмаған аминокислоталарҙан тора. Алмаштырылыусы аминокислоталар организмда башҡа аминокислоталарҙан барлыҡҡа килеүе мөмкин, алмаштырылмағандары организмда барлыҡҡа килмәй һәм мотлаҡ тейешле күләмдә ризыҡ менән инергә тейеш. Шул уҡ ваҡытта алмаштырылмаған аминокислоталар ҙур күләмдә һәм иң яҡшы нисбәттә мал сығанаҡлы аҡһымда була (йомортҡа, һөт, ит, балыҡ һ.б.). Улар юғары биологик ҡиммәтле (тулы ҡиммәтле) аҡһымдар тип һанала, яҡшы эшкәртелеүе һәм үҙләштерелеүе менән айырыла.

Үҫемлек аҡһымы (икмәк, ярма, сәтләүектәр, ҡуҙаҡлылар) алмаштырылыусы аминокислоталар сығанағы булып тора һәм рационда алмаштырылмаған ризыҡтарға дефицит тыуһа, ошо аминокислоталар сарыф ителә. Яҡшы үҙләштерелгән һәм аминокислоталар составы буйынса һөт аҡһымына, иткә яҡын булған соя аҡһымы бер ни тиклем ташламаға эйә. Шуға күрә уларҙы үҫемлек "ите" тип йөрөтәләр һәм һәр ашағанда мал аҡһымын үҫемлек аҡһымы менән аралаштырыу тәҡдим ителә.

Кешенең психикаһы торошо азыҡ-түлек компоненттары һөҙөмтәһендә баш мейеһендә нейромедиаторҙар етештерелеүгә бәйле. Улар азыҡ-түлек аминокислоталарынан барлыҡҡа килә. Мәсәлән, иттә, һөттә, йомортҡала, сояла, сырҙа булған триптофан аминокислотаһы тынысландырыу тәьҫиренә эйә серотонин барлыҡҡа килеү өсөн төп материал булып тора. Икенсе аминокислота - гистидин организм тарафынан нервылар системаһы күҙәнәктәренә сигналдар биреүҙә ҡатнашыусы гистамин эшләп сығарыуҙа файҙаланыла. Фекерләү процесына глицин аминокислотаһының ыңғай йоғонтоһо хаҡында мәғлүмәттәр бар. Мәсәлән, когнитив дисфункцияны коррекциялау өсөн хәрбимедицина вуздары студенттарына 15 тәүлек дауамында тукланыу рационына глицин булған биологик актив өҫтәмә биреү уларҙың иғтибары тупланыуына, күҙ аша алған мәғлүмәтте ҡабул итеү тиҙлеге, эшмәкәрлек артыуына, хаталарҙың кәмеүенә килтерә.

Шулай уҡ углеводтарға бай ризыҡ та серотонин кимәлен күтәрә. Углеводтар төрлө көсөргәнештәр булғанда организмдың энергетик ихтыяжын ҡәнәғәтләндереүҙә мөһим роль уйнай. Углеводтар ябайға (моносахаридтар - глюкоза, фруктоза, галактоза, манноза) һәм ҡатмарлыға (дисахаридтар - шәкәр һәм полисахаридтар - крахмал һәм азыҡ күҙәнәклектәре) бүленә. Рационда азыҡ күҙәнәклектәренең етерлек күләмдә булмауы ҡан тамырҙарының боҙолоуына, был үҙ сиратында артабан кигнитив дисфункцияға килтерә.

**С. КУЗИНА.**
**(Дауамы бар).**



### 18 ИЮНЯ ПОНЕДЕЛЬНИК, ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.15 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15, 17.00, 18.30 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" Брачное шоу (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.55 "На самом деле" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Садовое кольцо". 1-я серия. Детективный сериал (16+).
22.40 Чемпионат мира по футболу 2018. Сборная Туниса - сборная Англии. Прямой эфир из Волгограда.
01.00 "Познер" (16+).
02.00, 03.05 "Свет во тьме". Худ. фильм (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Программа о здоровье (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 17.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00, 03.30 "Судьба человека" с Борисом Корчевниковым (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Склифосовский". Сериал (12+).
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
21.00 "Тетя Маша". Мелодрама (12+).
23.00 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.35 "Версия". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**07.45, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Тайная крепость" (12+).**
**09.30 "Это мы!" (6+).**
**10.00 "Боцман Чайка". Сериал (12+).**
**11.00 "Итоги недели".**
**11.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**12.00 Ф.Буляков. "Море мечты..." (12+).**
**14.00 "100 имен Башкортостана" (12+).**
**14.30 "Упакованные". Худ. фильм (6+).**
**16.00 "Петербургские сезоны в Уфе" (12+).**
**17.00 Дневник фестиваля "Сердце Евразии" (12+).**
**17.30 "Свадьба наизнанку" (12+).**
**18.00 "Бай бакса" (12+).**
**19.00, 22.00, 23.00 III Международный фестиваль искусств-2018 "Сердце Евразии". "Этноночь".**
**21.30 Новости.**
**24.00 "Оскар". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 Р.Шарт. "Мою жену зовут Морис" (12+).**

### 19 ИЮНЯ ВТОРНИК, ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.15 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15, 17.00, 18.30 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" (16+).
16.00 "Мужское/Женское". Ток-шоу .
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.55 "На самом деле" (16+).
19.50 "Пусть говорят!" Ток-шоу (16+).
20.20 "Время".
21.30 "Садовое кольцо". 2-я серия (16+).
22.35 "Оттепель". Сериал (16+).
23.55 "Вечерний Ургант" (16+).
00.30 "Жги!" Драма (12+).
02.25, 03.05 "Умереть молодым". Худ. фильм (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Ток-шоу (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 17.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00, 02.55 "Судьба человека" с Борисом Корчевниковым (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Склифосовский". Сериал (12+).
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
20.45 "Олюшка". Мелодрама (12+).
22.45 Футбол. Чемпионат мира-2018. Россия - Египет. Прямая трансляция из Санкт-Петербурга.
00.55 "Быть в игре". Док. фильм (12+).

### БСТ

**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.45, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Шевели ластами".**
**09.30 "Это мы!" (6+).**
**10.00 "Боцман Чайка". Сериал (12+).**
**11.00 "Бизнес-проба" (12+).**
**11.15 "Учу башкирский язык".**
**11.30 "Семья и город, растем вместе!". Концерт ДТРС "Тамыр".**
**12.00 Б.Бикбай. "Кодаса" (12+).**
**14.00 "100 имен Башкортостана" (12+).**
**14.30 "Салават Юлаев". Худ. фильм (12+).**
**16.00 "Башкортостан - многоликий" (12+).**
**17.00 Дневник фестиваля "Сердце Евразии" (12+).**
**17.15 "Дознание" (16+).**
**17.45 "Свадьба наизнанку" (12+).**
**18.00 "Бай" (12+).**
**19.00, 22.00, 23.00 III Международный фестиваль искусств-2018 "Сердце Евразии". Гала-концерт.**
**21.30 Новости.**
**24.00 "Злоключения Альфреда". Худ. фильм (12+).**
**По окончании Новости (на башк. яз.).**
**02.15 С.Латыпов. "Оль-ля-ля!" (12+).**

### 20 ИЮНЯ СРЕДА, ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.15 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15, 17.00, 18.30 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.55 "На самом деле" (16+).
19.55 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Садовое кольцо". 3-я серия (16+).
22.40 Чемпионат мира по футболу-2018. Сборная Ирана - сборная Испании. Прямой эфир из Казани.
01.00 "Оттепель". Сериал (16+).
02.00 "Вечерний Ургант" (16+).
02.35, 03.05 "Месть". Худ. фильм (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Ток-шоу (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 17.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека" с Борисом Корчевниковым (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Склифосовский". Сериал (12+).
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
21.00 "Плакучая ива". Часть 1-я. Мелодраматический сериал (12+).
23.30 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
02.05 "Версия". Детективный сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Боцман Чайка". Сериал (12+).**
**11.00 "Наука 102" (12+).**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 23.45 "Весело живем" (12+).**
**15.00 "100 имен Башкортостана" (12+).**
**15.30 "Городок АЮЯ".**
**15.45 "Ал да гөл" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Физра" (6+).**
**16.45, 19.00, 22.00 "Интервью" (12+).**
**17.00 "Сердце Евразии". Дневник (12+).**
**17.15 "Моя республика" (12+).**
**17.45 "Свадьба наизнанку" (6+).**
**18.00 "Башкорттар" (6+).**
**19.30 "Алтын тирмә".**
**20.15 "Сәнгелдәк".**
**20.30 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**20.45 "Дорожный патруль" (16+).**
**21.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 "Бала-сага" (6+).**
**24.00 "Человек-оркестр". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 "Бәхетнамә" (12+).**

### 21 ИЮНЯ ЧЕТВЕРГ, ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.15 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" Программа о здоровье (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15, 17.00, 18.25 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" (16+).
16.00 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.55 "На самом деле" (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Садовое кольцо". 4-я серия (16+).
22.40 Чемпионат мира по футболу-2018. Сборная Аргентины - сборная Хорватии. Прямой эфир из Нижнего Новгорода.
01.00 "Оттепель". Сериал (16+).
02.00 "Вечерний Ургант". Развлекательное шоу (16+).
02.35, 03.05 "Дети Сэвиджа". Худ. фильм (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Ток-шоу (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 17.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека" с Борисом Корчевниковым (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Склифосовский". Драматический сериал (12+).
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
21.00 "Плакучая ива". Часть 2-я. Мелодраматический сериал (12+).
23.30 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
02.05 "Версия". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Боцман Чайка". Сериал (12+).**
**11.00, 17.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Учим башкирский язык" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45 "Весело живем" (12+).**
**15.00 "У дачи" (12+).**
**15.30 "Борсаҡ" (6+).**
**15.45 "Кош юлы. Балалар" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Йырлы кәрәҙ".**
**16.45 "Замандаш" (6+).**
**17.30 "Орнамент".**
**17.45 "Современник".**
**18.00 "Уткән гүмер" (12+).**
**19.00, 22.00 "Интервью" (12+).**
**19.30 "Башкорттар" (6+).**
**20.15 "Сәнгелдәк".**
**20.30 "Свадьба наизнанку" (12+).**
**20.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**21.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Колесо времени" (12+).**
**24.00 "Шербурские зонтики". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.15 "Бәхетнамә" (12+).**

### 22 ИЮНЯ ПЯТНИЦА, ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00 Новости.
09.15, 05.30 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15, 17.00, 18.25 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" Брачное шоу (16+).
16.00, 04.40 "Мужское/Женское". Токшоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.55 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
20.00 "Поле чудес" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Садовое кольцо". 5-я серия (16+).
22.40 Чемпионат мира по футболу-2018. Сборная Сербии - сборная Швейцарии. Прямой эфир из Калининграда.
01.00 "Оттепель". Сериал (16+).
02.00 "Вечерний Ургант" (16+).
02.35 "Буч Кэссиди и Сандэнс Кид". Худ. фильм (12+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "О самом главном". Программа о здоровье (12+).
09.55 "О самом главном". Ток-шоу (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека" с Борисом Корчевниковым (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Склифосовский". Сериал (12+).
17.40 "Вести ПФО".
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
21.00 "Плакучая ива". Часть 3-я. Мелодраматический сериал (12+).
24.00 "Холодное танго". Мелодрама (16+).
02.20 "Сорокапятка". Худ. фильм.

### БСТ

**07.00 "С праздником Ураза-Байрам!" Концерт (12+).**
**07.45, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Фиксики".**
**09.00 "Ураза-Байрам". Прямая трансляция.**
**10.00 "Праздник веры и добра!" Концерт (12+).**
**11.00 "Покаяние" (12+).**
**11.30 "Аль-Фатиха" (12+).**
**12.00 Т.Гарипова. "Убежавшие в счастье" (12+).**
**14.00 "В корнях моих песни народа" (12+).**
**15.30 "Странник" (12+).**
**16.30 "Ураза-Байрам". Повтор трансляции.**
**17.30 "Орнамент" (6+).**
**17.45 "Свадьба наизнанку" (12+).**
**18.00 "Йома".**
**19.00 "Хазина о Хазине".**
**19.30 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**20.15 "Сәнгелдәк".**
**20.30 "Йөрәк һүҙе" (12+).**
**20.45 "Большой чемодан" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Наука 102" (12+).**
**23.00 "Байык-2018" (12+).**
**24.00 "Наш зоопарк". Худ. фильм (16+).**
**02.30 Т.Миннуллин. "Мулла" (12+).**

### 23 ИЮНЯ СУББОТА, ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00, 10.00 Новости.
06.10 "Перед рассветом". Худ. фильм (12+).
08.00 "Играй, гармонь любимая!"
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.10 "Ирина Пегова. В роли счастливой женщины" (12+).
11.10 "Теория заговора" (16+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Идеальный ремонт".
12.55 "Испытательный срок". Худ. фильм.
14.45 "Олег Ефремов. "Ему можно было простить все" (12+).
15.40 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
16.40 Чемпионат мира по футболу-2018. Сборная Бельгии - сборная Туниса. Прямой эфир из Москвы.
19.15 "Сегодня вечером" (16+).
21.00 "Время".
21.35 "Садовое кольцо".Сериал (16+).
22.40 Чемпионат мира по футболу-2018. Сборная Германии - сборная Швеции. Прямой эфир из Сочи.
01.00 "Оттепель". Сериал (16+).
02.05 "Отпуск по обмену". Худ. фильм (16+).
04.30 "Модный приговор".
05.30 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

04.45 "Срочно в номер! На службе закона". Сериал (12+).
06.35 "Маша и Медведь".
07.10 "Живые истории".
08.00 "Говорит и показывает Уфа" (12+).
09.00 "По секрету всему свету".
09.20 "Сто к одному".
10.10 "Пятеро на одного".
11.00 "Вести".
11.20 "Вести-Башкортостан".
11.40 "Аншлаг и Компания" (16+).
14.00 "Потому что люблю". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
18.00 "Привет, Андрей!" Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести в субботу".
21.00 "Мишель". 4 серии. Сериал (12+).
01.00 "Звезды светят всем". Худ. фильм (12+).
03.10 "Личное дело". Сериал (16+).

### БСТ

**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.45, 12.30,18.30 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Красная шапка против" (12+).**
**09.30 "Аль-Фатиха" (12+).**
**10.00, 21.00 "100 имен Башкортостана" (12+).**
**10.30 "Большой чемодан" (6+).**
**11.15 "У дачи" (12+).**
**11.45 "Орнамент" (6+).**
**12.00 "Тәмле" (12+).**
**13.00 Замандаш" (6+).**
**13.15 "Учим башкирский язык".**
**13.30 "Бай бакса" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Байык-2018" (12+).**
**17.00 "Республиканский праздник курая, г.Октябрьский" (6+).**
**19.00 "Колесо времени" (12+).**
**20.00 "Весело живем" (12+).**
**20.15 "Сәнгелдәк".**
**20.30 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**22.30, 02.00 "Итоги недели" (на башк. яз.).**
**23.15 "Башкорт йыры-2018" (12+).**
**24.00 "Наш зоопарк". Худ. фильм (16+).**
**02.45 М.Бурангулов. "Шәүрәкәй" (12+).**

### 24 ИЮНЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ, ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00, 10.00 Новости.
06.10 "Вячеслав Невинный. Смех сквозь слезы".
07.30 "Смешарики. ПИН-код".
07.45 "Часовой" (12+).
08.15 "Здоровье" (16+).
09.20 "Угадай мелодию".
10.10 "Марина Ладынина. От страсти до ненависти".
11.15 "Честное слово" с Юрием Николаевым.
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Людмила Гурченко. Карнавальная жизнь" (16+).
13.15 "Любимая женщина механика Гаврилова". Худ. фильм (12+).
14.45 "Вячеслав Невинный. Смех сквозь слезы".
15.40 "Кто хочет стать миллионером?"
16.40 Чемпионат мира по футболу-2018. Сборная Англии - сборная Панамы. Прямой эфир из Н-Новгорода.
19.00 "Звезды под гипнозом" (16+).
20.45 "Что? Где? Когда?" Летняя серия игр.
22.00 "Воскресное "Время".
22.40 Чемпионат мира по футболу-2018. Сборная Польши - сборная Колумбии. Прямой эфир из Казани.
01.00 "Оттепель". Сериал (16+).
02.05 "Уолл-стрит". Худ. фильм (16+).
04.25 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

04.55 "Срочно в номер! На службе закона". Сериал (12+).
06.45 "Сам себе режиссер".
07.35, 03.35 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
08.05 "Утренняя почта".
08.45 "Вести - Башкортостан. События недели".
09.25 "Сто к одному". Телеигра.
10.10 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
11.00 "Вести".
11.20 "Смеяться разрешается". Юмористическая программа.
14.00 "Так поступает женщина". Мелодраматический сериал. 4 серии (12+).
18.00 "Лига удивительных людей". Суперфинал. Развлекательное шоу (12+).
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
00.30 "Лев Яшин - номер один" (12+).
01.35 "Право на правду". Док. фильм.

### БСТ

**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.45 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Фиксики".**
**09.00 "Йома".**
**09.30 "Бай" (12+).**
**10.00 "Перекличка" (6+).**
**10.15 "Выше всех!" (6+).**
**10.30 "Ал да гөл".**
**10.45 "Книга сказок".**
**11.00 "Байтус" (6+).**
**11.15 "Сулпылар".**
**11.30 "Гора новостей" (6+).**
**11.45 "Алтын тирмә" (12+).**
**12.30 Итоги недели (на башк.яз.).**
**13.15 "Учим башкирский язык" (6+).**
**13.30 "Уткән гүмер" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.15 "Весело живем" (12+).**
**15.30 "Башкорттар" (6+).**
**16.00 "Дорога к храму".**
**16.30 "Историческая среда" (12+).**
**17.00 Концерт Халита и Айнура Фатыховых.**
**19.00 "Бизнес-обзор" (12+).**
**19.30 "Свадьба наизнанку" (12+).**
**20.00 "Лидеры региона" (12+).**
**20.30 "Моя республика" (12+).**
**21.00 "Дознание" (16+).**
**21.30 "Итоги недели".**
**22.15 "Специальный репортаж" (12+).**
**22.30 "Красная кнопка" (16+).**
**23.15 "Вечер.com" (12+).**
**24.00 "Петербургские сезоны в Уфе" (12+).**
**01.00 "Наш зоопарк". Худ. фильм (16+).**

ИҒЛАН
**АВТОВЫКУП!** Оплата в день обращения. **8-937-154-04-89**

✓ Ә ни өсөн "тимер леди"? Сөнки унда тимер иткә, борсаҡҡа, хатта сояға ҡарағанда 4-5 тапҡырға күберәк. Бынан тыш, яҫы борсаҡта фосфор, магний, калий, еҙ, марганец, цинк, В төркөмө витаминдары һәм башҡа мөһим компоненттар бар.



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# САЛАУАТ ЮЛАЕВ - ШАҒИР




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**23-сө һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Илдар. Кокарда. Ос. Фудзияма. Еләк. Бөтөн. Еҙем. Вәғәҙә. Этте. Сухоруков. Вәли. Мари. Дәрт. Чикаго. Ураҙа. Рабле. Кафе. Лена. Токио. Ыҙма. Ҡала.

**Вертикаль буйынса:** Бойскаут. Фотосхема. Напредак. Круз. Аласыҡ. Ирек. Лекция. Трест. ЭВМ. Ошаҡ. Армыт. Банк. Радио. Иҙел. Семивеличенко. Вәкил. Кәзә. Исмәғилова.

БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!



# ЯҪЫ БОРСАҠ АША!

**Был ризыҡты "тимер леди" тип йөрөтәләр. Тәү ҡарашка ябай ғына күренгән орлоҡтарҙа аҡһым иткә ҡарағанда күпкә артыҡ.**

Үҫенсәлектәре буйынса был аҡһым башҡа үҫемлектәр менән сағыштырғанда сифатлыраҡ: унда организмға үҫеү, туҡымалар һәм күҙәнәктәрҙең үҫеүе, тергеҙелеүе, яңырыуы, ферменттарҙы, гормондарҙы, һаҡлау компоненттарын барлыҡҡа килтереү өсөн кәрәкле барлыҡ аминокислоталарҙы табырға мөмкин. Аминокислоталар буйынса яҫы борсаҡҡа (чечевица) ҡуҙаҡлылар араһында тиң юҡ, уның менән бары тик соя ғына ярыша ала. Чечевица составының яртыһы углеводтарҙан тора - 100 грамда 300 килокалория бар. Тимәк, туҡлыҡлы иртәнге аш өсөн бик яҡшы!

Ә ни өсөн "тимер леди"? Сөнки унда тимер иткә, борсаҡҡа, хатта сояға ҡарағанда 4-5 тапҡырға күберәк. Бынан тыш, яҫы борсаҡта фосфор, магний, калий, еҙ, марганец, цинк, В төркөмө витаминдары һәм башҡа мөһим компоненттар бар. Улар барыһы бергә файҙалы матдәләр алмашыныуын яҡшыртырға, ҡан баҫымын нормаға килтерергә һәм шешенеүҙе кәметергә ярҙам итә.

Эсәктәрегеҙҙең сәғәт кеүек эшләүен теләйһегеҙме? Менюғыҙға яҫы борсаҡ ризыҡтарын индерегеҙ, сөнки уларҙа күҙәнәклектәр һәм пектин бик күп. Беренсеһе ашҡаҙан-эсәк тракты эшмәкәрлеген көсәйтһә һәм эс ҡатыуҙы булдырмаһа, икенсеһе организмдан матдәләр алмашыныу продукттарын һәм токсик ҡатнашмаларҙы сығара.

Чечевица беҙҙе биофлавоноидтар - ҡандағы холестерин һәм шәкәр кимәлен кәметеүсе, иммунитетты күтәреүсе әүҙем үҫемлек компоненттары менән тәьмин итә. Был мөһим матдәләр араһында мөғжизәле изофлавондар ҙа бар. Улар ҡатын-ҡыҙ өсөн бик мөһим: "интим" өлкәһен сәләмәтлектә тота. Буласаҡ әсәләргә, шулай уҡ башҡа өлкәндәргә яҫы борсаҡтан ризыҡты аҙнаһына ике тапҡыр әҙерләргә кәрәк. Йыш ҡулланыу аш эшкәртеү системаһын тупаҫ туҡымалар менән тултырасаҡ.

Балаларға пюрены 2-3 йәштән бирергә мөмкин. Уны йәшелсәләр менән байытыу ҙа яҡшы - ризыҡ каратиноидтар менән тулыланасаҡ.

Чечевицаның порцияһы (250 грамм) оло кешене 84 процент тимер, фосфор һәм күҙәнәклектәр менән - 38, В1 һәм РР витаминдары менән 30 процентҡа тәьмин итә. Аш, бутҡа, гарнир, салаттар, рагу һәм хатта котлеттар - яҫы борсаҡтан тотош төшкө аш әҙерләргә мөмкин!

Яҫы борсаҡ башҡа ҡуҙаҡлыларҙан тиҙерәк бешә, шулай ҙа күпселек сорттарҙы бешерер алдынан 5-8 сәғәт еботеп алыу яҡшы.

Чечевицанан пюре еңелерәк үҙләштерелә һәм һеңдерелә.

Яҫы борсаҡҡа тоҙҙо, башҡа ҡуҙаҡлылар кеүек уҡ, бешеп сығыр алдынан ғына һалырға кәрәк.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1439 һижри йыл.*

| Июнь (Шәүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 18 (4) дүшәмбе | 3:10 | 4:40 | 13:30 | 20:24 | 21:54 | 23:24 |
| 19 (5) шишәмбе | 3:10 | 4:40 | 13:30 | 20:24 | 21:54 | 23:24 |
| 20 (6) шаршамбы | 3:10 | 4:40 | 13:30 | 20:24 | 21:54 | 23:24 |
| 21 (7) кесе йома | 3:11 | 4:41 | 13:30 | 20:25 | 21:55 | 23:25 |
| 22 (8) йома | 3:11 | 4:41 | 13:30 | 20:25 | 21:55 | 23:25 |
| 23 (9) шәмбе | 3:11 | 4:41 | 13:30 | 20:25 | 21:55 | 23:25 |
| 24 (10) йәкшәмбе | 3:11 | 4:41 | 13:30 | 20:25 | 21:55 | 23:25 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**18 июнь "Mouse story"** (Д. Урбан), әкиәт. Башлана 10.30 6+
**20 июнь Премьера "Иң бәхетле төн!"** (А. Касона), мелодрама 12+
**21 июнь "Ул бит кисә ине"** (А. Әхмәтғәлиева), лирик комедия 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**20 июнь "Приключения обезьянки Бьянки"** (З. Бураҡаева), әкиәт. Башлана 11.00 0+
**21 июнь "Йәшәгән ти..."** (М. Ладо), драмеди 16+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**16 июнь "Сказка синего моря"** (Б. Ходырев). Башлана 12.00, 14.00 0+

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!



# "УРАЛ МОҢО" ФЕСТИВАЛЕ...

## беҙҙең уртаҡ байрамыбыҙ

**"Урал моңо - 2018" Халыҡ-ара төрки йәштәре музыкаль ижады конкурс-фестивале үҙенең еңеүселәрен билдәләне. Төрки донъяһындағы иң абруйлы музыкаль бәйгеләрҙең береһе булған был сарала быйыл Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән һәм сит илдәрҙән 30 йырсы һәм коллектив ҡатнашты.**

"Өфө тураһында башҡаларҙан ишетеүгә ҡарағанда, уны бер тапҡыр булһа ла килеп күреүең яҡшы икән. Башҡорт халҡының бөгөн дә тәбиғәт менән гармонияла йәшәй белеүенә һоҡландым. Баш ҡалағыҙ замандан да артта ҡалмай, сөнки матур йорттары, биналары күп. Шул уҡ ваҡытта йәшеллеккә төрөнөп ултыра, бар ерҙә сәскәләр үҫә. Ә ҡаланы үҙенең наҙлы ҡосағында тирбәлткән йылға, унын ярында торған батырығыҙ Салауаттың мәғрүр һыны уға айырыуса төҫ өҫтәй. Халҡығыҙ асыҡ күңелле, ихлас. Мин үҙемде өйҙә, туғандарым араһында кеүек хис итәм", - Саха Республикаһынан килгән Артур Семеновтың башҡорт еренә, халҡына һоҡланыу һүҙҙәрен фестивалдә ҡатнашыусыларҙың барыһы ла һүҙмә-һүҙ тиерлек ҡабатланы. Телдәребеҙгә, мәҙәниәтебеҙгә, йолаларыбыҙға һаҡсыл ҡараш ҡына түгел, ә йөрәгебеҙҙә туғандаш халыҡтарға хөрмәт һәм яратыу һаҡлай алыуыбыҙ менән оҡшашбыҙ беҙ. Шунын өсөн дә "Урал моңо" фестивале беҙҙең уртаҡ байрамыбыҙға әүерелә.

Ғөмүмән, үҙенең башланғыс осоронан алып "Урал моңо" төрки телле халыҡтарының үҙ-ара аралашыу, уңыштар, яңылыҡтар менән уртаҡлашыу майҙансығы булып тора. "Сылдыс" продюсер үҙәге генераль директоры, баһалама ағзаһы Аржаана Суктер фестивалде төрки донъяһындағы иң олпат бәйге, тип атаны: "Әлеге мәлдә төрки телле халыҡтар үткәргән бер генә конкурстың да быңдай бай тарихы юҡ. "Урал моңо"нда милләтен күрһәтәсәк бәйгеселәр үҙҙәрендә ҙур ғына конкурстар аша үтеп килә, сөнки милли музыка өлкәһендәге яңы тенденциялар менән беҙ тап ошонда танышабыҙ. Быйыл, мәҫәлән, Башҡортостандан Тимур Рамазанов ҡатнашыусылар өсөн планканы тағы ла күтәрҙе, ул сәхнәлә шундай матур шоу эшләне. Ҡаҙағстандың "Мурагер" инструменталистар квартеты сығышы өлгөлө булды". Ҡаҙағстандан килгән махсус ҡунаҡ Азамат Муҡатов та был мәҙәни сараның йәш йырсылар ижады өсөн оло стимул булыуын белдерҙе.

Шуныһы ла ҡыуандырҙы, быйыл Башҡортостанды лайыҡлы күрһәтә алдыҡ. Композитор, республиканың атҡаҙанған мәҙәниәт эшмәкәре, баһалама рәйесе Урал Иҙелбаев та быны һыҙыҡ өҫтөнә алды. "Быңдай фестивалдәрҙә Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, хатта Саха (Якутия) кеүек республикаларҙан килгән бәйгеселәргә еңелерәк. Унда һәләтле йәштәрҙе сит илдәрҙә гастролдәрҙә йөрөрлөк кимәлгә еткереп, бәләкәйҙән махсус тәрбиәләйҙәр. Этно шоу-бизнес милләттәр бер урында тупланып йәшәгән үҙаллы дәүләттәрҙә ныҡ үҫешкән. Шуға ла донъя мәҙәниәтендә уларҙы барыһы ла белә. Республикала был йүнәлеш үҫешмәй. Иң һәләтле балаларҙы йыйып, улар менән шөғөлләнә торған берәй милли студия булһын ине, тип хыялланам. Беҙҙең "Урал моңо" кеүек бик матур фестивалебеҙ бар, әммә әлегә ошондай махсус мәктәптәрҙән килгән йырсылар менән ярышыуы беҙҙең йырсыларға ауырыраҡ. Сөнки улар йышыраҡ үҙаллы үҫешергә мәжбүр. Шуға ҡарамайынса, быйыл башҡорт мәҙәниәте бик лайыҡлы күрһәтелде. Башҡалар менән бер рәттән, беҙҙә лә эстрада ла, этник йүнәлеш тә үҫеш кисерә".

Кем бәйгенең гала-концертын ҡараған, улар быға үҙҙәре лә шаһит булды. Илдар Жамаловтың Учалы ерлегенә генә хас итеп "Буранбай"ҙы йырлауынан тетрәндек, башҡалар өсөн дә ҡыуандыҡ. Әлбиттә, барыһы ла еңеүсе була



алманы. Бигерәк тә тамашасы бөтөн донъя белгестәре уникаль күренеш тип таныған башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарыусыларҙың, шул уҡ Илдар Жамаловтың бүләкләнеүселәр араһында булмауына бер аҙ бошондо. Мәскәү уртаһында үҙенсәлекле заманса мәҙәни утрау булдыра алған "Zaman" төркөмө лә ҡатнашты фестивалдә. Бөгөнгө заман технологияларын ҡулланып, уңышлы ижад иткән, профессиональ музыканттарҙан торған һәм башҡортса йырлаған был төркөм киләсәктә этно-шоу ниндәй йүнәлештә үҫергә тейеш тигән һорауға бер аҙ яуап бирҙе булһа кәрәк. "Тик ижадыңды ситтәргә ҡарағанда үҙ халҡыңдың баһалауы күпкә мөһимерәк", ти төркөмдөң музыканты, композитор Айҙар Хәмзин.



**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Гран-приға һәм фестивалдең төп призына - 250 мең һумлыҡ сертификатҡа Ҡаҙағстандан Рәсүл Ҡорбанов лайыҡ булды. Ул ҡаҙаҡ, үзбәк телдәрендә йырлай, күп бәйгеләр еңеүсеһе. Конкурста уйғыр милләтенең музыкаль мәҙәниәтен күрһәтте.**

**Тимур Рамазанов (Башҡортостан), Сайрана Сюрон (Тыва), "Zaman" төркөмө (Мәскәү ҡалаһы), Артур Семенов (Саха (Якутия) - беренсе, Рәфис Сирусин (Башҡортостан), Ерден Жаксыбеков (Ҡаҙағстан), Юнир Һағынбаев менән Зәлиә Ғәниәтуллина (Башҡортостан), "Йатаған" төркөмө (Башҡортостан), "Мурагер" этно-фольклор ансамбле (Ҡағаҙстан) - икенсе, Жанар Туратова (Ҡырғыҙстан), Жанетта Тонова (Алтай), Азиз Юлдашев (Үзбәкстан), "Istanbul Ruyas" этно төркөмө (Төркиә), Заһир Зәйнетдинов (Башҡортостан) өсөнсө урынға сыҡты. Абай Әмирханов исемендәге махсус приз - думбыра Ишембай районынан Ләйсән Ғәлимоваға тапшырылды. "Туран Дуниясы" Халыҡ-ара йәмәғәт фондының дипломдарына Артур Семенов (Саха (Якутия) менән Илдар Жамалов (Башҡортостан) лайыҡ булды.**

**Ләйсән ДАЯНОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ТУҒЫҘЫНДА НИ БУЛҺА...

## туҡһанында шул булыр

Донъя киң тип таралма, таралған тарыны тауыҡ сүпләй.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Һәр ҡыйынлыҡтың сиселеше бар. Ауырлыҡ шунда: ул сиселеште табырға кәрәк.

**(Эвви Неф).**

Сәйәси кампания - ул милләттең йөрәк тибешен ауыҙ асып тыңлау сәнғәте.

**(Фил Тьюсет).**

Юл насар булған һайын күҙгә ныҒыраҡ саң тула.

**(Михаил Ганин).**

Һорауыңды кире ҡағыуҙарын теләмәһәң... һорама ла ҡуй.

**(Джон Драйден).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер ҡарт вафаты алдынан улын саҡырып алған да былай тигән: "Улым, мин һинең бәхетле булыуыңды теләйем. Бәхетле булыу өсөн ил гиҙ, хыялыңды нисек тормошҡа ашырырға икәнен әйтерҙәр", - тигән. Атаһы үлгәс, улы донъя гиҙеп сығып киткән. Бына ул бер йылғаға етә һәм яр буйында ябыҡ, ас, ҡарт ҡына бер ат йөрөгәнен күрә. "Һин ҡайҙа китеп бараһың, егет кеше?" тип һорай ат. "Бәхет эҙләп китеп барам, - ти, егет. - Бәлки, һин уның ҡайҙалығын беләһеңдер?" "Йәш сағымда мине барыһы ла иркәләне, ашатты, эсерҙе, эшләтмәне, башҡалар хаҡында уйлап та бирмәнем, - ти ат. - Бына хәҙер ҡартайҙым, башҡаларҙың миндә бер эше лә юҡ. Шуға ла һиңә кәңәшем шул: йәшлегеңдә бөтә эште лә эшлә. Башҡаларҙың шатлығы менән шатлан. Хәстәрлектәрҙән ҡурҡма. Шул саҡта бар бәхет тик һинең эргәңдә булыр". Егет артабан китә һәм юл буйында бер йыланды күрә. "Ҡайҙа киттең, егет?" тип һорай йылан. "Бәхет эҙләп китеп барам". "Бына мин дә үҙемдең ағыуым менән ғүмер буйы ғорурландым, - ти йылан. - Минән барыһы ла ҡурҡа, тип уйланым. Юҡ, ҡурҡмайҙар, ә нәфрәтләнәләр. Һәр береһе мине үлтерергә теләй. Шуға ла мин хәҙер барыһынан да ҡасам. Һиндә лә бар ундай ағыу - ул һинең телең. Ҡара, телең берәүҙе лә сәбәпһеҙгә саҡмаһын. Ул саҡта һиңә берәүҙән дә ҡасырға тура килмәҫ һәм һин бәхетле булырһың..." Егет артабан китә һәм ҙур ҡошҡа тап була. Ҡош уның ҡайҙа китеп барыуы менән ҡыҙыҡһына. Егеттең яуабына ҡаршы ул ҡош шулай ти: "Һин күптән ил гиҙәһеңдер. Йөҙөңдө саң баҫҡан, кейемдәрең һәләмәгә әйләнгән. Кешеләр һинән йөҙ бора. Бәхет тә һинең эргәңдә туҡтап торорға теләмәҫ. Шунын өсөн һинең тирәңдә бар нәмәнең матур булыуына өлгәш. Ул саҡта бәхетеңде лә күрерһең".**

**Шул һөйләшеүҙән һуң егет кеше өйөнә әйләнеп ҡайтҡан. Хәҙер инде ул бәхет эҙләп ҡайҙалыр ситтә йөрөргә түгел икәнен ныҡлап аңлаған".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты -
14 июнь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4587
Заказ - 1049/06